ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

5-11 декабрь (аҡъюлай) 2015

№49 (675)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тауыбыҙҙың...**

тыныслығы боҙолмаһын



2

**Ни өсөн кеше тигәнең...**

тәбиғәттең батшаһы итеп тоя үҙен?



8-9

**Хикәйәгә һыймайым,**

романға тарта алмайым...



10

**Кинолар төшөрөлһөн һәм...**

фестивалдәрҙә баһаланһын



11

**ТВ-программа** 14

*"Бер ваҡыт Әбүғалисинаға төндәр буйы йоҡламайынса яфаланып сығыусы берәү килә һәм үҙен дауалауҙы үтенә. Әбүғалисина был кешегә китап бирә һәм шулай ти: "Кистән ят та, ошо китапты бер генә битен, бер генә юлын, бер генә өлөшөн дә ҡалдырмай уҡы", - ти. "Ә мин йоҡлап киткәнгә тиклем күпме ваҡыт үтергә тейеш һуң?" - ти ауырыу. "Белмәйем, - ти Әбүғалисина. - Күпме генә ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, һин уны әрәмгә үткәрмәйәсәкһең..."*

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - ҠЫТАЙҘА

**Өфө ҡалаһының рәсми делегацияһы 28 ноябрҙә Ҡытай Халыҡ Республикаһында эш сәфәре менән булды. Рәсми сәфәр барышында Башҡортостандың баш ҡалаһы менән Цицикар ҡалаһы араһында туғандаш мөнәсәбәттәр тураһындағы меморандумға ҡул ҡуйылды. Быға әҙерлек бер йыл элек Хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүҙән башланды.**

(Дауамы 4-се биттә).



*ИҒТИБАР!*

# БЕРГӘ-БЕРГӘ ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 декабрҙән 13 декабргә тиклем республиканың бөтә почта бүлексәләрендә лә 2016 йылдың тәүге яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә арзаныраҡ хаҡҡа яҙыла аласаҡһығыҙ: Д0665 индексы менән - 469 һум 02 тин, Д0673 индексы менән (юридик берәмектәр өсөн) - 499 һум 02 тин.**



Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләкле булыу мөмкинлеген дә ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Йыл аҙағына тиклем квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Тамара Ғәниеваның "Ғүмер кисеүҙәре", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Нияз Мәжитовтың "История Башкортостана", "Антология поэзии Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", 2016 йылға "Мәктәп календары", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып шатланыуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

- Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыларында баҫмабыҙға 438 һумға (50665) яҙыла алаһығыҙ.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 258 һум. Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 10 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 258 һумға төшәсәк.
- Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә **он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.
- **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

✓ *Торатау ҙа, үҙен-үҙе яҡлап, баш ҡалҡытмаҫ, тимә. "Торатауҙың тыныслығын боҙа күрмәгеҙ, юҡһа, ул кешеләргә бик ҙур афәт килтерәсәк", тип тиккә генә әйтеп ҡалдырмаған бит боронғолар.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҺИНЕҢ ЯЛҠЫНЫҢ...

## беҙгә лә күсә

**"Киске Өфө"нө мин республикала донъя күргән бихисап ваҡытлы матбуғат саралары араһында Өфөнөң генә түгел, ә тотош Башҡортостандың визит картаһына әйләнгән гәзит тип икеләнмәйенсә әйтә алам. Бына ниндәй булырға тейеш ул республикаға исем биргән халыҡ телендә сыҡҡан, ошо милләттең йәшәйеше, көнкүреше, тарихы һәм киләсәге өсөн борсолоусы, уның өсөн янып-көйөүсе, уның менән ғорурланыусы һәм һоҡланыусы баҫма.**

Гәзиттә мөһим һәм икенсе пландағы темалар юҡ - барыһы ла кәрәкле, файҙалы, урынлы. Беренсе биттә баҫылған "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһындағы һәр фекер үҙенең үткерлеге, ҡырҡыу һорауҙары һәм шундай уҡ киҫкен яуаптары менән иғтибарҙы яулай. Шундай ҡыйыу фекерле гәзит уҡыусыларҙың булыуы республикабыҙ, халҡыбыҙ алдына килеп баҫҡан мәсьәләләрҙең тик ыңғай хәл ителеренә ышаныс көсәйтә. Ошо рубрикала абруйлы ил ағалары һәм апайҙары менән бер рәттән, йәштәрҙең дә тауышын күберәк ишетке килә, сөнки уларҙан замана талаптарына яраҡлашмаған, үҙаллы һәм иркен фекерҙәр урғылып тора. Ваҡытында тотоп ала белергә кәрәктәр, тием.

Шулай уҡ күңелемә ятышлы рубрикалар - "Бер кәлимә фекер", "Уңыш ҡаҙан" һәм "Аҡыл - ҡаҙна". Тәү ҡарашҡа бәләкәй генә рубрикалар үҙҙәренә ни тиклем тос фекер, аҡыл-зиһен, төплө кәңәш һыйҙыра һәм уңышҡа этәргес көс-ҡеүәт биреүсе сығанаҡ булып тора. Мәҫәлән, бик һирәк кеше генә махсус рәүештә Роберт Энтони китаптарын эҙләп алып уҡыйҙыр. Ә гәзиттә баҫылған һәм үҙебеҙҙең телдә аңлайышлы итеп тәржемә ителгән, "тәмле" итеп бирелгән яҙманы һәр кем рәхәтләнеп уҡып, тормошонда ҡуллана икәнлегенә шикләнмәйем.

"Алдар менән Ерәнсә ҡорона" ебәрелгән донъяуи ваҡиғаларҙы уҡып көлөп алыу - үҙе бер ғүмер. Тормошта әллә ниндәй ҡыҙыҡтарға юлығып ҡуяһың, шуларҙы яҙып алыусы авторҙарға һәм халыҡ көләмәстәрен үҙ битендә яҡтырта барыусы гәзиткә "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Йолаларыбыҙ менән таныштырып барыуығыҙ ҙа бик мәслихәт. Халҡыбыҙҙың йолаларын онотмайынса балаларға еткереү беҙҙең, ололарҙың, изге бурысы. Ошо йәһәттән "Киске Өфө" бик тә ныҡ ярҙам итә.

"Яҙыусыға өс һорау" рубрикаһы әлегә тиклем тик әҫәрҙәре аша ғына таныш булған әҙиптәребеҙҙе бөтөнләй икенсе яҡтан асырға ярҙам итә. Уларҙың тормошҡа ҡараштарын, донъяуи фекерҙәрен, һикмәткеле яуаптарын уҡыу ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә.

Гәзиткә атлаған юлынан тайпылмайынса барырға, беҙҙе уңыштары менән һөйөндөрөп, артабан да үргә артылыуын теләйем. Һинең дөрләп яныуың беҙгә, гәзит уҡыусыларға ла, осҡон өҫтәй, йәшәү дәрте бирә, "Киске Өфө".

**Нәфисә ҒӘЙНУЛЛИНА.**
**Өфө ҡалаһы.**

КӨНАУАЗ

# ТАУЫБЫҘҘЫҢ...

## тыныслығы боҙолмаһын

**Үткән йәкшәмбе ике йөҙләп кеше йәнә Торатау итәгенә йыйылды. Төрлө партиялар һәм "Рус географик йәмғиәте" вәкилдәре, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалалары һәм ауылдар халҡы, парапланеристар, студенттар, эшҡыуарҙар, журналистар... Төрлө милләттәге, төрлө ҡарашлы, төрлө йүнәлешле, төрлө йәштәге был кешеләрҙе бер маҡсат берләштерҙе - Торатауҙы һаҡлау һәм яҡлау.**

Дөрөҫөргә, был сараны Стәрлетамаҡ "Сода" йәмғиәтенең тәбиғәт ҡомартҡыһы булған Торатауҙы сеймал рәүешендә файҙаланыу буйынса алып барған ныҡышмалы эшмәкәрлегенә ҡаршы сираттағы акция тип атарға кәрәктәр. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, халыҡ фекеренә, халыҡ аҡылына таянып, тауҙы һаҡлап алып ҡалыу яғында булыуын һәр ваҡыт һыҙыҡ өҫтөнә ала килде һәм күптән түгел "Торатау сеймал сифатында ҡулланылмаясаҡ!" тигән ныҡлы ҡарарҙы Башҡортостан халҡына еткерҙе. Был һүҙҙәрҙән һуң тауыбыҙ яҙмышы өсөн борсолған һәр кем еңел һулап та өлгөрмәне, "Сода" компанияһы, Мәскәүгәсә барып етеп, РФ Йәмәғәт палатаһы йыйылышында сығыш яһап, үҙ һүҙен һүҙ итергә маташты.

Мәғлүм булыуынса, предприятие үҙенең тәүге продукцияһын 1945 йылда етештерә башлай. Уның тәүге ҡорбаны булған Шәкетау сеймал сифатында 65 йылда юҡҡа сыҡҡан. Ғалимдар фаразлауынса, бөгөнгө производство ҡеүәттәренең мөмкинлектәре иһә Торатауҙы 5-6 йыл эсендә ер менән тигеҙләйәсәк. Ә артабан нимә? Артабан "Сода" предприятиеһы алдына йәнә ҡайҙан сеймал алырға тигән һорау килеп баҫасаҡ. Шулай булғас, ни эшләп предприятиены оҙаҡ йылдар сеймал менән тәьмин итерлек альтернатив варианттар эҙләмәҫкә? Ул варианттар тураһында ғалимдар ҙа, Республика Башлығы ла асыҡ әйтте бит.

"Сода"ны 7-8 йыллыҡ эш менән тәьмин итеү хаҡына 285 миллион йыл самаһы йәшәгән тауыбыҙҙы юҡҡа сығарырғамы ни инде хәҙер? Быға йәмәғәтселек юл ҡуймаясаҡ. Матди байлыҡ артынан ҡыуып, тауҙарыбыҙҙы емереп, урмандарыбыҙҙы ҡырабыҙ, йылға-күлдәребеҙҙе ҡоротабыҙ икән, тимәк, беҙ үҙ-үҙебеҙҙе лә юҡҡа сығарабыҙ. Былай ҙа бит Ер шарының әле теге, әле был мөйөшөндә таланған, таушалған тәбиғәт, яраланған йыртҡыс һымаҡ, кешелеккә ҡаршы аяуһыҙ ташлана. Торнадо, цунами, ер тетрәүҙәр күпме халыҡты ҡорбан итте. Шуның кеүек, Торатау ҙа, үҙен-үҙе яҡлап, баш ҡалҡытмаҫ, тимә. "Торатауҙың тыныслығын боҙа күрмәгеҙ, юҡһа, ул кешеләргә бик ҙур афәт килтерәсәк", тип тиккә генә әйтеп ҡалдырмаған бит боронғолар. Бына ошо һорауҙар, уларға бәйле борсолоуҙар, күңел әрнеүҙәре йыйҙы ла инде халыҡты Торатау буйына.

- Һуңғы ваҡиғаларға бәйле беҙ, иң беренсе сиратта, Торатауҙы яҡлап сығыш яһарға йыйылдыҡ. Уның ни тиклем уникаль булыуын тағы ла бер тапҡыр үҙ күҙебеҙ менән күреп, артабанғы эш алымдарыбыҙҙы тикшерергә кәрәк беҙгә, - тине тау итәгендә үткәрелгән митингыла сығыш яһап, Башҡортостандың йәмәғәт башланғысындағы экологик хәрәкәт етәксеһе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Руфина Шаһапова. - Бөгөнгө поход эске туризмды үҫтереүгә үҙ өлөшөндө индереү ҙә ул, Торатауға сеймал булараҡ түгел, ә турист, үҙ ерендең патриоты күҙлегенән ҡарарға кәрәк.

Башҡортостан Республикаһындағы Рус географик йәмғиәтенең бүлексә рәйесе урынбаҫары Вячеслав Аброщенко ла был идеяны хупланы.

- Беҙҙең йәмғиәттең маҡсаты - Рәсәй буйлап сәйәхәт итеп, тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Күптән түгел Асылыкүлгә барҙыҡ, ә бөгөн Торатау түбәһенә күтәреләбеҙ. Ул, ысынлап та, Башҡортостандың хазинаһы, бында "Ҡыҙыл китап"ҡа индерелгән һирәк үҫемлектәр үҫә, һоҡланғыс коралдар үҙҙәре генә ни тора! Иң мөһиме, тау халыҡ өсөн изге һанала, - тине ул.

Ялҡынлы сығыштарҙан һуң, ҙур бер төркөм, һуҡмаҡ яһап, изге тауыбыҙға табан атланы. Торатау башына күтәрелгәс, улар ҡулға-ҡул тотоношоп: "Торатауҙы һаҡлайыҡ!", "Йәштәр Торатау менән!", "Мәңге йәшә, Торатау!" тип тирә-яҡҡа оран һалды. Улар тауышына Ишембай районы Ғүмәр ауылынан йыйылып килгән халыҡтың дәррәү тауышы ҡушылды: "Беҙ Торатауҙы ла, үҙебеҙҙең Бүҗә тауын да емермәү яғында!" (Билдәле булыуынса, "Сода"ға сеймал рәүешендә альтернатива итеп Ғүмәр ятҡылығы ла ҡарала).

Нисек кенә булмаһын, бында йыйылған халыҡты тыуған еребеҙгә булған һөйөү тойғоһо берләштерҙе. Артабан Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы мәктәбендә үткәрелгән түңәрәк өҫтәл артында ла һүҙ ошо хаҡта барҙы. Һөҙөмтәлә "Сода" компанияһы өсөн сеймал проблемаһын хәл итеүҙә бойондороҡһоҙ эксперт комиссияһы төҙөргә һәм башҡа альтернатив сығанаҡтарҙы ҡарарға, ә Торатауҙы һис шикһеҙ һаҡларға тигән берҙәм ҡарарға киленде.

Ләкин Торатау буйына бер сыҡтыҡ та, шуның менән эш бөттө, тип тынысланырға ярамай. Бөгөн тауыбыҙ яҙмышы бизмәнгә һалынған. Уның бер яғында - Торатауҙы бары сеймал сығанағы итеп кенә ҡараған ҡеүәтле сәнәғәт предприятиеһы, икенсе яғында - тәбиғәтте бер ниндәй байлыҡҡа ла алыштырып булмай тип иҫәпләгән халыҡ. Айыҡ аҡыл барыбер еңергә тейеш.

**Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.**



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Унда киләсәккә ил үҫешенең төп йүнәлештәре билдәләнде. Был - Рәсәйҙең яңы тарихында 22-се һәм Путин өсөн 12-се Мөрәжәғәтнамә. Сарала Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты. "Был мөрәжәғәтнамә һәр ваҡыттағыса киләсәккә этәргес биреүсе бик көслө һәм ҡеүәтле документ. Республикала Мөрәжәғәтнамәнең төп положениеларын тормошҡа ашырыу өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ", - тине Рөстәм Зәки улы.

✓Республикала намыҫһыҙ төҙөүселәргә ҡарата сараларҙы ҡәтғиләштереү планлаштырыла. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһен уҡығанда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе. Уның билдәләүенсә, республикалағы ошо баҙар бик ныҡ монополизацияланған, төп уйынсылар юғары хаҡтарҙы хуплай. Шуның менән файҙаланып, намыҫһыҙ төҙөүселәр тиҙ ышаныусан кешеләрҙе арзан квадрат метрҙар менән йәлеп итә. Республика Хөкүмәтенә хоҡуҡ һаҡлау органдары менән бергә ошондай енәйәттәргә юл ҡуймаҫ өсөн ҡаты саралар эшләргә ҡушылды.

✓Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев торлаҡ-коммуналь хужалыҡ предприятиелары һәм электр энергетикаһы субъекттары ҡышҡы осорға әҙерләү йомғаҡтары буйынса видеоселектор кәңәшмәһе үткәрҙе. Унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. Иҫкәрмә: көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерлек барышында Башҡортостанда 105 саҡрым йылылыҡ селтәрҙәре һәм 227 саҡрым һыу үткәргес селтәрҙәре алмаштырылған. Ун бер айҙа 891 күп фатирлы йортта ремонт эштәре тамамланған.

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов шағирә Гөлфиә Иҙелбаеваға (Юнисоваға) "Башҡортостандың халыҡ шағирәһе" исемен бирҙе. Ул - республиканың ун бишенсе халыҡ шағиры, ҡатын-ҡыҙҙар араһында иһә икенсе булып ошо абруйлы исемдә алды.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов граждандарҙы ҡабул итте. Ике сәғәтлек аралашыу барышында республика етәксеһенә бер нисә ҡала һәм районда йәшәүсе кешеләр мөрәжәғәт итте. Ҡабул итеү йомғаҡтары буйынса республика министрлыҡтары һәм ведомстволарына тейешле күрһәтмәләр бирелде.

***✓ Ул тойғо кешелә йәки бар, йәки юҡ. Илен һөймәгән, иленә хыянат итә алған ир-егет һөйгәненә лә, ата-әсәһенә лә, дуҫтарына ла хыянат итә алалыр. Сөнки ул намыҫын алға ҡуя белмәй.***



КИЛЕШМӘЙЕМ!

**Таныш ҡатын шылтыратты. Ярһып илай. Унық үҙәген тарта-тарта буталанып һөйләгәндәренән шуны аңланым: улын армияға алалар икән - саҡырыу килгән. Йә, хоҙай! Берәйһе үлгән икән тип торам. "Ярҙам итә алмайһыңмы? Хәрби комиссариатта таныштарың юҡмы? Кемгә барып ҡарарға була ?" - тип өҙгөләнә бисара. "Ә ниндәй ярҙам кәрәк һуң һалдатҡа китеү өсөн?"- тиһәм, "Нисек аңламайһың: беҙ бармайбыҙ армияға, теләмәйбеҙ!" - тип өҙә һуға был. "Беҙ?.." Танышым, минән файҙа юҡлыҡты аңлағас, бәйләнеште өҙөп тә ҡуйҙы, күрәһең, икенселәрҙән ярҙам эҙләргә ашыҡты.**

# АРМИЯ ХЕҘМӘТЕНӘН...

## егеттәр ҡурҡамы, әллә әсәйҙәрме?



Ысынлап та, әле һалдатҡа йәше еткән егеттәрҙең һәм ата-әсәләрҙең нервыларын ҡытыҡлаған мәл. Мин үҙем, асылда, егеттәрҙең хәрби хеҙмәтте үтеүе яҡлы һәм шунлыҡтан, башҡаларҙың да фекерен белеү маҡсатында, эштә, таныштар араһында ошо теманы ҡуҙғаттым. Әлбиттә, һәр кем үҙенсә уйлай. Берәүҙәр "мотлаҡ" ти, икенселәр әрменең йөҙ төрлө насар һәм файҙаһыҙ яҡтарын телгә ала, өсөнсөләр бөтөнләй битараф.

Танышымдың әрме хеҙмәтен оло бәлә итеп ҡабул итеүе мине, нисектер, уйланырға мәжбүр итте. Ысынлап та, шулай уҡ та ҡурҡынысмы икән улыңды әрмегә оҙатыу? Шул саҡ, ирекһеҙҙән, әсәйемде иҫләнем. Ул үҙенең 7 улын йәмғеһе 15 йыл көттө. Шуларҙың береһе һыу аҫты флотында өс йыл йөрөһә, икеһе Чечняға, береһе Вьетнам ҡыҙыу нөктәләренә эләкте. Бала сағымда өй түбәһендә гәзиткә төрөлгән икмәк киҫәге элеүле тора торғайны. Һалдат хаттары сумаҙан-сумаҙан булып карауат аҫтында, командирҙарҙан килгән маҡтау ҡағыҙҙары түрҙә һаҡланды. Төндәрен алдына улдарының фотоларын теҙеп һалып, әсәйемдең хат яҙғанын йыш күрә инем. Нимә тип яҙған булғандыр инде...

Һалдаттар әсәһенең бер ҡыҙығы ла бар. Етенсе улына әрме ваҡыты килеп еткәс, әсәйемде военком ауыл конторaһы аша телефонға саҡырта ла: "Апай, закон буйынса кинйә улығыҙҙы ебәрмәй алып ҡала алаһығыҙ, һеҙҙең ғаиләнән инде алты егет хеҙмәт үткән", - ти икән. Шул ваҡыт әсә кеше үпкәләп: "Минең етенсе улыма нимә булған? Нишләп һеҙ унан баш тартаһығыҙ? Алығыҙ, кәмһетмәгеҙ улымды", - тип яуаплаған. Ишеткәндәр был хәлде ауылда һөйләп көлөп йөрөнө. Уйлап ҡараһаң, ул ваҡыттарҙа ла егеттәр Афғанстанға эләкте, унан Әзербайжан, Тажикстан сиктәре ҡурҡынысы булды, унан башҡалары ла етерлек ине. Һәр хәлдә, бөгөнгө кеүек "Улымды армияға саҡыралар", тип оло ғауға күтәргәндәрен хәтерләмәйем, ҡурҡһалар ҙа һиҙҙермәгәндәр, сабыр итә белгәндәр, күрәһең.

Статистикаға күҙ һалһаҡ, Рәсәй буйынса армия йәшендәге егеттәрҙән 16 проценты ғына үҙ теләге менән хеҙмәткә китә икән. Тимәк, 7 егеттең береһе генә булып сыға. Былар 2013-2014 йылғы күрһәткестәр. Быйылғы көҙгө саҡырылышта Башҡортостандан армияға барырға тейешле егеттәрҙең 32 проценты ғына алынған. Уларҙың күбеһе 2006 йылғылар һәм юғары белем алып сыҡҡандар, тиелә. 1997 йылғыларҙың, йәғни тап 18 йәштәре тулып, хеҙмәткә алынырға тейешлеләрҙең һаны бик аҙ. Уларҙы, етди сәбәптәрҙән тыш, әсәләре лә нык "һаҡлай", ахыры.

Совет осоронда хәрби хеҙмәтте "ир-ат мәктәбе" тип атай торғайнылар. Ысынлап та, егеттәребеҙ хәрби әҙерлек үтеп, "һалдат һурпаһын" татыһа, тормош көтөүе лә еңелерәк була ине. Ләкин бөгөн был атама, минеңсә, үҙенең асылына яуап бирмәй. Туҡтауһыҙ хәрби реформалар, географик сиктәрҙең үҙгәреүе һөҙөмтәһендә тотош ил күләмендә илһөйәрлек һүрелеп ҡалғандай. Әле тегендә, әле бында һәләк булып ҡалған һалдаттарҙың яҙмышы борсой, уларҙың ата-әсәһе өсөн йән әрней. Бөгөн хәрби хеҙмәт, ҡайһы бер илдәрҙәге кеүек, контракт нигеҙендә генә булырға тейеш, тип иҫәпләй күптәр. Әммә шундай ҙур илде контракт хеҙмәте армияһы ғына һаҡлай аламы икән? Ана шул бөйөк дәүләттең сиктәрен һаҡлау ихтыяжы власть алдына ҙур талаптар ҡуя. Ай кәртәләнһә, кәртәнде нығыт, тигән боронғолар. Илебеҙ ни тиклем киң, мөһабәт булһа, уның "кәртәләре" лә ныҡлы, бөйөк булырға тейеш. Шул сәбәпле 18-ҙән 27 йәшкәсә ир-егеттәребеҙ Рәсәй Армияһы сафтарына хеҙмәткә саҡырыла. Был - уларҙың бурысы.

Ошо тәңгәлдә, әлбиттә, ул баланы мин тыуҙырғанмын, мин үҫтергәнмен һәм ул ниндәй ил алдындағы бурыс, тип ҡаршы төшөүсе әсәләр табылыр. Яуап: ғәҙәти бурыс, һеҙ бала тапҡан, үҫтергән кеүек, уларҙың да һеҙҙе һаҡларға яҡларға тейешле ир-егет бурысы бар. Ә һеҙ, беҙ һәм башҡалар ошо илдә йәшәй.

Танышымдың "Беҙ хеҙмәт итергә теләмәйбеҙ", тигәне ҡыҙыҡ. Ул улын шул ҡәҙәр алдына алған, баҫҡан, хатта уның айырым "мин"е лә юҡ, күрәһең. Ул әсәһе менән ҡушылып, "беҙ"гә әүерелгән. Ә уға бит 18 йәш, ул инде шәхес булып формалашҡан, бер-ике йылдан өйләнергә лә мөмкин. Һәм шул "ир-егеткә" ниндәйҙер ҡыҙ бала ышанып яҙмышын тапшыра була инде...

Илһөйәрлек тойғоһо тигән төшөнсә тураһында кемгәлер нимәлер аңлатыу йәки вәғәз уҡыу урынһыҙ бында, минеңсә. Ул тойғо кешелә йәки бар, йәки юҡ. 18 йәшкәсә ул ғаиләлә һалынмаған икән, тимәк, ҡапылдан килеп тыумаясаҡ. Илен һөймәгән, иленә хыянат итә алған ир-егет һөйгәненә лә, ата-әсәһенә лә, дуҫтарына ла хыянат итә алалыр. Сөнки ул намыҫын алға ҡуя белмәй. "Намыҫ" принцибынан сығып эш итеп өйрәтмәгәндәр. Ә кем өйрәтә уны? Әсәй, әлбиттә. Кешеләге һөйөү тойғоһо, шул иҫәптән Тыуған илгә булған мөхәббәт, әсәй тарафынан яратыла һәм үҫтерелә. Исемдәре ташҡа баҫылған һәм баҫылмаған батырҙарыбыҙҙың, ил һаҡсыларының, башҡалар өсөн ҡорбан булған егеттәрҙең әсәләре балаларын ҡыҙғанмаған йәки йәлләмәгән икән тиһегеҙме? Ҡанат йәйеп ҡурсалау һаҡлау түгел ул, һаҡлар көс ул Аллаһы Тәғәләлә генә. Шунлыҡтан, әрменән алып ҡалам тип сарбаулап йөрөп, уландарығыҙҙың намыҫын кәмһетмәгеҙ, киреһенсә, һынылышлы ваҡыттарында көс-ҡөҙрәт биреүсе булығыҙ. Барһындар улар әрмегә, хеҙмәт үтеп имен-һау ҡайтһындар, йөҙҙәре лә, намыҫтары ла таҙа булыр.

...Танышым аҡса түләп, улын бер йылға йәшереп алып ҡалды. Ай кәртәләнһә, тимәк, ҡайһыларға өмөт самалы...

**Ләйлә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШЛЕКЛЕЛЕК БИҘӘЙ

**Азат БАҘРАНОВ, "Мәскәү һәм Санкт-Петербург студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы" ойошмаһы етәксеһе:** IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек мәлендә беҙ ҡайһы бер шәхестәр, йыйынды ойоштороу кимәле тураһында интернет селтәрендә бик күп негатив мәғлүмәттәр уҡыныҡ. Ҡайһы бер йәштәр, был йыйында беҙҙе ҡатнаштырмайҙар, тип тауыш күтәрҙе, үпкәләрен белдерҙе. Ҡатнаштырмайҙар икән, йәштәр өсөн башҡа төрлө йыйындар ҙа етерлек тә баһа. Төрлө форумдарҙа, стажировкаларҙа, фекер алышыу һәм тәжрибә уртаҡлашыу өсөн ойошторолған сараларҙа ҡатнашырға була. "Таврида" бөтә Рәсәй йәштәр форумы, "Территория смыслов на Клязьме", "Селигер" кеүек йәштәр йыйындары бихисап һәм уларға үҙаллы ғариза яҙып та, республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы аша ла барырға мөмкин. Йәш кеше өсөн быңдай саралар Ҡоролтай йыйындарында ҡатнашыуға ҡарағанда файҙалыраҡ та әле.

Бының менән мин һис кенә лә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының әһәмиәтен кәметергә теләмәйем, уның да бик файҙалы һәм фәһемле, милләттәштәр өсөн кәрәкле булыуын танийым. Ләкин йәштәргә шәхес булараҡ үҫергә, замандан артта ҡалмаҫ һәм үҙ ниәттәрен тормошҡа ашырыу өсөн конкурентлы мөхиттә эшләргә кәрәк. Үҙ-ара ғына ярышырға түгел, бөтән милләт йәштәре менән аралашыу һәм фәһем алыу бик мөһим.

Әлеге көндә Санкт-Петербург һәм Мәскәү ҡалаларында уҡыған башҡорт йәштәре алдына эшлеклелек сифаттары тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйғанбыҙ. Улар төрлө форумдарҙа ҡатнашып, белемдәрен камиллаштырырға тырышып йөрөй. Йәштәр өсөн уҡыу, һәр яҡлап белемен камиллаштырыу, сит телдәрҙе өйрәнеү һәм тәжрибә туплауҙан да яҡшы нәмә юҡ. Был һәр кемдең ҡулынан килә торған эш, бары тик ултырған ерендән тороп, ҡуҙғалып китергә генә кәрәк. Шуға күрә, ҡайһы бер студенттарҙы, тегендә бар, бында ҡатнаш, тип, мәжбүри рәүештә эшләтергә лә тура килә. Һуңынан ул үҙе әүҙемләшеп китә, төрлө сараларҙа ҙур теләк менән ҡатнаша, һәр нәмәне ваҡытында үтәргә тырыша башлай. Мөмкин булмаҫтай күренгән эште лә башлап ебәреү генә фарыз. Шуға күрә, йәштәргә киләсәккә үҫеш юлын күҙалларға ярҙам иткән йыйындарҙан тыш, реаль эштәр талап иткән сараларҙа ҡатнашыу ҙа мөһим. Мәктәпте тамамлап, юғары уҡыу йортонда уҡып сығып ҡына туҡтап ҡалмаҫҡа, ә ғүмер буйы уҡырға, үҙең өсөн яңы асыштар яһарға һәм ғәмәлдә шуны ҡулланырға тейеш беҙҙең йәштәр.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рөстәм Хәмитов Таһир Ибраһимовты Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары итеп тәғәйенләү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Таһир Әсхәт улы быға тиклем Рәсәй Наркотиктар әйләнешенә контроль буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығы начальнигы урынбаҫары булып эшләй ине. Полиция генерал-майоры.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Иглин районына эш сәфәре барышында Башҡортостандағы йәш депутаттар ассоциацияһы ағзалары һәм 2015 йылда йәштәр форумы еңеүселәре менән осрашты. Һөйләшеү демография мәсьәләләре, ауылдарҙа йәшәүселәргә уңайлы йәшәү шарттары тыуҙырыу, эш урындары булдырыу тураһында барҙы.

✓Республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов журналистар менән осрашыуҙа "Төркиә менән мөнәсәбәттәребеҙҙе дауам итергә мөмкинлек биргән ҡарарҙар ҡабул ителер, тип ышанабыҙ", - тип белдерҙе. Шуның менән бергә Премьер-министр Башҡортостандың Төркиә менән артабанғы хеҙмәттәшлеге федераль үҙәктең ҡарарына бәйле буласағын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Башҡортостанда төрөк капиталы ҡатнашлығында 90-дан ашыу предприятие эшләй.

✓Күптән түгел "Wikipedia Asian Month" викимарафоны булып үтте. Бәйгелә популяр интернет-энциклопедияның 42 тел бүлеге ирекмәндәре ай буйына Азияға арнап яңы мәҡәләләр яҙҙы. Бөтә донъя "уҙышында" Башҡорт Википедияһы командаһы ла ҡатнашты. Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нуриев әйтеүенсә, Башҡортостан командаһының яҡынса һөҙөмтәләре ҡыуандыра: бер айҙа 17 волонтер 67 яңы мәҡәлә яҙған, бишәүһе тулыландырылған.

✓15 декабрҙә "Башҡортостан" концерт залында "Байыҡ" бейеү конкурсының гала-концерты үтәсәк. Унда конкурс еңеүселәренән тыш "Мираҫ" фольклор бейеү һәм йыр ансамбле, Стәрлетамаҡ бейеү театры, Чечня, Дағстан, Ҡырғыҙстан, Татарстан бейеүселәре лә ҡатнашасаҡ.

**“Башинформ”дан.**

БАШ ЙОРТТА

# УҢАЙЛЫЛЫҠ...

## иң тәүҙә нвалидҡа кәрәк

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаçары Искәндәр Сираев һәм хакимиәттең Социаль сәйәсәт идаралығы начальнигы Светлана Гәрәева, Ер һәм милек мөнәсәбәттәре буйынса идаралыҡ начальнигы Раил Еникеев журналистар менән Өфөлә йәшәүсе инвалидтарға социаль ярҙам күрһәтеү сараларына арналған матбуғат кәңәшмәһе уҙғарҙы.**

Искәндәр Эрнст улы билдәләүенсә, Башҡортостанда бөгөн 300 меңдән ашыу һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгән инвалид теркәлгән. Был һан республика халҡының дөйөм иçәбенең 7,4 процентын тәшкил итә. Өфөлә йәшәүсе был категория граждандар - 73,5 мең. Шуларҙың 3700-ө балалар. 80 ғаиләлә ике һәм унан да күберәк инвалид бала тәрбиәләнә. Ундай балаларҙың һаны - 165. Бынан тыш, 400 ғаиләлә ауырлыҡ менән хәрәкәт итеүсе балалар тәрбиәләнә.

Инвалидлыҡ арҡаһында эш урынына, башҡа ерҙәргә еңел генә барып етә алмаған граждандар ҙа айырым күҙәтеүгә алынған. Быйыл, мәçәлән, 386 социаль әһәмиәтле инфраструктура объектына рейдтар үткәрелеп, уларҙа эшләгән инвалидтар буйынса ҡала прокуратураһына, тейешле тикшереү уҙғарыуҙы һорап, 46 хат ебәрелгән. 203 етәксегә инвалид хеҙмәткәрҙәргә тейешле шарттар тыуҙырыуҙы талап иткән хат тапшырылған. Өфөлә ауырлыҡ менән хәрәкәт итеүсе граждандарға уңайлыҡтар тыуҙырылған ойошмалар, юлдар картаһы төҙөлә. Әлегәсә ошондай 8 йүнәлеш төҙөлөп бөткән.

Баш ҡалала ауырлыҡ менән хәрәкәт итеүсе кешеләрҙең транспорт сараларын туҡталҡаға ҡуйыуҙы ойоштороу мәсьәләһе буйынса ла ентекле эш алып барыла. Был юçыҡта туҡталҡаларға махсус юл күрһәткестәре ҡуйыла, һыҙыҡтар һыҙыла. Бөгөнгә 51 туҡталҡала үрҙә аталған билдәләр ҡуйылған. Ағымдағы йылда арба-коляска ярҙамында хәрәкәтләнеүсе кешеләр инә алһын өсөн 17 күп ҡатлы йорттоң баçҡыстары һөҙәк юл - пандустар менән йыһазландырылған.

Ҡаланың дөйөм белем биреү учреждениеларында, шул иçәптән, коррекция кластарында һаулығы сикле 2008 бала белем ала. 246 мәктәпкәсә учреждениеның 125-е коррекция һәм белем биреү йүнәлешендә эш алып бара. Үçешендә төрлө тотҡарлыҡтар булыуы арҡаһында яфа сиккән 3 мең бала, шул иçәптән 443 инвалид бала квалификациялы ярҙам ала. Баш ҡаланың ете тиçтә мәктәбендә "Уңайлы мөхит" федераль программа тормошҡа ашырыла.

Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән хеҙмәткәрҙәр һаны - 2362. Мәшғүллек үҙәктәрендә әле 450 кеше эш эҙләүсе булараҡ иçәптә тора. Йыл башынан 205 кеше эш урындары менән тәьмин ителгән.

Өфө ҡала округы хакимиәтендә һаулыҡ мөмкинлектәре сикле граждандарҙың проблемаларын хәл итеү буйынса ведомство-ара комиссия эшләй.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - ҠЫТАЙҘА

(Башы 1-се биттә).



Ҡытай Коммунистар партияһының Цицикар ҡала комитеты секретары Хань Дунань һәм Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың осрашыуы барышында ҡалаларҙың иҡтисадта, инвестицияларҙа, сауҙа һәм эшлекле мөнәсәбәттәрҙә хеҙмәттәшлекте күҙ уңында тотҡан дуçлыҡ стадияһында булыуы билдәләнде. "Өфө өсөн әһәмиәтле ваҡиға булды был, Цицикар ҡалаһы менән халыҡ-ара мөнәсәбәттәр булдырыуҙың иң мөһим мәлдәренең береһе булараҡ ҡала тарихына инер, тип ышанам. Килешеүҙең ике ҡала халҡының тормошон яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәгенә өмөтөбөҙ ҙур", - тине Ирек Ялалов.

Хэйлунцзян провинцияһының Цицикар ҡала округына 1125 йылда нигеҙ һалынған. Ҡаланың майҙаны 42 400 квадрат метр тәшкил итә һәм һигеҙ өйәҙҙән, ете райондан тора. Халыҡтың дөйөм һаны - 5,7 миллион кеше (шуның 1,5 миллионы - ҡала халҡы). Ҡалала машина эшләү, аҙыҡ-түлек сәнәғәте үçешкән, целлюлоза-ҡағыҙ комбинаты бар. Цицикар "ҡорос ҡорамал" ҡалаһы исемен йөрөтә. Бында Ҡытайҙың ауыр машина эшләү корпорацияһы, "Бэймань" металлургия заводы, "Цицикар тимер юл вагон компанияһы" урынлашҡан. Һанлы идара итеү станоктарын эшләү буйынса ике завод бар, улар Ҡытайҙың механика тармағының төп 100 предприятиеһы исемлегенә инә. Хэпин, Цзяньхуа һәм Хуаань хәрби сәнәғәт заводтары илдең именлегенә ҙур өлөш индерә.

Баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Өфөләге кеүек Цицикарҙа ла экология мәсьәләләрен хәл итеүгә, ҡаланы йәшелләндереүгә һәм экологик яҡтан таҙа продукция етештереүгә ҙур иғтибар бүленә.

# ӘҮҘЕМ ХЕҘМӘТТӘШЛЕК

**30 ноябрҙә Ҡытай Халыҡ Республикаһының Рәсәйҙәге илселегендә Башҡортостандың сәнәғәт һәм туризм мөмкинлектәре менән таныштырыу сараһы уҙҙы. Унда эшлекле даирә вәкилдәре һәм рәсми кешеләр ҡатнашты. Сарала ҡатнашыусыларға Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһының Рәсәйҙәге илсеһе Ли Хуэй сәләмләү һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итте.**

- Саммиттарҙы яҡшы ойоштороу, урындағы халыҡтың ҡунаҡсыллығы Ҡытай һәм башҡа илдәрҙең делегацияһында ыңғай тәьçир ҡалдырҙы, - тине илсе. - Һуңғы йылдарҙа республика Ҡытай менән төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлеген киңәйтә. Ҡатмарлы үҙгәрештәр заманында Ҡытай-Рәсәй мөнәсәбәттәре тарихта иң яҡшы осорон кисерә.

- Беҙ, ысынлап та, әүҙем эшләй башланыҡ, һуңғы ике айҙа республика һәм Ҡытай провинциялары араһында ҙур саралар ойошторҙоҡ, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. - Тиҙҙән 10-дан ашыу проектты тормошҡа ашырыу, шул иçәптән металлургия заводы, ауыл хужалығы сеймалын эшкәртеү, аҙыҡ-түлек етештереү, төҙөлөш материалдары предприятиеларын төҙөү ҡаралған. Бынан тыш, Ҡытай эшҡыуарҙары беҙҙә мәҙәни үҙәктәр, сауҙа йорттары һалырға тәҡдим итә. Ошо проекттарҙың күбеһе 2016 йылда ғәмәлгә ашырыла башлаясағына бер ниндәй ҙә шик юҡ.

Ҡытай Халыҡ Республикаһы Башҡортостандың сауҙа партнерҙары араһында бишенсе урынды биләй. 2014 йылда республиканың Ҡытай менән тышҡы сауҙа әйләнеше 685,1 миллион доллар тәшкил иткән, ошо сумманың 79 проценты (541,5 миллион доллар) экспорт тауарҙарына тура килә. Башҡортостандан Ҡытайға турбореактив двигателдәр, нефть һәм нефть продукцияһы, химия сәнәғәте продукцияһы, вертолеттар, көкөрт, бал һәм башҡа тауарҙар оҙатыла. Ә Ҡытайҙан насостар, электр ҡорамалдары, пластмасса әйберҙәр, торбалар, консерваланған йәшелсә һәм еләк-емеш, аяҡ кейемдәре һәм башҡа продукция килтерелә. Башҡортостан Хөкүмәте менән Хэйлунцзян, Ляонин һәм Цзянси провинциялары хөкүмәттәре араһында хеҙмәттәшлек тураһында бер нисә килешеү төҙөлгән.

# ӨФӨБӨҘ ҠУНАҠТАР КӨТӘ

**Өфө ҡала округында 10 декабрҙә Евразия гуманистик форумы сиктәрендә "Ватансылыҡ, толерантлыҡ һәм тел мәҙәниәтен тәрбиәләү, күп мәҙәниәтлелек шарттарында туған телдәрҙе һаҡлау һәм үçтереү" форумы үтә.**

Унда ШОС ойошмаһына ингән илдәрҙән мәҙәниәт, мәғариф, милли сәйәсәт һәм тел сәйәсәте өлкәһендә идара итеүсе органдар вәкилдәре, шулай уҡ Рәсәй төбәктәренән ғалимдар, туған тел уҡытыусылары - барлығы 2 меңдән ашыу кеше ҡатнашасаҡ.

Форум фән, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә дәүләт-ара хеҙмәттәшлекте үçтереүгә, тел сәйәсәте өлкәһендә региондар тәжрибәһен дөйөмләштереүгә, Рәсәй Федерацияһы дәүләт милли сәйәсәте йүнәлештәрен, мәсьәләләрен һәм механизмдарын камиллаштырыуға, белем биреү программаларын артабан үçтереүгә йүнәлтелгән. Сара сиктәрендә шулай уҡ бер ни тиклем дөйөм идеология менән һуғарылған Аҡмулла, Аитов, Гумилев уҡыуҙары, дискуссия клубтары, "50 ПЛЮС. Өлкән йәштең ыңғай яҡтары" күргәҙмәһе, Икенсе Халыҡ-ара "Аҡбуҙат" милли һәм этник кино фестивале кеүек ҙур саралар үткәреү ҡаралған. Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙғарыласаҡ "Мәҙәниәт-ара аралашыу контексында тел сәйәсәте" дискуссия майҙансығында Ҡаҙағстандан, Саха (Яҡут), Мордва һәм Сыуаш республикаларынан туған телдәрҙе һаҡлау һәм үçтереү өлкәһе белгестәре сығыш яһаясаҡ.

# ВАҠЫТЛЫСА БУЛЫРМЫ?

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Төркиәгә ҡаршы иҡтисади санкциялар тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, илебеҙ биләмәһендә Төркиә тауарҙарының ҡайһы бер төрҙәрен индереүҙе күҙ уңында тотҡан тышҡы иҡтисади операцияларҙы ваҡытлыса сикләү индерелә. Санкциялар Рәсәйҙә хеҙмәттәр күрһәтеүсе төрөк компанияларына ла ҡағылды. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан эш биреүселәргә Төркиә граждандарын эшкә йәлеп итеү тыйыла. Бынан тыш, туроператорҙарға һәм турагенттарға Төркиәгә юллама һатмаçҡа кәңәш ителә.

Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев 2016 йылдың 1 ғинуарынан Төркиәнән илгә индереү тыйылған ауыл хужалығы продукцияһы, сеймал һәм аҙыҡ-түлек исемлеген раçланы. Хөкүмәт сайтында урынлаштырылған документҡа ярашлы, тауыҡ, күркә ите, томат, башлы һуған, төçлө һәм брокколи кәбеçтәһе, ҡыяр, әфлисун, мандарин, виноград, алма, груша, абрикос, персик, нектарин, слива, күгән, еләк, шулай уҡ ҡәнәфер, тоҙ һәм таҙа натрий хлориды санкцияға эләккән. Евразия иҡтисади союзы рөхсәт иткән күләмдә шәхси ҡулланыу тауарҙарын индерергә мөмкин.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡалала Маяковский скверы яңыртыласаҡ. Проект документацияһына ярашлы, скверҙа бик күп төҙөкләндереү эштәре ҡаралған. Подрядсы яңы асфальт һәм брусчатка түшәргә, ағастар ултыртырға, рулонлы газон һалырға, эскәмйәләр, яҡтыртҡыстар, урналар ҡуйырға тейеш. Скверҙа 100 метрлыҡ яңы металл кәртә барлыҡҡа киләсәк. Эштәр 2016 йылдың яҙында - көҙөндә башҡарылырға тейеш.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллегендә "Башҡортостан ауыл хужалығы техникаһы" предприятиеһы һәм "Интегралл Групп" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте етәкселәренең эшлекле осрашыуы уҙҙы. Яҡтар ике компанияның импортты алыштырыу һәм продукцияны үçтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен барланы, шулай уҡ Башҡортостан биләмәһендә "Интегралл Групп" фирмаһының филиалдарын асыу һәм белгестәрҙе уҡытыу мәсьәләләре лә тикшерелде.

✓Өфөлә Башҡортостандың Иҡтисади үçеш министрлығы, Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы ярҙамында эшлекле ҡатын-ҡыҙҙарҙың "Уңыш" XI бөтә Рәсәй конкурсының төбәк этабы уҙҙы. Ун бер ҡатын-ҡыҙ уның призерҙары булды. Конкурстың финалы 8 декабрҙә Мәскәүҙә уҙа. Рәсәйҙең иң яҡшы эшлекле ҡатын-ҡыҙҙары "Алтын ҡош" премияһына эйә буласаҡ.

✓Өфөнөң Ленин майҙанына төп Яңы йыл шыршыһы ҡуйылды. Урман ҡупшыҡайының бейеклеге - 28 метр. Боҙ ҡаласыҡтарын асыу 25-27 декабргә билдәләнгән. Өфөлә бөтәһе 19 боҙ ҡаласығын төҙөү планлаштырыла. Хәүефһеҙлек нормалары буйынса уларҙың бейеклеге өлкәндәр өсөн - 2,5, балалар өсөн 1,5 метр тәшкил итәсәк. Яңы йыл композицияларында көнсығыш календары буйынса киләһе йылдың символы - Маймыл да сағылыш табасаҡ.

✓Башҡортостанда Ҡыш бабайҙың ҡунаҡ тирмәһе ҡорола. Ул Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ауылында урынлашҡан. Тирә-йүндә майҙансыҡтар эшләнә, Яңы йыл каникулдары ваҡытында Ҡыш бабай һәм уның ярҙамсылары ҡунаҡтарҙың күңелен асасаҡ. Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, республика туроператорҙары ял итеү өсөн төрлө туристик маршруттар әҙерләгән. Унда Ҡыш бабайҙың тирмәһенә барыу ҙа ҡаралған.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## сит телдә лә матур яңғырай



**Ошо көндәрҙә Өфөлә халҡыбыҙҙың мәшһүр эпосын - "Урал батыр"ҙы башҡортса һәм башҡа телдәрҙә яттан һөйләүселәрҙең республика бәйгеһе булып үтте. 300-ҙән ашыу йәш ҡатнашыусыны үҙ ҡанаты аҫтына алған алтынсы тапҡыр үткәрелгән был конкурсты ЮНЕСКО эштәре буйынса Республика Комитеты, Башҡортостан Мәғариф министрлығы һәм Башҡортостан Социаль технологиялар институты ойошторған.**

Төрлө йәмәғәт ойошмаларынан, белем биреү учреждениеларынан саҡырылған баһалама комиссияларына иң-иңдәрҙе һайлап алыу еңелдән булманы. Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла өҫтәмә һорауҙар бирелде, уларҙың сәсәнлек оҫталығы баһаланды. Ҡатнашыусылар командалар менән дә, шәхси беренселек буйынса ла көс һынашты. Еңеүселәргә төрлө дәрәжә дипломдар, сертификаттар тапшырылды.

Гәзит уҡыусылар беләләр - республикала үткәрелгән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеләре бының менән генә сикләнмәй. Бына нисәмә йылдар инде йәй көндәрендә эпосты башҡорт телендә яттан һөйләүселәр конкурсы уҙғарыла һәм ул хәҙер иң матур традицияға әйләнде. Эпосты башҡорт телендә һөйләүселәр төркөмөнөң баһалама комиссияһы ағзаһы Флорида Фәхретдинова әйтеүенсә, әлеге конкурс йәй көнө уҙғарыласаҡ конкурсҡа йәш ҡатнашыусылар әҙерләүе менән дә әһәмиәтле. Шуға күрә, ике конкурс берен-бере, иң мөһиме, Башҡортостандағы йәш сәсәндәр мәктәбе йөкмәткеһен байытып, тулыландырып тора, тип әйтергә урын бар.

Ҡобайырыбыҙ ниндәй генә телдә яңғыраманы: Рәсәй халыҡтары телдәренән тыш, инглиз, немец, хатта норвег телендә һөйләүселәр ҙә табылды. Сит телдәргә тәржемә иткән саҡта төп нөсхәләге барлыҡ ынйы-гәүһәрҙәр иғтибарға алынмай, йә тәржемә ителмәй юғалып бөтмәйме икән, тигән һорау менән инглиз теле төркөмөндә баһалама комиссияһына рәйеслек иткән сәсәниәгә, БДУ-ның Сибай институтында инглиз теле һәм әҙәбиәте уҡытҡан Асия Ғәйнуллинаға мөрәжәғәт иттек. Шулай уҡ унан ошо сараның әһәмиәте тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашауын һораныҡ. Ул бөгөнгө конкурстан бик ҡәнәғәт ҡалыуын әйтте. "Былтырғы иҫкәрмәләр ҡатнашыусылар тарафынан иҫәпкә алынған, беренсе тапҡыр ҡатнашҡандарға иһә үҙебеҙҙең талаптарҙы йәнә еткерҙек", - тине Асия Солтан ҡыҙы. Әңгәмәсебеҙ шулай уҡ яңғыҙлыҡ исемдәрҙе, геройҙар исемдәрен инглиз теленә тәржемә итеп әйткәндә яңылыштан китә торған типик хатаны ла билдәләп үтте:

- Урал батыр исеме боҙмай әйтелергә тейеш. Күбеһе, Юрал, тип әйтә. Юрал - географик атама. Ә кеше исеме - Урал батыр, Йәнбирҙе, Йәнбикә, Шүлгән - улар тәржемә иткәндә үҙгәртелергә тейеш түгел. Шуны ныҡ итеп аңлата йөрөргә кәрәк. Эпосты инглиз, немец, башҡа телдәргә тәржемә яһаған кешенең уны башҡортса белеүе бик мөһим. Рус теленән тәржемә иткән хәлдә, башҡорт теле менән сағыштырып эшләнергә тейеш тәржемә. Юҡһа, Урал батырҙың "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ" тигән васыятын да, ысын мәғәнәһенә төшөнмәйенсә, "Чтоб хороший конь был у вас", тип яҙып ҡуялар. "Атаһы юлын ҡыуған", тигән нығынған һүҙбәйләнеште лә ҡайһы бер тәржемәләрҙә "Гоняется за отцом", тип яҙалар. Дөрөҫө "беря пример с отца" була...

Башҡорт телендә һөйләүселәр төркөмөндәге баһалама комиссияһы ағзаһы Флорида Фәхретдинова иң уңышлы сығыш яһаусыларҙы атап үтте. Ишембайҙан Әлфиә Ғайсинаның тасуири һөйләү оҫталығын юғары баһаланы, Ағиҙел ҡалаһынан Эльвина Гәрәеваның, иң йәш ҡатнашыусы булыуына ҡарамаҫтан, эпостың 130 юлын ятлауына һоҡланыуын йәшермәне. "Мин - илһөйәр" Республика йәмәғәт ойошмаһы рәйесе урынбаҫары Рәйлә Вәхитова Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты уҡыусыларының эпосты аңлап һөйләүҙәренә баҫым яһаны. Рәйлә Камил ҡыҙы йәш сәсәндәргә: "Башҡорт телен үҫтереү, һаҡлау өсөн һеҙ ниндәй саралар кәрәк тип уйлайһығыҙ?" - тип мөрәжәғәт иткәс, Ленар Байымов атлы бик рухлы йәш әлмөхәмәтовсы: "Телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү өсөн һәр ата-әсәнең үҙ балалары менән өйҙә башҡортса һөйләшеүе генә лә етер ине", - тип яуапланы.

Ошондай сараларҙың иң ҙур әһәмиәте, беҙгә ҡалһа, унда ҡатнашыусыларҙың Ленар Байымов һымаҡ ябай, әммә дөрөҫ һығымталарға килеүендәлер, моғайын.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТАҒЫ ИКЕ ЙЫЛҒА...



**Әсәлек капиталы программаһы йәнә ике йылға оҙайтыла. Был хаҡта Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда Рәсәй Президенты белдерҙе.**

"Бының бюджет өсөн ҡатмарлы икәнлеген аңлайбыҙ, әлбиттә. Элегерәк беҙ бының менән иҫәпләшеү кәрәклеге хаҡында әйтә килдек. Бер ниндәй проблемаларға ҡарамаҫтан, әсәлек капиталын түләй аласаҡбыҙ", - тип белдерҙе дәүләт башлығы. Ғаиләләр бала тәрбиәләргә теләй, уларҙың киләсәгенә, иленә ышана һәм дәүләт ярҙамына иҫәп тота, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Владимир Путин. Әсәлек капиталы программаһы Рәсәйҙә, шул иҫәптән Ҡырымда һәм Севастополдә 6,5 миллиондан ашыу ғаиләне үҙ эсенә алды.

Башҡортостанда әсәлек капиталы тураһында закон тормошҡа ашырыла башлағандан алып бөтәһе 225346 дәүләт сертификаты бирелгән. 110631 кеше аҡсаны төп бурысты түләүгә, торлаҡ алыуға, 46327-һе кредит алмайынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, 5293-ө белем биреүгә, 639-ы сабыйҙы балалар баҡсаһына йөрөтөүгә тотоноу тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән, 125 кеше аҡсаны хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөн булдырыуға йүнәлткән.

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# "ПАРТНЕРЛЫҠ" ХАҠЫ...

**Төркиәгә ҡарата ҡулланылған санкциялар "машинаһының" ни тиклем тиҙ һәм шәп әйләнеүенән сығып, Рәсәйҙең Анкара менән булған бәйләнештәрҙе ҡаты ҡыҫымға алыуын күрергә мөмкин. Анкараның Рәсәй тарафынан ҡуйылған өс шартты - бомбардировщикты бәреп төшөргән өсөн ғәйебен таныуҙы, ғәфү үтенеүҙе һәм күрелгән зыянды ҡаплауҙы - үтәгәндә генә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең яйға һалыныу мөмкинлегенә өмөт итергә була.**



Үҙенден партнерың тип һанаған илдең арҡаға бысаҡ ҡаҙауын күреү икеләтә ауыр. Шуға күрә Рәсәйҙең Төркиә менән булған сауҙа, туризм һәм газ өлкәһендәге бәйләнештәргә "һөжүм" итеүе бер кемде лә аптырауға һалмай. Был - дөрөҫ һәм һөҙөмтәле баҫым яһау. Барыһы, айырыуса көнбайыш өсөн Мәскәүҙең үҙен ошондай ҡаты һәм принципиаль тотоуы ят, буғай. Улар әле һаман беҙҙән Хрущев кеүек ботинка менән өҫтәл сүкеүҙе йә булмаһа киң күңеллелек күрһәтеп, барыһын да онотоуҙы көтә. Ләкин Рәсәй хәҙер икенсе һәм кәрәк урында партнерлыҡ һүҙен тырнаҡ эсенә алыуҙы оҙаҡҡа һуҙмай. Шуға күрә ҡайһы берәүҙәргә урмандағы айыуҙы үртәүҙән туҡтап, үҙенең тәртибенә, үҙ-үҙен тотошона иғтибарҙы арттырыу ҡамасауламаҫ ине.

Бөтә был ваҡиғаларҙа шатланырлыҡ бер нәмә лә юҡ, әлбиттә. Шул иҫәптән, беҙгә лә. Сөнки Төркиәгә ҡарата күрелгән саралар беҙҙең өсөн дә еңел булмаған эҙемтәләргә килтерәсәк. Хәйер, әлеге мәлдә, аҡса һәм матди йәһәттән тәьмин ителеү кеүек әйберҙәр тауар һәм хеҙмәт дефицитын күреп белгән Рәсәй халҡына ғына түгел, ә тотош донъя өсөн икенсе планға күсә башланы, шикелле. Әле күптән түгел генә халыҡ-ара мөнәсәбәттәр нигеҙендә иҡтисади глобалләшеү, үҙ-ара файҙалы хеҙмәттәшлек итеү кеүек принциптар ятһа, бөгөнгө көндә быларҙың барыһы ла ҙур һорау аҫтында тора.

Был үҙгәрештәргә ниндәйҙер баһа биреү һәм алыҫ киләсәккә ҡоролған прогноздар эшләү иртәрәк булһа ла, бөтә был ваҡиғалар һағайтмайынса ҡалмай. Нисек кенә булмаһын, әлегә тиклем капитал, үҙ-ара тауар әйләнеше донъя тотороҡлоғон һаҡлаусы ысулдарҙың береһе булып ҡала килде. Иң хәүефлеһе - уның урынына теге йәки был конфликттан сығыу юлының эҙмә-эҙлекһеҙ дәлилдәргә таянған, оло һәләкәттәргә алып барыусы ысулдар барлыҡҡа килеүе.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баш ауыртыуынан

❖ Ҡайһы берҙә баш ауырта башлағас та ябай ғына массаж эшләү ауыртыуҙан ҡотҡара. Иртәнсәк уянғас та муйынға, сикәләргә, маңлайға, баштың түбәһенә массаж эшләйем. 7-10 минуттан һуң баш ауыртыуы үтә. Унан һуң 1 стакан һалҡын һыуҙы йотомлап эсеп ҡуйығыҙ.

❖ Эфир майҙары ла ярҙам итә. 1 ҡалаҡ үҫемлек майына 2-3 тамсы лаванда һәм бөтнөк (мята) майын тамыҙып, болғап, сикәләргә, маңлайға, ҡолаҡ артына, танау аҫтына һөртөргә.

❖ Баш ауыртыуы организмға һыу етмәүҙең бер сәбәбе булырға мөмкин. Бындай саҡта баш ныҡ итеп ауырта башламаҫ элек 1 стакан һыу эсергә йәки иҙелгән картуф менән йәшелсә салаты йәки еләк ҡушылған эремсек йә йогурт ашарға. Душ ҡойоноу ҙа ауыртыуҙы баҫа.

❖ Баш йыш ауырымаһын өсөн рационда һөт һәм бойҙай ризыҡтарын кәметергә.

### Фалиждан һуң...

❖ Спиртта төнәтелгән үгәй инә үләненең аҡһыл яғын проблемалы урындарға һалып тороу инсульттан һуңғы фалижды еңергә ярҙам итә. Бынан тыш, 2 өлөш үҫемлек майына 1 өлөш медицина спирты ҡушып яһалған май менән ауырыуҙың тәнен ыуып торорға кәрәк.

### Вена тамырҙары ауырыуҙары

❖ 200 грамм иҙелгән мускат сәтләүегенә 1 л араҡы ҡойорға, 14 көн төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 26-шар тамсы ҡабул итергә. Тромбофлебит мәлендә яҡшы ярҙам итә. Дауалауҙы оҙайлы ваҡыт дауам итергә.

❖ Киңәйгән веналарға ҡабаҡтың йомшағын һалып, уны кипкәнсе тоторға.

### Сөйәл

❖ Сөйәлдәрҙе марганцовканың ҡуйы төнәтмәһе менән яндыралар.

### Йүткереү

❖ Балаларҙы ҡоро йүткеректән дауалау өсөн кишер һуты һығып, уға ирételгән шәкәр ҡушырға. Тәмле лә, шифалы ла дарыу килеп сыға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Үҙенең бәсен, дәрәжәһен күтәрергә теләп тә алдашыусылар байтаҡ. Хужаң башҡармаған эш өсөн һине маҡтап ташлаһа: "Юҡ, бында минең ҡыҫылышым булманы", - тип әйтеүе бик ауыр. Күҙҙәрҙе аҫҡа төшөрөп, өндәшмәүҙе хуп күрәбеҙ.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЙӘШӘҮ КӨСӨ...
## аҡҡошта

**Көнкүрештә ҡулланылған һауыт-һабаға төшөрөлгән аҡҡош һүрәттәре, һырлап эшләгән аҡҡош һындарын уңыш, ризыҡ муллығын һаҡлап тороусы символ булараҡ ҡабул итергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта улар, таш ҡаяларға төшөрөлгән аҡҡош һүрәттәре кеүек үк, тотем ҡоштоң үрсеү йолаһының бер өлөшө булырға тейеш.**

Был идея бөтөн халыҡтарҙың, шул иҫәптән, башҡорттарҙың да алдараҡ ҡаралған ҡайһы бер апотропик, йәғни, яуыз көстәрҙән һаҡлаусы, шулай уҡ дауалау йолаларында, мәҫәлән, балаларҙы һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы тотем ҡош - аҡҡош итеп кейендереү, аҡҡоштоң бауыры, йөрәге, "һөтө" ярҙамы менән ауырыған кешеләә тотем ҡоштоң иң яҡшы сифаттарын "уятыу"ҙа сағыла. Әйткәндәй, күп халыҡтарҙа аҡҡош ғүмер биреүсе булып иҫәпләнә. Ошоға оҡшаш идея "Урал батыр" эпосында ла һиҙелеп ҡала: кешесә һөйләшкән аҡҡош йәншишмәнең ҡайҙалығын белә һәм геройҙарға юлды күрһәтергә әҙерлеген белдерә. Бүрәт әкиәтендә һауала йәшәгән өс ҡыҙ-аҡҡош үлгәндәрҙе терелтеү һәләтенә эйә. Нанайҙарҙың халыҡ ижадында ла аҡҡош дауалаусы итеп һүрәтләнә.

Был сюжеттарҙың барыһында ла боронғоларҙың аҡҡошто йәшәү көсө биреүсе сығанаҡ булараҡ ҡабул итеүе күренә. Был фекер шуның менән дә нығытыла - ҡайһы бер йолаларҙа, башҡорттарҙа ла, кешенең йәне аҡҡошҡа әйләнә, тигәнгә ышаналар. Изге кешеләрҙең йәне аҡҡош булып күренә, тиҙәр (Пермь крайы, Барҙа районы).

Сыуаштарҙа Ҡош юлы - кейек ҡаҙҙар юлы, үлгән кешеләрҙең йәне уның буйлап теге донъяға юллана. Эн халҡы үлгән сабыйҙы ҡаҙ ҡанаттары тегелгән бишеккә ерләй. Ата-әсәһе: "Һин бейеккә осоп китәһең, башҡа бер балаға һинең йәнең кәрәк буласаҡ", - тип әйтә. Күрәһең, сыуаштар, эндар ҡаҙҙарҙы йәнде теге донъяға оҙатып йөрөүсе итеп ҡабул итә. Мансиларҙа алтындан йәки баҡырҙан ҡойолған аҡҡош фигуралары үлгән ата-бабаларҙың йәнен һаҡлаусы булған, тигән мәғлүмәттәр осрай. Конда йылғаһындағы изге келәттәрҙең береһендә табылған 14 баҡыр фигура ошоно дәлилләй.

"Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосының (Ғ. Сәләм версияһы) финал өлөшөндә башҡорттарҙа ла ошоларға оҡшаш ышаныуҙар булғанлығын күрәбеҙ. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу фажиғәле һәләк булғас, уларҙың ҡәбере өҫтөндә ике алмағас үҫеп сыға. Уларҙың һутынан ике аҡҡош барлыҡҡа килә, был аҡҡоштар ошо алмағастарҙа оя ҡора. Был фольклор сюжетынан күренеүенсә, башҡорттар эпостың бер-береһенә ғашиҡ ике геройының йәне аҡҡоштарға әйләнеүен мөмкин буған хәл тип иҫәпләй. Етмәһә, был донъя мифологияһы традицияларына ҡаршы килмәй, В. Пропп фекеренсә, "ағаста ултырған ҡош мотивы - үлгәндәрҙең йәне символы".

Боронғо кешеләр кешенең йәне теге йәки был ағзала урынлашҡан, тигәнгә ышанған. Башҡорт телендә "бауыр" һүҙе "йән" тигән мәғәнәлә ҡулланылған. Тотемик ҡараштарҙан сығып, шуны раҫларға була: кешенең йәне тотем йәнлектең йөрәге йәки бауырында урынлашҡан, тигән инаныуҙар ҙа булғандыр. Бына шуның өсөн дә йәнлектең йөрәге менән бауыры юғары баһаланған, улар Хоҙайҙың иң теләгән ҡорбаны тип, уйлағандар. Шуға ла улар менән геройҙарҙы дауалағандар, улар кешегә йән индерә, тип ышанғандар. Аҡҡоштоң йөрәге менән бауыры ла ошондай уҡ йолалар менән бәйле.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТАЙ҆ҺҮҘЕ

**Ата-әсә өсөн сабый баланы бағыу, уны тәпәй баҫтырып, кеше араһына сығарыу мәле татлы ла, үтә йонсоткос та. Тамағын хәстәрләү, аҫтын бер туктауһыҙ ҡоротоп алыу, тәнен һылап тороу, йоҡоһоҙ төндәр, ҡабатланып торған сырхауға ҡаршы көрәш - ата-әсәнән сабырлыҡ талап иткән, бер нисә йылға һуҙылған көндәлек бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр. Баланың йылмайыуы, ятҡан урынынан аяҡ-ҡулын сабыулап талпыныуы, тәпәй баҫып китеүе, тәүге һүҙе, һөйләшә башлауы - былар инде шул ыҙаларың өсөн мул бүләк, йәнеңә яғылған бал һәм май. Мин үҙебеҙҙә һәм уландарыма тағы бер бүләк эшләгәнмен: балаларымдың шул ҡабатланмаҫ бала сағының ҡайһы бер мәлдәрен ҡағыҙға теркәп барғанмын. Шул яҙмаларымдан өҙөк тәҡдим итмәксе булдым әле "Киске Өфө" гәзитен уҡыусылар иғтибарына.**

# УЛАНДАР ТӘРБИӘҺЕ ТУРАҺЫНДА ҺӘМ...
## ул турала ғына ла түгел



### Алдарға өйрәтмәһәк тә...

Үҫә килә Айнур яңы ҡылыҡтар үҙләштерә башланы. Мәҫәлән, юҡ нәмәне булған кеүек итеп һөйләргә ғәҙәтләнеп алды.

Бер көн эштән ҡайтып инеүемә:

- Илфат ағай килде, беҙ сәй эсеп алдыҡ, - тип һөйләп тора. Әсәһенән һораһам, юҡ, килмәне, ти.

Икенсе тапҡыр:

- Хәлит бабай (күрше) бис шәкәрҙе алды, - ти.

- Кем бирҙе һуң? - тим

- Әсәй бирҙе, - ти. Быны ла уйлап сығарған. "Мин тышҡа сыҡтым", "Мин магазинға барҙым" һ.б. - шыттырып һөйләгән хәбәрҙәре бихисап.

Беҙ баланы алдашырға өйрәтмәйбеҙ. Ул башҡалар менән дә бик һирәк аралаша. Шулай булғас, был ғәҙәте ҡайҙан һуң? Әллә алдашыу, шыттырып хәбәр һөйләү кешенең тәбиғи булмышымы? Яңы теле асылған сабыйҙың булмаған нәмәне бар итеп һөйләп тороуының сәбәптәрен бер нисек тә асыҡлап булмай, әлбиттә. Бәлки, Айнур улым ағаһынан уҙҙырырға, бәхәстә еңергә теләп уйлап сығарып хәбәр һөйләргә өйрәнеп алғандыр?.. Бәләкәсерәктәрҙең ағаларына ҡарағанда көсө лә, таҫыллығы ла самалы. Уның да тиң, хатта юғарыраҡ та булғыһы килә. Шуға ла, бәлки, бәләкәс үҙ фантазияһын эшкә ҡуша. Ғаиләлә яңғыҙ булған балала быңдай ғәҙәттең күҙәтелмәүе лә ихтимал.

Илләмәгәр тормошта алдашыу кеше менән һәр саҡ йәнәш бара. Арабыҙҙа ғүмерендә бер генә тапҡыр ҙа ялғанламаған кеше юҡ. Күпселек изге ниәттән дә ялғанлай. "Ни хәлдәһең, балам?" - тип телефон аша һораған атай менән әсәйебеҙгә, ниндәй генә хәлдә булһаҡ та, "яҡшы", тип яуаплайбыҙ. Һорау бирелгән мәлдә сырхаған, донъя мәшәҡәттәре баҫҡан, хәләл ефетебеҙ менән аралар боҙолған, йәиһә аҡсаһыҙлыҡтан йонсоған ваҡытыбыҙ булһа ла. Яҡындарыбыҙҙы борсоғобоҙ, хафаландырғыбыҙ килмәй. Изге ниәттән сығып алдашабыҙ.

Былай ҙа ҡатмарлы тормошобоҙҙо тағы ла ауырайтып ебәрмәҫ өсөн дә ялғанларға тура килә. Йоҡлап ҡалып, эшкә һуңлаған кеше бер ваҡытта ла дөрөҫөн әйтмәй. Йә ҡапыл килеп тыуған хәл-ваҡиғаға һылтана (балаһы ауырып киткән дә, тиҙ ярҙам машинаһы саҡырып аҙапланған, мәҫәлән), йә башҡа сәбәп таба.

Үҙенең бәсен, дәрәжәһен күтәрергә теләп тә алдашыусылар байтаҡ. Хужаң башҡармаған эш өсөн һине маҡтап ташлаһа: "Юҡ, бында минең ҡыҫылышым булманы", - тип әйтеүе бик ауыр. Күҙҙәрҙе аҫҡа төшөрөп, өндәшмәүҙе хуп күрәбеҙ күп осраҡта.

Аҡъярҙа беҙҙең ташсылар бригадаһында мин эшкә төшкәнгә тиклем шундай хәл була. Бер иптәшебеҙ тиктомалдан булмаған машинаһын "йыуҙырып" ташлай. Көндәрҙең береһендә: "Машина һатып алдым, бөгөн йыуҙырам", - тип әйтеп һала ул. Бер кемдең дә ышанғыһы килмәй быға. Сөнки коллегабыҙ аҡсаны башҡаларҙан артыҡ алмай, башҡа килем сығанағы ла юҡ. Ике бала тәрбиәләй өҫтәүенә. Уның теленән бер кем дә тартмаған - үҙе башлап әйткән. "Дүрт тәгәрмәсенә - берәрҙән", - тигән бригадир, буштан килгән һыйҙы көсәп. "Запаскаһы ла бар бит әле", - тигән машина "хужаһы".

Матур йыуғандар. Тик машинаны күрә алмағандар. "Ҡатыным Орскиға магазинға китте", - тигән хужа. Икенсе, өсөнсө, башҡа көндәрҙә лә ул машинаһына ултырып урамға сыҡмаған. Эш хаҡы алған һайын була торған эскенән һуң: "Һин алдайһың, машина алмағанһың", - тип битенә бәреп әйтәләр машина "алған" иптәшебеҙгә. Ул ғәрләнә, намыҫын һаҡлап, йоҙроҡ менән кәмһетеүсеһенә ташлана.

Мәғәнәһеҙ алдашыу был. Уға биреләүселәр ҙә йыш ҡына осрап ҡуя. Араларында ауырыуҙар - ниндәйҙер мания менән арбалыусылар ҙа осрай, әлбиттә.

Үҫал ниәт менән ялғанлаусылар, мәкер ҡороусылар - алдаҡсыларҙың иң хәтәрҙәре һәм ҡурҡыныстары. Улар быға фәҡәт үҙ файҙаларын ҡайырыу, ҡара уй-ниәттәрен, алама эштәрен һәм ҡылыҡтарын йәшереү маҡсатында бара. Ундай кешеләрҙән алыҫыраҡ тороу хәйерле. Балаларыбыҙҙың эскерһеҙ алдашыуы, насар ғәҙәткә әүерелеп, тормошта үҙ урынын даулау инструменты булараҡ файҙаланылмаһын ине...

**Айбулат ҒАФАРОВ.**
**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# КЕМДЕ КӘМЛӘҺӘҢ...
## шуға зар булырһың



**Миңә тормош юлында тупаҫ әҙәмдәр менән һирәк осрашырға тура килә. Бәлки, шуғалыр ҙа әле һөйләйәсәк хәлде бик ауыр кисерҙем.**

Банк кассаһына ингәнемдә артымдан бер кем дә юҡ ине. Күп тә үтмәне, бер ҡатын башын тығып, асыулы тауыш менән: "Тиҙерәк сыҡ, мин ныҡ ҡабаланам", - тип өндәште. Кассир ҡыҙға ҡараным, ул ауыҙ сите менән генә йылмайҙы ла, тиҙлеген һис арттырмай, мине хеҙмәтләндереүен дауам итте. Ике-өс минуттан теге ханым йәнә кабинаны асты: "Һин нимә, әллә йоҡланыңмы?", өсөнсөһөндә: "Елкәндән һөйрәп сығарғанды көтәһеңме?" - тип екерҙе. Мин дә ашығыуымды һәм бында хәбәр һатыр өсөн инмәүемде аңлатырға тырыштым, ул тыңларға ла теләмәүен белдереп, ишекте шапылдата япты. Ниһайәт, кассир йомошомдо үтәп бөттө, был эш бөтәһе ун минут самаһы ваҡытты алды. Теге ҡатын, минең сығып бөткәнде лә көтмәй, "Дура! Тормоз! Һинең ише ығыштар арҡаһында..." - тип әрләй-әрләй кабинаға тығылды.

Яҡындан аралашҡаным булмаһа ла, был апай менән эш буйынса оҙаҡ йылдар бер тирәлә урала торғайныҡ. Уның кешеләргә тупаҫ икәнен аңғара инем, тик был тиклем дәрәжәлә тип уйламағайным. Үҙемде быҫраҡ һыу ҡойонған кеше кеүек тойоп, ғәрлегемдән илай-илай эшемә атланым. Етәксеһе менән яҡшы мөнәсәбәттәмен, уға барып ошаҡлайым микән, тип уйлайым, үҫ алыуҙың башҡа әллә күпме юлдарын башымдан үткәрәм. Бала саҡта берәйһе ҡыйырһытһа, тылсымсыға әйләнеп, рәнйеткән кешене үҙенә тилмертеп ҡаратып ҡуйғы килә торғайны бит. Шуның ише, "Их, ошо бисәнең дә миңә йомошо төшһән ине, нимә эшләтергә белер инем", тип теләйем һәм был хыялымдың ни тиклем мәғәнәһеҙ булыуынан көлкөм килә. Күпме уйлаһам да, уның ни рәүешле миңә кәм төшөргә мөмкинлегенә башым етмәй. Ә, беләһегеҙме, төштө бит! Йыл ярымдан был ханым минең яныма "моя дорогая" ла "моя милая" тип кенә килеп йөрөй башланы.

Баҡһаң, әлеге ханым да минең кеүек бәйләргә ярата икән. Интернетта ҡул эштәремде күреп ҡалған да, дуҫлыҡ тәҡдим итте, ҡабул итмәгәс, үҙемде эҙләп табып, теге йәки был өлгөләрҙең һыҙмаларын һорай башланы. Мин ҡарышмай бирҙем. Ләкин һыҙмаларҙың да күбеһе тәжрибәле бәйләүселәргә иҫәп тотоп төҙөлә, һәр кем уларҙы еңел генә "уҡый" алмай. Шулайтып, теге апай миндә күреп ҡуҙе ҡыҙған әйберҙәрҙе бәйләп осона сыҡҡансы яныма консульта-

✓ **Башҡорттар ошо тауға айырыуса ихтирам менән ҡарай, уны изге урынға һанап, хөрмәт итә. Был урын Аллаһы Тәғәләгә инаныусы һәм айырымланып көн итеүсе әүлиә тип аталған мосолмандарҙың төйәге булған.**



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

# ХӘТИРӘЛӘР

## (әҫәрҙән өҙөк)



### Башҡортостан мөхтәриәтен иғлан итеү

Большевиктар Петроградта хакимлыҡ итә башлау менән, Рәсәй ҡул аҫтындағы милләттәрҙең үҙаллылығын танылыуҙары хаҡында 2 ноябрҙә тарихи декларация ҡабул итте. Башҡорт Мәркәз шураһы, был хаҡта кәңәшләшеп, иғлан ителгән декларациянан файҙаланып маташмаҫҡа һәм халыҡты бындай пропаганданан алданыуҙан ҡурсалап, 11 ноябрҙә тарихҡа ингән "Беренсе һандағы фарманды (Приказ № 1)" нәшер иттек, һуңынан совет матбуғатында беҙгә ҡаршы бик оҙаҡ ҡулланылған һәм автономиялы Украинаға вәкил ебәреүебеҙҙе белдергән был фарманда шундай һүҙҙәр ҙә яҙылғайны: "25 октябрҙә Рәсәйҙең Ваҡытлы хөкүмәте төшөрөлгәндән һуң Рәсәйҙә ватандаштар араһында һуғыш дәүере башланды. Беҙ Советтарҙы ҡабул итмәйбеҙ. Сөнки үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы үҙебеҙ ҡаҙанырға теләйбеҙ. Автономияны Советтар ҡулынан алмаясаҡбыҙ, сөнки беҙ үҙ өлкәбеҙҙә инсандың хоҡуҡ һәм ихтыярын үҙ ҡулыбыҙ менән сикләргә риза булмаясаҡбыҙ". Һуңыраҡ, Советтар менән солох төҙөгәндән һуң, Ленин үҙе минән был фарман хаҡында һораны. Мин уға: "Эйе, фарманды мин яҙҙым, ул халҡыбыҙҙың шул замандағы милли хакимиәтен аңлатыу ине. Бында иң мөһиме - Рәсәйҙә анархизм хөкөм һөрөү сәбәпле, Башҡортостандың мөхтәриәтен иғлан итеү кәрәк булды. Сөнки мосолмандарҙан башҡа бер өлкә лә быңса өлкә мөхтәриәтен иғлан итмәгәйне әле", - тинем. Ысынлап та, эш тап шулай ине. Был фарманды иғлан иткәндән һуң, дүрт көн үткәс, 16 ноябрҙә (Европа хисабы менән 29 ноябрь) Башҡортостандың мөхтәриәтен рәсми рәүештә иғлан итеп, милли хөкүмәт төҙөнөк. Кантондарҙа милли ғәскәр ойоштора башланыҡ. Халҡыбыҙ араһынан үҫеп сыҡҡан Юныс Бикбовты хөкүмәт рәйесе итеп һайланыҡ. Минә хәрби һәм эске эштәр тапшырылды. Был мөнәсәбәт менән халыҡҡа мөрәжәғәт итеп баҫтырған декларацияыбыҙҙа Украина менән аңлашыуыбыҙ һәм унда вәкилдәр ебәреүебеҙ хаҡында иғлан иттек. Украинаға һәм Дон казактарына яҙған мөрәжәғәтебеҙҙә 210 йыл элек украиндарҙың Мазепа етәкселегендә, Дон казактарының Булавин етәкселегендә, башҡорттарҙың Морат Солтан һәм һуыраҡ Ибраһим Солтан етәкселегендә Бөйөк Петрға ҡаршы күтәрелештәр ваҡытында союз урынлаштырыуҙарын хәтерләттек. Был мөрәжәғәттәрҙең бик яҡшы тәьҫир ҡалдырыуын һуңынан белдем. Башҡортостандан һуң Ҡырым, унан (иҫкесә 11, яңыса 24 декабрҙә) Төркөстан һәм бер аҙҙан Әзербайжан һәм Ҡаҙағстан йөмһүриәттәре иғлан ителде. Ноябрь айы башында ҡаҙаҡ менәүәрҙәре менән юғарыла иҫкә алынған кәңәшмәләребеҙ барған осорҙа (Башҡортостан мөхтәриәте иғланынан алда) өс карта эшләнем. Уларҙың беренһе Ҙур Башҡортостан, икенсеһен Бәләкәй Башҡортостан, өсөнсөһөн "Шәрҡи Рәсәйҙең Азат мосолман өлкәләре берлеге" исеме менән мөхтәриәт иғланы нигеҙендә нәшер иттек.

### Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайы

Ноябрь башында ҡаҙаҡ менәүәрҙәре менән берлектә ҡабул ителгән ҡарар буйынса Башҡортостандың III Ҡоролтайын 1917 йылдың 20 декабренән 1918 йылдың 4 ғинуарына тиклем үткәрергә булдыҡ. Был ҡоролтай өлкәбеҙҙең иң ҙур мәжлесе буласаҡ ине. Хөкүмәтебеҙ ағзаларының күбеһе шул арала Петроградта асыласаҡ Рәсәй Ҡороусылар мәжлесе ағзалары булып һайланған. Әммә большевиктарҙың был мәжлескә юл бирмәйәсәген, шуға күрә мәмләкәтебеҙҙә эшмәкәрлегебеҙ файҙалыраҡ буласағын аңлап, унда китмәнек. Киреһенсә, үҙ ҡоролтайыбыҙҙы Ҡороусылар мәжлесе асыла торған көндәрҙә йыйҙыҡ. Ҡоролтайҙың тыныс һәм ашыҡмай эшләүен тәьмин итеү маҡсатында йыйылыусыларға үҙ аты, аҙығы менән килеү тәҡдим ителде. Шулай уҡ ун көнгә егерме дүрт кешелек һаҡсы гәскәр килеүен дә кәрәкле таптыҡ. Был сарабыҙ, ҡалалағы татар комитетының һәм Ырымбур вәлийе Архангельскийҙың беҙгә ҡаршы хас дошманса мөғәмәлә итеүҙәре шартында бик урынлы ине. Ҡаҙаҡтарҙың ҡоролтайы беҙҙән бер аҙ әүәл башланһа ла, ағзаларының күбеһе әле таралышмағайны. Ҡоролтайыбыҙҙа ҡаҙаҡтарҙан Сәйет Ғәзим Ҡыдырбаев менән Мостафа Чокаев күҙәтеүсе булараҡ ҡатнашты. Чокаев ун көндән һуң Ҡуҡанда ойошторолған үҙ аллы Төркөстан хөкүмәтенең сит ил эштәре министры булды. Мин дә бер-ике тапҡыр ҡаҙаҡтар ҡоролтайында күҙәтеүсе сифатында ҡатнаштым, һәр ике ҡоролтай бер-береһен тәбрикләне.

Минең өсөн башҡорт хәрәкәтенә етәкселек көтөлмәгән бер эш булды, йәғни мин был хәрәкәттең юлбашсыһы булырымды алдан белмәнем. Ташкент Советтар ҡулына күсмәгән булһа, мин Ырымбур менән Ташкент араһында йөрөп эшмәкәрлек итер инем. Ҡыҫҡаһы, был ҡоролтай Башҡортостан мөхтәриәтен ҡанунлаштырҙы. Рәсми хөкүмәт ҡоролдо. Юныс Бикбов - рәйес, мин элеккесә эске һәм хәрби эштәр мөдире, офицерҙарҙан Әмир Ҡарамыш минә гәскәри эштәр буйынса ярҙамсы булды. Ибраһим Мутин - финанс, татарҙарҙан Ғабдулла Әҙһәмов - мәғариф, Айытбаев ауыл хужалығы мөдирҙәре ине. Хәрби өлкәлә боронғоса "Башҡорт гәскәри идараһы" (Башкирское войсковое управление) ойошторолдо. Ҡоролтай башҡорт милли гәскәре төҙөргә ҡарар ҡабул итте. 1918 йылдың 5 ғинуарында офицерҙарыбыҙҙан Мөхтәр Ҡарамыш, Ғабдулла Мираҫ, Ғабдулла Иҙелбай, Ғимран Мағазов, поляк офицеры Бритц һәм уның ике арҡадашы, Ырымбур казак хөкүмәтенән бер аҙ ҡорал алып, Баймаҡ яғына беренсе башҡорт полкын төҙөү өсөн ебәрелде. Йыһаз булдырыу, хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы биреү һәм полкты аҫраулыҡ аҡса булмау сәбәпле, һалым һалып, аҡса тупланыҡ, Үҫәргән кантонында, батша тарафынан дөйөм мобилизация мөнәсәбәте менән араҡы һатыу тыйылғанлыҡтан, Самакиндың араҡы фабрикаһында бик күп араҡы йыйылғайны. Уны конфискациялап, рустарға һатырға ҡарар иттек. Был яҡтағы бөтә рус ауылдарынан, хатта Ырымбур казак ауылдарынан рустар сәйнүк, шешә, биҙрә, ҙур шешә, миске менән килделәр. Осһоҙ хаҡҡа һатылды. Ярты миллион һум тирәһе рус аҡсаһы йыйылды. Уны хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы түләргә кантондарға ебәрҙек.

**(Дауамы бар).**

---

цияға йөрөй башланы. Бер көн уның алдымда өлтөрәп тороуын күҙәтеп ултырған әхирәтем хайран ҡалып: "Был "грубиянка" аҡырып-баҡырыуҙан башҡаны белмәй, тиһәм, кәрәк сағында һандуғас кеүек һайрай икән дәһә. Нисек уны ауыҙыңа ҡаратып ҡуя алдың?" - тип һораны. "Мин түгел, ә Хоҙай үҙе!" - тип көлдөм дә банк кассаһында булған хәлде һөйләнем.

- Һәм һин, күңелең иреп, шуға ярҙам итеп ултыраһыңмы? Ҡайҙа үҫ алырға булған ниәтең? - тип тағы ныҒыраҡ аптыраны әхирәт. - Исмаһам, иҫенә төшөрөп оялт...

Был хаҡта үҙем дә күп уйландым мин, ләкин аҙаҡ ҡул һелтәргә булдым. Таш атҡанға аш менән атыу күңелгә күберәк ҡыуаныс бирә бит ул, сөнки быны эшләргә бөтәһенең дә хәленән килмәй. Унан килеп, мин үҙем кешеләрҙә иң хөрмәт иткән сифат - киң күңеллелек.

Әммә был ваҡиғала минә икенсе бер нәмә мөһим ине: "Кемде кәмләһәң, шуға зар булырһың" тигән ҡағиҙәнең был тормошта тайпылғыһыҙ үтәлә икәненә тағы бер тапҡыр инандым. Ысынлап та, берәйһен һанға һуҡмаһаң, инҡар итһәң, бер көн килеп барыбер шул кешегә көнөң ҡала, ҡасандыр һауалы һөйләшкән кешеңдең алдына баш һалып барып торорға тура килә. Тормош быны беҙҙән һорап тормайынса, үҙе белеп эшләй. Ундай хәлдәр һәр беребеҙҙең башынан үткәне бар. Шуға, үҫ алам, тип сабыуллап сығырға ярамай. Хоҙайҙың бер ваҡыт бик аҡыллы итеп әҙәмдәрҙе үҙе тигеҙләп ҡуйыуын сабыр ғына көтөргә кәрәк.

**Рәхимә МУСИНА.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ағиҙел йылғаһының һул яҡ туғайлы ярында уның Күсәнәк исемле ҡушылдығына ҡойған Мәселе йылғаһы буйында дүрт йыл элек Бәгәнәш исемле татар ауылы барлыҡҡа килгән. Был ауыл эргәһендәге көкөртлө сығанаҡтары менән билдәле. Ауыл ҡаршыһындағы ҙур майҙанды батҡыл һаҙамыҡ биләй, унда Мәсәле йылғаһынан 40 аҙымлап ерҙә тәрәнлеге дүрт сажин, киңлеге алты сажин булған соҡор бар. Шул соҡорҙоң төбөнән дүрт шишмә урғылып сыға, һәм уларҙың һыуы айырым йылғасыҡ рәүешендә Мәсәлегә ағып төшә. Соҡор ситтәрен дә, йылға эсендәге ваҡ таштарҙы ла көкөртлө ләм ҡаплай, әммә ул Соковскиҙағы көкөртлө сығанаҡтарҙағы кеүек күп түгел. Ошо соҡорҙан йөҙ саҡрым тирәһендә тигеҙ урында ер аҫтынан дүрт бәләкәй шишмә бүҫелеп сыға, уларҙа ла көкөртлө ләм бар. Был шишмәләрҙә туф тип аталған көкөртлө таш үрмәләр ята; бынан көкөрт киҫәксәләренең алыҫыраҡ урында һыу менән йыуылып төшөп, һаҙлыҡта көкөрт сығанағының булыуы мөмкин түгеллеге тураһында фекер йөрөтөргә була. Һаҙлыҡты төшкөләктән һәм көнбайыш тарафынан билдәле таштарҙан хасил булған таш өйөмдәре уратып алған: шуға ла көкөртлө материяның ошо таш өйөмдәрендә булыу мөмкинлеге хаҡында һығымта эшләү өсөн нигеҙ юҡ түгел. Бәгәнәш янындағы көкөртлө сығанаҡтар көкөртҡә Соковскиҙағы кеүек бай булмаһа ла, крәҫтиән хужалығы өсөн берҙәй зыянлы: шуға ла Бәгәнәш татарҙарының ҡорт аҫырарға тырышыуынан бер нәмә лә килеп сыҡмай.

Табындан 50 саҡрымда, Ағиҙелгә Стәрле йылғасығы ҡойған ерҙә, 1767 йылда батша ғәли йәнәптәренең үҙ исеменә тәғәйенләнгән юғары бойороғо буйынса Сембер сауҙагәре, ә хәҙер коллежский советник булған Тетюшев пристань төҙөй, һәм унан яҙ көнө бында тиклем ылау менән килтерелгән Илек тоҙо судноларҙа Ағиҙел буйлап ебәрелә ине: бында күп кенә типтәр олоҫтары беркетелгән була. Тоҙ ебәреүҙән башҡа, бында коломенка тип йөрөтөлгән ҙур булмаған суднолар яһайҙар, ә тоҙәлөшкә яраҡлы ағасты Уралдан өс йөҙ саҡрым тирәһе ерҙәргә тиклем ағыҙып килтерәләр. Күп биналарҙан башҡа, был урында ҙур ғына ағас бысыу тирмәне ҡоролған, унан Ағиҙелгә тиклем биш саҡрым тирәһе генә булыр.

Стәрлетамаҡ пристаненән 11 саҡрымда, Ағиҙел йылғаһының таулы яры буйында Ырымбурҙан Өфөгә барған юлға яҡын ерҙә Тура Тау (Городковая гора) тип йөрөтөлгән бейек тауҙарҙың береһе күренеп тора (Бында һүҙ Торатау тураһында бара. - Ред. иҫк.). Уның башына менеү мөмкинлеге булған бер ни тиклем һөҙәгерәк яғынан ҡарағанда, тауҙың бейеклеге ике йөҙ сажин самаһы булыр. Башҡорттар ошо тауға айырыуса ихтирам менән ҡарай, уны изге урынға һанап, хөрмәт итә. Уларҙың риүәйәттәре буйынса, боронғо дәүерҙә бында Нуғай хан үҙенең ғаиләһе менән йәшәгән; һуңынан был урын Аллаһы Тәғәләгә инаныусы һәм айырымланып көн итеүсе әүлиә тип аталған мосолмандарҙың төйәге булған. Беҙҙә быға башҡорт риүәйәттәрен һөйләүсе һәм белеүселәрҙең береһе булараҡ танылыу тапҡан Исмаҡ исемле башҡорт ышандырырға тырышты.

✓ ***Бөгөнгө көндә тәбиғәткә янаған бәлә дүрт тәгәрмәстә елдерә, мотор ғәйрәтен әҙәм көсө менән сағыштырыу урынһыҙ. Тимәк, болондарҙы, туғайҙарҙы һаҡлау өсөн яңы төр закондар кәрәк.***

# НИ ӨСӨН КЕШЕ ТИГӘНЕҢ...

## тәбиғәттең батшаһы итеп тоя үҙен?

### Экология һәм дәүер

Боронғо кешеләр "экология" тигән һүҙҙе белмәһә лә, экология борон-борондан мөһим төшөнсә булған, сөнки был һүҙ кеше затының тәбиғәткә ҡарашын, мөнәсәбәтен аңлата. Кеше - үҙе тәбиғәт емеше, бар көсөн тәбиғәттән алған. Тәүтормош кешеһен тәбиғәт тәрбиәләгән, хатта һөнәргә, эшкә өйрәткән. Ул ваҡыттағы кешенең һәр аҙымы тәбиғәткә бәйләнгән. Урта быуатта йәшәгәндәр тәбиғәт байлыҡтары менән оҫта файҙаланырға өйрәнһә лә, тәбиғәт көсөнә лә ихтирамдары ҙур булған. Ә хәҙерге заманда йәшәгән кеше заты, һис шикһеҙ, үҙен тәбиғәттән өҫтөн тоя, уға ихтирамы бөтөнләй юҡ, тип әйтергә лә була.

"Кеше - тәбиғәттең батшаһы" тигәнде лә күп ишеттек, күп уҡыныҡ инде. Әлбиттә, бөгөнгө кеше үҙен үҫештең иң юғары өлөшөндә тип тоя. Кеше күпте беләләр, дөрөҫ юлдан бара, тигәнгә минең дә ышанғым килә лә ул. Тик күпме тарих яҙһа ла, кешелек үткәнен белмәй, шулай булғас, иртәгәһе тураһында бөтөнләй хәбәрҙар түгел. Арҡайым, пирамидалар серенә һаман төшөнөп етә алмаһалар ҙа, ул үҙенең киләсәген күрәҙәләр аҡылы менән генә белергә ынтыла. Тимәк, бөгөнгө кеше аҡыл эйәһе түгел.

Ә былай, кешелек доньяһы генийҙарға бай, тик генийҙарҙың күбеһе тәбиғәткә һаҡсыл ҡараштa булыуҙы онотҡан. Шуны ла иҫкә төшөрәйек: һәр генийҙың уйлап тапҡан асышы экология өсөн яңы хәүеф алып килгән. Ә бөгөнгө кешелек донъяһы эшмәкәрлеге, бар тырышлығы тәбиғәткә ҡаршы йүнәлтелгән кеүек. Әлбиттә, кешелек донъяһы тәбиғәткә ҡаршы көрәшмәне, ә техник алдынғылыҡҡа ғына ынтылды. Ә техник алдынғылыҡтың ҡорбаны кем? Тәбиғәтме, әллә кеше үҙеме? Хәҡиҡәт ниҙә?

Башҡорт халҡы борон-борондан тәбиғәткә инанып та, табынып та йәшәгән. Һәр һыу сығанағы, һәр тау башҡорт өсөн изге һаналған. Ысынлап та, башҡорт төйәге, Көньяҡ Урал тиңе булмаған тәбиғәт ҡомартҡыһы. Таҙа һыуҙар, мәғдәнгә бай тауҙар башҡа халыҡтарҙы ла үҙенә йәлеп иткән, әммә башҡорт үҙ төйәген һаҡлай белгән. Шулай ҙа һынылыш дәүере килгән. Ун етенсе быуат аҙағы, дөрөҫөрәге, ун һигеҙенсе быуат башында Петр Беренсе был төбәктең тәбиғәт байлыҡтарын Көнбайыш файҙаһы өсөн ҡуллана башлай. Шул осорҙан Көньяҡ Урал тәбиғәте рәхимһеҙ талана. Бына бер генә миҫал, ул заманда төҙөлгән йөҙ заводтың береһе - әлеге Ишембай районындағы Верхотор баҡыр иретеү заводы ике миллион бот самаһы таптаҙа баҡыр иретеп биргән. Бөгөнгө көндә был заводтың бер нәмәһе лә ҡалмаған. Ярай әле, исмаһам, Верхотор бүләге - Мәскәүҙә Пашков йорто һаман тора. Пашков кеүектәр типтергән Көнбайыш ҡалалары Уралда эшләнгән аҡса иҫәбенә нисек алға киткән!

### Экология һәм закон

Бөгөнгө кешелек донъяһы барлыҡ эшмәкәрлеген, тырышлығын тәбиғәткә ҡаршы йүнәлткән. Техник прогрестың ҡорбаны кем, тәбиғәтме, әллә кеше үҙеме? Хәҡиҡәт ниҙә? Бына, мәҫәлән, Башҡортостан ерендә тәбиғәтте иң әүҙем боҙоусы "Башҡортостан сода компанияһы" комбинаты территорияһына рөхсәтһеҙ бер генә кеше лә инә алмай, һаҡсылар күп, закон да комбинатты яҡлай. Тимәк, тәбиғәткә ҡаршы тороусының хәлҡөҙрәте етерлек...

Был комбинатҡа ҡарай аҡҡан Һәләүек йылғаһы бассейнына күҙ һалайыҡ. Күптән түгел генә йылғаның туғайҙары иҫ китерлек йәмле ине. Бөгөн Һәләүек туғайҙары икенсе төр "йәм" алды - йәйге көндәрҙә йылға ярҙарын автомобилдәр баҫып ала. Бөгөнгө көндә тәбиғәткә янаған бәлә дүрт тәгәрмәстә елдерә, мотор ғәйрәтен әҙәм көсө менән сағыштырыу урынһыҙ. Тимәк, болондарҙы, туғайҙарҙы һаҡлау өсөн яңы төр закондар кәрәк. Йылға ярында автомобиль йәки башҡа моторлы механизм рөхсәтһеҙ туҡтарға тейеш түгел, тыйылған аралыҡ та асыҡ билдәләнһен. Һәр ауыл биләмәһенең, хужалыҡтарҙың юлдар күрһәтелгән схема-картаһы булыуы мотлаҡ. Ә был юлдарҙан сығып, болонда хәрәкәт иткән йәки туҡтаған механизм хужаһы штраф түләргә тейеш, штраф күләме һиҙелерлек булырға тейеш. Ауыл хужалығы техникаһы ла тейешле танытмалар менән эшләргә тейеш. Ғөмүмән, туғай-болондар саф һауа биреүсе йәки етештереүсе комбинат йәки фабрика дәрәжәһен алырға тейеш. Экология полицияһының ҡатнашлығы һәр ауыл ерендә булыуы фарыз.

### Әхлаҡи экология

Кешелек донъяһы һәр саҡ өҫтөнлөк өсөн көрәшкән, күберәген һуғышҡан. Борон-борондан өҫтөндәр доньяға хужа. Өҫтөнлөккә өлгәшкән Македонский иң гүзәл ҡала - Персепольде яндырып юҡҡа сығарған, ә үҙе төҙөткән Александрия әллә ни гүзәл була алмаған. Ә Тамерлан иһә гүзәл Һарайҙы тулыһынса емереп, кирбестәрен дөйәләргә тейәп, Сәмәрҡәнд төҙөлөштәренә оҙатҡан. Ошоларҙы хәтерләйһең дә, аптырайһың: өҫтөндәр донъя емереүселәрме?



Техник үҫеш, тарихи үҫеш... Бөйөк Рим империяһын төҙөү өсөн нисә этнос юҡҡа сығарылған, Колумб асышы ниҙе һөйләй, ирокездар ҡайҙа? Европа баҫҡынсылары американдарҙан аҡыллыраҡ булмаған, өҫтөнлөк яулауҙың яңы ысулдарын тапҡан. Бына нисек - өҫтөнлөк күккә лә күтәрә, упҡынға ла ташлай. Ә өҫтөнлөккә ынтылмаған йән эйәһе бармы? Бына ҡырмыҫҡа иләүен күҙәтеү үтә ҡыҙыҡлы. Һәр ҡырмыҫҡа йәшәү өсөн көрәшә, өҫтөнлөккә ынтылыуын күрһәтмәй. Ә бал ҡорто? Бына ҡайҙа ул Аллаһы Тәғәлә биргән ынтылыш, йәшәү үрнәге - сәскәнән сәскәгә осоп, тәбиғәткә файҙа ғына килтереп йәшәй белеү.

Өҫтөнлөккә ынтылыу һәр саҡ агрессияға бәйләнгән. Бына, мәҫәлән, ҡарабаш турғайҙың башҡа ҡоштарға ҡарата агрессив мөнәсәбәтен күреп булмай. Сыйырсыҡтың да агрессияға ваҡыты юҡ, үҙ эше менән мәшғүл, әҙ генә ваҡыты булһа, бына тигән итеп һайрай, тәбиғәтте маҡтай. Ә ни өсөн кешелек донъяһы тыныслыҡ символы итеп күгәрсенде һайлаған? Кешелек яңылышмаған, ысынлап, күгәрсен кешегә оҡшаған - нәфсеһен тыя белмәй, енси сәбәп менән ыҙғышыу оҫтаһы. Ярар әле, Алла күгәрсенгә артыҡ ҡөҙрәт бирмәгән, өҫтөнлөктөң дә ике "осо" бар шул...

Былдай оҙайлы фәлсәфәнең кәрәге юҡтыр бында. Өҫтөнлөк ҡайҙа алып бара? Кешелек донъяһының хаталар "диңгеҙендә" йөҙөүе шуның эҙемтәһе түгелме? Егерменсе быуат ғәҙелһеҙлек донъяһын емереү маҡсатын алға һөргәйне түгелме әле? Ә ошо маҡсатҡа ынтылыу рәхимһеҙлектең яңы төрөн тыуҙырҙы. Бөйөк Октябрь Рәсәйгә маузер демократияһын килтерҙе. Һөҙөмтәләре менән Октябрь революцияһы Тамерлан яуын артта ҡалдырҙы. Эйе шул, Блюхер бандаһы Аҡһаҡ тимер ише генә таламаны, әгәр Аҡһаҡ үҙенә кәрәген генә алһа, маузерле Блюхер кәрәкмәгәнен дә арбаһына һалды. Ошо осорҙан башлап кешелек психологияһында үҙгәрештәр һиҙелде, ике йөҙлөлөк өҫтөнлөк алды. Әхлаҡи экология тураһында әйтәһе һүҙҙәр күп, әлегә ҡыҫҡаса әйтәм. Әгәр Ленин-Сталин тәғлимәте "миңә барыбер" тигән кеше затын донъяға килтерһә, Горбачев-Ельцин тәғлимәте "дүрт яғыбыҙ ҡибла" тиеп алдашты. Эйе шул, ҡасандыр Петр Беренсе Рәсәй ишеген Европа сауҙагәренә асһа, был икәү глобализм талаусыларына ишекте шар асты.

### Бишенсе интернационал

Һуңғы ваҡыттарҙа кешелек донъяһы үҙ-үҙен юҡ итеү юлында, тигән фекер көсәйҙе. Кешелек аҡылы тәбиғәттән ситләште. Әлегә һәр кем үҙенең тәбиғәтте яратыуын тырышып раҫлай, ә тәбиғәт ҡәҙерен белергә теләмәй. Техник прогресс, ғөмүмән, тормош кимәлен күтәрә, һәр кемгә еңеллек килтерә. Ә тәбиғәткә?

Хәҙерге көндә үҙен шәхес итеп һанаған зат үҙ абруйын автомобиль маркаһы менән үлсәй. Ә авто маркаларының да үҙ дәрәжәһе бар. Бында ла өҫтөнлөк өсөн аяуһыҙ көрәш бара. Ролс-Ройс, Феррари, Мерседес, Мазерати, Тойота, Хонда... Юҡ, һанап бөтөрлөк түгел. Автомобиль - дәрәжә күрһәткесе: Окала йөрөгән зат Мерседеста елдерә алмай. Ә шулай ҙа аныҡлыҡ талап итеlә - автомобиль ни өсөн? Ябай һорауға ябай яуап бар, әлбиттә. Дүрт тәгәрмәсле механизм А пунктынан Б пунктына барыу, ҡайтыу өсөн. Юҡ шул, автомобилдең тағы бер мөһим "эше" бар - быныһы тәбиғәткә зыян килтереү. Бөгөнгө көндә

---

ӘЙТКӘНДӘЙ...

## МИХАИЛ БАБИЧ БЕЛДЕРҘЕ



**Бөгөн милли ҡомартҡы һаналған Торатауға теймәү һәм икенсе сеймал базаһын табыу өсөн мөмкин булғандың барыһы ла эшләнә. Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич Волга буйы төбәктәренең киң мәғлүмәт саралары етәкселәре һәм баш мөхәррирҙәре менән осрашыуҙа ошо хаҡта белдерҙе. Сара Түбәнге Новгородта уҙҙы.**

"Башҡортостан сода компанияһы - яндырылған сода етештереү буйынса ҙур предприятие. Ул Рәсәй баҙарының - 60, экспорт тауарҙарының 20 проценттан ашыуын биләй. Производствола 4,5 мең эшсе, дөйөм алғанда, 10 меңгә яҡын кеше эшләй. Оҙаҡ йылдар сеймал базаһы булған шихан 2019 йылда юҡҡа сығасаҡ. Әгәр сеймал проблемаһы хәл ителмәһә, беҙ предприятиены ғына түгел, шулай уҡ төрөктәр һәм американдар дәғүә итә башлаған яндырылған сода етештереүҙе лә юғалтасаҡбыҙ. Хәҙер улар үҙҙәренең производствоһын яңырта һәм баҙарға инергә әҙер", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Михаил Бабич.

Тулы хоҡуҡлы вәкил һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта икенсе сеймал базаһын һайлау буйынса ҙур эш башҡарыла. Ҡуштау тикшерелгән, Ғүмәр ятҡылығы өйрәнелә.

"Беҙ халыҡтың фекерен, Торатауға мөнәсәбәтен беләбеҙ. Әммә сәнәғәт объектының да проблемаһын аңлау мөһим. Миңә билдәле булыуынса, хәҙер Ҡуштауҙа һәм Ғүмәр ятҡылығында тикшереү эштәре алып барырға кәрәк", - тине тулы хоҡуҡлы вәкил.

"Ҡуштау ҙа һәйбәт вариант түгел, сөнки унда ял һәм туризм өсөн шарттар булдырылған", - тип өҫтәне Михаил Бабич. Шуға күрә тулы хоҡуҡлы вәкил Ғүмәр ятҡылығының иң яҡшыһы булыуын билдәләне. Әгәр ыңғай һөҙөмтә алынһа, ул Башҡортостан "Сода" компанияһы өсөн төп сеймал базаһы буласаҡ.

**Арина РӘХИМҠОЛОВА.**

✓ **"Белое море", "Кама - 2" тиеп аталған урындары булған предприятие экология тураһында дөрөҫ фекер йөрөтә аламы? Юҡтыр. Был комбинат үҙ эшселәренә зарарлы шарттар өсөн тейешле түләү талаптарын үтәйме икән?**



был тәңгәлдә әлеге автоны уҙыусы бер ниндәй ҙә көс юҡ. Автомобиль - ҡеүәт эйәһе, бейеклектәрҙе лә яулай белә икән: Магнитогорск ҡалаһының эшлеклеләре дүрт тәгәрмәсле тиҙйөрөшлөләр менән Ирәмәл тауын да яулап алған, имеш. Э-эх, Ирәмәл тауы ғына булһа... Автомобиль бөйөк социализм ҡоролошон тар-мар итеүҙә ҙур роль уйнаны, ул бик шәп еңеү ҡоралы булды, буғай. Шул арҡала атмосфера экологияһы ғына түгел, әхлаҡи экология ла иҫ китерлек түбәнлеккә төштө. Иномаркалар ғына түгел, беҙгә бишенсе интернационал йәки глобализм килде. Глобализм үтә талапсан аждаһа, нәфсеһе донъяға һыймай, хатта космосҡа ынтыла. Ярар, был турала һүҙ әҙ булмаҫ әле, әйтерҙәр, яҙырҙар. Космос экологияһы тураһында ла һүҙ буласаҡ.

### Юрматы төйәгенә ҡыҙығыу

Әүәлдән Юрматы төйәге, өс йылға бассейны, күптәрҙе ҡыҙыҡһындырған. Бына ҡыҙыҡ - бөгөнгө көндә лә юрматыларҙы күсмә халыҡтар иҫәбенә ҡуйыусылар бар. Ысынбарлыҡта, юрматылар бер ваҡытта ла күсмәселек көнөндә булмаған. Ә бына йәйге көндәрҙә тауға күсеү йолаһы булған. Был йоланың ике сәбәбе бар. Беренсеһе - тауҙағы бесәнлектәр малдарҙы йәй көндәре көтөү өсөн уңайлы. Эйе, тауҙарҙа тибенлектәр юҡ, тибенлектәр яландарҙа. Башҡорт йылҡыһы ҡышҡы көндәрҙә тибенлектәрҙә туйынған, быныһы башҡорт атының мөһим сифаты. Бына шулай, Ашҡаҙар, Һәләүек, Стәрле йылғалары бассейны юрматылар төйәге. Ә икенсе сәбәп - бөйөк даланың яҡында булыуынан: йәйге көндәрҙә байтаҡ яуҙар килгән, мал тыуарҙы, ғаиләләрҙе тауҙа имен тотоу еңелерәк булған. Бына ошо төйәкте юрматылар күп быуаттар үҙ ҡулында тотҡан, ситтәргә бирмәгән. Билдәле, юрматылар өсөн Торатау, Йөрәктау, Шәкетау, Ҡуштау изге тауҙар булып һаналған. Ә Торатауҙы иһә ер күсәре тип йөрөткәндәр. Эйе, Торатау башҡорт берҙәмлегенең символы булып һаналған. Ошо тау итәгендә башҡорт бейҙәре Рәсәйгә ҡушылыу ҡарарын ҡабул иткән.

Тағы ҡабатлайыҡ: бына ошо өс йылға тамағы күптәрҙе үҙенә йәлеп иткән. Татар-монголдар ҙа, ҡалмыҡтар, нуғайҙар ҙа бында һыйынырға тырышҡан. Оҙаҡ ваҡыт Ивандар ҙа, Романовтар ҙа юрматы төйәгенә үрелмәгән, сөнки юрматылар Рәсәйгә ихлас хәрби хеҙмәт итеү сараһын күргән. Урыҫ әйтмешләй, изге урын буш тормай, был төйәкте үҙләштереү сараһын күреүсе табылған. Сөннәтлеккә барырға ҡурҡҡан, урыҫ тәреһе таҡҡан Тәтешев Екатерина батшабикәгә ялыу менән килгән. Имеш, Рәсәйҙә тоҙға ҡытлыҡ, ә башҡорттар тоҙҙо бушлай, теләгәнсә тотоналар, тәләфләйҙәр. Тәтешев бер сәптән ике ҡуянды атып алырға самалай. Әбей батша әмеренән файҙаланып, Илек тоҙон ошо өс йылға тамағына килтереп, Рәсәйгә баржалар менән оҙатыу сараһын күрә. Аңлашыла, ике ҡуян ғына түгел, улар тиҫтәгә яҡын була. Башҡорт урманы, башҡорт аты, эшсе ҡулдары, башҡорт йомартлығы үҙе ни тора! Шулай итеп, Стәрлетамаҡ пристане төҙөлә, бында был әмәл өсөн барыһы ла бар: баржалар төҙөү өсөн бына тигән ағас, тоҙ, ағас ташыу өсөн аттар күп. Ә шулай ҙа тиҙ арала пристандең кәрәк булмауы асыҡлана. Төҙөлгән ҡасаба урындағы халыҡты талау өсөн уңайлы бер пунктҡа әйләнә...

Совет дәүере юрматы төйәгенә яңы бәлә килтерҙе. Байлыҡ - бәлә түгел, ә шатлыҡ сығанағы иҫәпләнә. Юрматы ерендә нефть ятҡылығы барлығы асыҡланды, быға бар халыҡ шатланды. Ә шулай ҙа Ишембай нефть сығанағын үҙләштереү еңел эш булманы. Тәүге нефтселәргә уңайлы шарттар тәьмин итеү юрматыларға йөкмәтелде. Стәрлетамаҡ, Ишембай төҙөлөштәре күберәген ағас материалдары менән башҡарылды, хатта нефть вышкаларының ҡайһы берҙәре ағастан яһалды. Ағас әҙерләү эше тулыһынса ауыл халҡының елкәһенә һалынды. Был эште юрматылар үҙ аттары менән буштан-бушҡа башҡарҙы. Ситтән килгән нефтселәр бына тигән эш хаҡы алды, хатта орден-миҙалдарға лайыҡ булды. Өфө - Ишембай тимер юлы ла ошо уҡ ысул һөҙөмтәһе: башҡорт аты, ауыл халҡының тырыш хеҙмәте - барыһы ла бушҡа. Әлеге лә баяғы - үҙ көрәгең менән, үҙ аҙығыңды ғына ашап, норма үтәү мотлаҡ. Шулай итеп, тимер юлы ваҡытында төҙөлдө.

Һуғыштан һуңғы "Сода" төҙөлөшө әле лә булһа күҙ алдымда. Ул саҡта шәхси хужалыҡтарға бирелгән һалым күләме иҫ китерлек булды, мал аҫрауҙың кәрәге ҡалманы. Ауыл халҡы астан үлмәҫ өсөн үҙ торлағын ташлап, ҡала төҙөлөштәренә ашыҡты. Етмәһә, пропаганда арымай-талмай "химия - ҡалдыҡһыҙ" тиеп тәтелдәне. Бына ни өсөн тәбиғәттең йөмле урынында, Ағиҙел ярында "Сода" өсөн урын һайланды. Әлеге "Сода" эшмәкәрҙәре лә "экология" һүҙен доға урынына бер туҡтауһыҙ ҡабатлайҙар. Әйтегеҙ әле, "Белое море", "Кама - 2" тиеп аталған урындары булған предприятие экология тураһында дөрөҫ фекер йөрөтә аламы? Юҡтыр. Әлеге көндә был комбинат үҙ эшселәренә зарарлы шарттар өсөн тейешле түләү талаптарын үтәйме икән? Ә бит ҡала халҡы ла шул уҡ шарттарҙа көн итә. Тимәк, комбинат уларға ла зыян өсөн түләргә бурыслы.

**Әйткәндәй, яңыраҡ "Сода" ҡорбаны Шәкетау тирәһенән урап килдем. Рәхимһеҙлек үрнәгенең үрнәге был ерҙәр. Тәбиғәттә батша булырға ынтылып, кеше заты үҙ-үҙенә ҡәбер ҡаҙый, быныһы аксиома...**

**Ишҡәле НУРҒӘЛИЕВ,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# РУХ СЫҒАНАҒЫ...

## Башҡортостаныбыҙ



**Һүҙ - Рәсәй төбәктәренән һәм Яҡындағы сит илдәрҙән IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат булып килгән милләттәштәребеҙгә:**

**Сафиулла ВИЛДАНОВ, Һамар өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы:** Әлбиттә, йәйгеһен Өфөлә ҙур сара - ШОС һәм БРИКС дәүләттәре илдәре башлыҡтарының саммиты үтеүе мөһим әһәмиәткә генә эйә булып ҡалманы, ә баш ҡаланың йөҙөн дә үҙгәртеүгә булышлыҡ итте. Ҡаланың һуңғы йылдарҙа былай ҙа матурланған, ныҡ үҙгәргән архитектураһына тағы ла күркәмлек өҫтәп, донъя стандарттарына тап килгән ҡунаҡханалар ҡалҡып сыҡты, IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҙур үҙгәреш кисергән Конгресс-холл бинаһында үтә.

Эйе, беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ, мин - башҡорт, тип күкрәгенә һуғып, тамаҡ ярып ҡысҡырып, ялтырауыҡлы һүҙҙәр һөйләп йөрөй ала. Ләкин ямау һалынған кейемдә икәнһең, ундай халыҡты берәү ҙә ихтирам итмәйәсәк. Республиканың иҡтисады көслө булырға тейеш. Бөгөн бөтөн нәмәне баҙар билдәләй. Әгәр иҡтисади яҡтан көслө, үҙебеҙҙе-үҙебеҙ тәьмин итә алған дәүләт булһаҡ, шул саҡта ғына ғорурланып, беҙ - башҡорттар, тип күкрәк ҡаға аласаҡбыҙ. Әлегә яуланған ҡаҙаныштар ғына етерлек түгел, был бик аҙ. Өфө ситтәрендә генә күҙгә күренгән нәмәләрҙе күрһәткес тип булмай, күрһәткестәр тотош республика буйынса булырға тейеш. Шуға күрә, ШОС, БРИКС саммиттары Өфөнөң йөҙөн нисек билдәләгән, ул шундай уҡ күләмдә республикаға ла таралырға, инвестициялар райондарға ғына түгел, ауылдарға ла йәлеп ителергә тейеш, минеңсә. Халыҡ бай йәшәһә, белемле, азат булып, үҙенүҙе ҡарай алһа ғына республика көслө буласаҡ.

**Флүзә ХӘЙРУЛЛИНА, Эстониялағы "Ағиҙел" милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе:** Башҡортостанға йыш ҡайтырға тырышам. Былтыр өс тапҡыр ҡайтҡайным, быйыл ике тапҡыр ғына бындай мөмкинлек сыҡты. Өфө һәр ваҡыт матур, ҡайтҡан һайын ниндәйҙер үҙгәрештәр күҙгә ташлана. Халыҡ та ихлас, шуға күрә улар менән аралашыу үҙе бер оло байрам. Сит илдәргә барып, гүзәл архитектура өлгөләрен күреп ҡайтып ҡына үҙемә тулы ҡәнәғәтләнеү ала алмайым. Башҡортостанда иһә ябай кешеләр менән аралашып, мәҙәни сараларға йөрөп, рух күтәренкелеге алып китәм дә, шуның иҫтәлеге бер йылға етә. Туристик путевкалар менән башҡа илдәрҙә ял итеүгә ҡарағанда, тыуған яғыма ҡайтыуҙан оло ҡәнәғәтлек табам.

**Рәлиә ҠӘРИПОВА, Ташкент ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге башҡорт милли-мәҙәни үҙәге рәйесе урынбаҫары:** Башҡортостанға шундай дәртләнеп, ҡанатланып ҡайттыҡ, үткән юлыбыҙҙың өс көнлөк икәнен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Сөнки шул тиклем тулҡынланыу, шул тиклем өмөттәр, шул тиклем шатлыҡтар кисерәбеҙ - хистәребеҙҙе, уйҙарыбыҙҙы әйтеп бөтөрөрлөк түгел. Башҡортостандың алға барыуына, уның матурлығына, үҫешенә, милләттәштәребеҙҙең берҙәмлегенә, дуҫлығына һоҡланабыҙ. Дүртенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат булып һайланыуыбыҙ Ташкентта беҙҙең дә мәртәбәбеҙҙе арттырҙы, Ҡоролтайыбыҙға дан йырлайбыҙ. Йәшәһен телебеҙ, йәшәһен илебеҙ, сәскә атһын, гөрләп торһон ғәзиз Башҡортостаныбыҙ!

**Земфир КӘЛИМУЛЛИН, Латвия башҡорт-татар милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе:** Башҡортостанда барған хәл-ваҡиғалар тураһында һәр саҡ хәбәрҙар булырға тырышам. Иҡтисади, социаль, мәҙәни өлкәләрҙәге яңылыҡтар менән танышып барам, сөнки был беҙҙең ситтә йәшәгән башҡорттар өсөн бик мөһим. Рәсәй масштабында Башҡортостандың билдәле бер урын алып тороуы өсөн ғорурланабыҙ. Төрлө даирә вәкилдәре менән танышҡанда ла, сығышым - Башҡортостандан, тием. Тимәк, Латвиялағы башҡорт диаспораһының ғына түгел, тотош дәүләтендең вәкиле булараҡ сығыш яһайһың. Ә эшлекле даирә вәкилдәренең республикаға иғтибары бик ҙур. Әлеге ваҡытта Латвиялағы Рәсәй илселеге булдырған эшлекле бәйләнештәр бер ни тиклем ваҡыттан һуң Башҡортостанға ла килеп етер, тиеп уйлайым. Тәү ситтта республиканың иҡтисадын күтәреү тураһында уйларға кәрәк. Сөнки ҡайтҡан һайын таныштарҙы һораштырам, барыһы ла Себерҙә. Ғаиләһенән айырылып, ситтә йөрөйҙәр. Ғаиләләрҙең айырым йәшәүе дөрөҫ түгел, ул ғаиләне генә түгел, дәүләтте лә ҡаҡшата. Ҡалаларҙың бюджетын тултырыусы предприятиелар үҫтерелергә, банктар предприятиеларҙы үҫтереүгә йыллыҡ 20-30 процент менән түгел, ә 5-7 процент менән кредит бирергә тейеш, тип уйлайым. Сөнки барлыҡ эшләп торған предприятиелар артабан үҫешкәндә, камиллашҡанда, яңы технологиялар индерелеп, улар заман менән бергә атлағанда ғына алға барыу мөмкин. Шулай уҡ башҡа төбәктәр менән мәҙәни бәйләнештәрҙе лә нығытырға кәрәк. Сөнки мәҙәниәт фекерҙәргә йүнәлеш бирә, уларҙы хәрәкәткә килтерә, йәштәрҙе тәрбиәләй. Эйе, республикала социаль-мәҙәни мәсьәләләр һәр саҡ беренсе урында торҙо һәм тора, әммә йәштәр хаҡында уйларға, уларҙы донъя кимәлендә эшләрлек белгестәр итеп үҫтерергә кәрәк. Бының өсөн үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап ятырға ярамай, студенттар менән алмашыу тәжрибәһен ҡулланыу зарур.

**Әлиә САФИНА, Пермь крайының Куеда районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:** Тәбиғәттең көйһөҙлөгөнә ҡарамаҫтан, баш ҡала менән танышырға ла өлгөрҙөк, махсус ойошторолған мәҙәни программаларҙа булдыҡ. Ҡоролтайға арнап ойошторолған күргәҙмәләрҙә халҡыбыҙҙың тарихы, уның көнкүреше, мәҙәниәте, сәнғәте менән дә таныштыҡ. Беҙ, Пермь башҡорттары, Аҫҡын районы менән берлектә "Пермь башҡорттары" тигән гәзит сығарабыҙ, киләсәктә бындай эшлекле һәм һөҙөмтәле бәйләнештәр тағы ла әүҙемләшер, тигән өмөт менән йәшәйбеҙ. Өфөнөң матурлығына хайран ҡалып, ҡоролтайҙан үҙебеҙгә күп яңылыҡтар, артабан ең һыҙғанып эшләү өсөн рух һәм дәрт алып ҡайтабыҙ. Әйтерһең дә, икенсе һулыш асылды. Үҙебеҙҙе ожмахҡа килеп ингән кеүек тойҙоҡ.

***✓ Роман һынлы романға һелтәнгәс, яңы һүҙ әйтергә кәрәк бит. Әйтер һүҙең юҡ икән, ниңә тотонорға? Оҙон насар роман яҙғансы, бер ултырыуҙа уҡырлыҡ йыйнаҡ повесть тыуҙырыуың яҡшыраҡ.***



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

**Был юлы өс һорауҙы билдәле прозаик, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир ӘМИНЕВҡа төбәйбеҙ.**

# ХИКӘЙӘГӘ ҺЫЙМАЙЫМ,

## романға тарта алмайым...

**► Әмир Мөхәмәт улы, туплаған тормош һәм ижад тәжрибәгеҙ буйынса һеҙ күптән роман яҙырға тейеш булһағыҙ ҙа, хикәйә һәм повеска тоғролоҡ һаҡлайһығыҙ. Белеүебеҙсә, Антон Чехов та хикәйә жанрына тоғро булған. Ҡайһы бер яҙыусылар йылына берәр роман "баҫып сығара". Ижадығыҙҙың хикәйәгә, повеска бәйле асылын нисек аңлатырһығыҙ?**

- Күренекле яҙыусыбыҙ Рәшит Солтангәрәевтың, роман яҙырға кәрәк, сөнки исемең әҙәбиәт тарихында романист булып ҡаласаҡ, тигәнен хәтерләйем. Миңә төбәп әйтмәне, дөйөм әйтте, бәлки, үҙенә ҡарата ла әйткәндер. Ул заманда Я. Хамматов, Б. Рафиҡов, Ә. Хәкимов, И. Абдуллиндарҙың бер-бер артлы романдары сыға, әҙәби тәнҡит хикәйә, повестарға ҡарағанда йышыраҡ ошо авторҙарҙың романдары хаҡында яҙа, съезд, дөйөм йыйылыштар трибунаһынан күберәк әлеге әҫәрҙәр телгә алына ине. Әлбиттә, романлы әҙәбиәт - мәртәбәле әҙәбиәт, ләкин уның художестволы кимәле, күтәргән проблемалары, геройҙар концепцияһын, классик роман жанры сиктәренә тура киләме, юҡмы икәнен дә, башҡа туғандаш, рус, хатта донъя романистикаһы фонында асыҡларға, торошон баһаларға кәрәк бит әле.

Быға тик хикәйә, тораҡ повесть жанрында ижад иткән Рәшит ағайҙың, бәлки, күңелләге лә килгәндер (Бәй, ул кемдән кәм!). Һәм әҙәбиәт тарихында романист булып теркәләр өсөн берәй роман яҙырға кәрәк, тип уй ҙа йөрөткәндер. Ләкин бында ныҡлап бәхәсләшергә урын бар. Ата-әсәгә бөтә балалары ла берҙәй кәҙерле булған кеүек әҙәбиәттең бәләкәй йәки ҙур төрө юҡ, насар йәки яҡшы яҙылғаны ғына бар. Әҫәргә баһа уның күләменә ҡарап ҡуйылмай, баһа һалынған фекергә, проблемаһына, художестволылыҡҡа, хатта уҡымлылыҡҡа ҡайтып ҡала. Романист Толстойҙы хикәйәсе Чеховтан юғары ҡуйып буламы? Икеһе лә титан.

Хэмингуэйға Нобель премияһын анығ "Старик и море" повесы өсөн бирәләр. Миңә ҡалһа, Распутиндың повестарына ҡарағанда "Уроки французского" хикәйәһе күпкә көсләрәк. Повестарын яҙмаған хәлдә лә бөгөнгө рус прозаһында ул тап ошо хикәйәһе менән теркәләр ине. Солженицындың яҙғандары күп, бөтәһен дә художестволы әҫәрҙәр тип нарыҡлап булмай, күберәк - публицистика, ә быны "Один день Ивана Денисовича" тигәне (повесть) тәүге әҫәрҙәренең береһе, заманында ҙур яңғыраш алды. Сыңғыҙ Айытматовҡа повестары шөһрәт килтерҙе, романға ғүмеренең һуңғы йылдарында ғына тигәндәй тотонды. Шакир Янбаев ике роман яҙһа ла, ижады, нигеҙҙә, ҡыҫҡа хикәйәләрҙән тора. Талха Ғиниәтуллиндың да тап хикәйә, повесть жанрында маһирлығын беләбеҙ. Әйткәнемсә, Рәшит ағай үҙе лә бер роман яҙҙы ("Беҙ йәшәгән ер"), ләкин ул, ҙурҙан ҡупканда, әҙәбиәт тарихында Шакир Янбаев һымаҡ, барыбер ҙә романист булып түгел, маһир хикәйәсе булып ҡаласаҡ. Быным менән шуны әйтергә теләйем: проза жанрының һәр ҡайһы төрө, күләменә ҡарамай, берҙәй үк миҡдарҙа баһаланырға хаҡлы. Һәр йүгереүсе енел атлетиканың бөтә дистанцияларында ла берҙәй шәп йүгерә алмай, әйтәйек, спринтер бар, стайер бар һәм һәр ҡайһыһы үҙенең дистанцияһында көслө. Сөнки һәр кемдең, быныһы инде әҙипкә ҡағыла, үҙ холоҡ-фиғеле, характеры, темпераменты. Һәм ошо сифаттар ҡайһы жанрҙа ижад итергә "кәрәклеген" программалай ҙа инде.

Үҙемә килгәндә, бөгөнгө минең жанр - повесть. Хикәйәгә һыймайым, романға тарта алмайым. Эйе, логика буйынса, киләһе баҫҡыс роман булырға тейеш һымаҡ, әммә ул баҫҡысҡа күтәрелергә әлегә бер ҙә теләк юҡ. Ылыҡтырмай, тартмай ул мине, миңә ошо майҙанда комфортлы. Ул минең жанр. Был - бер. Икенсенән, тотонған хәлдә лә килтереп сығара алмам, тип ҡурҡам. Сөнки ҙур яуаплылыҡ тоям. Роман һынлы романға һелтәнгәс, яңы һүҙ әйтергә кәрәк бит. Әйтер һүҙең юҡ икән, ниңә тотонорға? Оҙон насар роман яҙғансы, бер ултырыуҙа уҡырлыҡ йыйнаҡ повесть тыуҙырыуың яҡшыраҡ. Унан килеп, уҡыусыны ла уйларға кәрәк. Уның бөгөн күләмле әҫәр уҡып ултырырға ваҡыты юҡ. Быны яҙыусы булған кеше шулай уҡ иҫәпкә алырға бурыслы, тип иҫәпләйем. Ғөмүмән, прозаға повесть иң ҡулай, йәтеш жанр, унда хикәйә материалын "һуҙып", ә романдыҡын "тыңҡыслап" һыйҙырыу мөмкинлеге бар. Быға инде оҫталыҡ кәрәк. Ә уныһы икенсе мәсьәлә.

**► "Әҙәбиәт айырым төркөм кешеләр өсөн генә "хобби" булып ҡала бара" тигән фекер менән килешәһегеҙме? Әҙәби китаптарҙы уҡыусыларҙың һаны кәмеүе генә был хәлкүренешкә дәлил була аламы?**

- Һәр кем ансамблдә бейерлек оҫта, оло сәхнәнән йырларлыҡ тауышлы йырсы була алмай. Шиғыр йәки хикәйә яҙыу ҙа һирәктәрҙең өлөшөнә



төшкән көмөшө, көй сығарыу, картиналар яҙыу өсөн дә фәрештәнең ҡанаты ҡағылыуы кәрәк, театр йәки кино сәнғәте шулай уҡ талантлылар профессияһы. Ошо юҫыҡта фекерҙе дауам итһәк, сәнғәттең, әҙәбиәттең, мәҙәниәттең һәр жанрының эстәлеген, фекерен, авторҙың әйтер һүҙен шунда эшләгән, шуның менән шөғөлләнгән, әйтер инем, ғүмерен һалған, тормошон бағышлаған кешеләр генә төптән аңлай ала. Тимәк, беҙ, теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, улар, һеҙ әйтмешләй, айырым кешеләргә, төркөм өсөн хобби булып ҡала. Хобби тип әйтеү бында, бәлки, урынлы ла түгелдер, ул һүҙҙең мәғәнәһе икенсерәк, элитар кешеләрҙең шөғөлө, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. Әҙәби-художестволы китаптарҙы уҡыу ҙа шулай. Уны ла күп кеше уҡымай, уҡый алмай, ғөмүмән, тормошта уның кәрәге юҡ, тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Әлбиттә, уҡыу - ижад итеү түгел, кемдер барлыҡҡа килтергәнде файҙаланыу, бешергәнде ашау, әммә ул да башты эшләтеүҙе, фекерләүҙе талап итә, нимәгәлер өйрәтә, кәңәш бирә, күңелде матурлай, зауыҡты арттыра. Бөтә кешенән дә китап уҡыуҙы талап итеп булмай һәм был дөрөҫ тә түгел. Китап, журнал, ғөмүмән, матбуғат менән бәләкәйҙән, мәктәп йылдарынан мауыҡмаһаң, олоғайғас, уҡып китеп булмай. Һуң. Ғәзәткә кермәгән, ләззәт алып өйрәнелмәгән. Был эшкә мәктәп, атап әйткәндә, башҡорт теле һәм әҙәбиәтте уҡытыусыһы ылыҡтыра ала һәм, әлбиттә, ата-әсә. Әрләмәй, түҙемле рәүештә, уйнау, ҡыҙыҡһындырыу рәүешендә. Телевидение, компьютер, кеҫә телефоны заманында баланы китапҡа ылтыртыу ифрат ауыр. Әммә, әйткәнемсә, төрлө формалы алымдар табып, уларҙы уҡырға ҡыҙыҡһындырырға бурыслыбыҙ. Шулай иткәндә генә әҙәбиәтебеҙҙең, телебеҙҙең иртәгәһе көнө бар. Ә был үҙ сиратында милләттең һаҡланыу-һаҡланмауына барып тоташа.

**► Һеҙҙең йәшлек илебеҙ халҡы XX быуаттың икенсе яртыһындағы мөхәббәт романтикаһы менән йәшәгән йылдарға тура килгән. Хәҙерге йәштәр хатта мөхәббәт мәсьәләһендә лә прагматиктар. Кешеләр үҙгәрҙеме, әллә дәүеренә күрә мөхәббәт тойғоһо ла үҙгәреш кисерәме?**

- Йәмғиәт формацияһы үҙгәреү менән кеше холҡо ла үҙгәрә. Хәйер, бында улар береһе менән бәйләлер, дөрөҫөрәге, кеше үҙгәреү менән йәмғиәт формацияһы ла үҙгәреш кисерәләр. Уйлап ҡараһаң, беҙҙең күҙ алдында тигәндәй, ун-ун биш йыл элек кенә, кеше бөтөнләй икенсе ине бит, кешеләр араһында, хатта туғандар араһында мөнәсәбәттәр нисектер йылыраҡ, иғтибарлыраҡ, йомшағыраҡ ине. Аралашыу, ҡунаҡҡа йөрөшеү, бер-береңдең хәлен белешеү булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо һәйбәт күренештәр көндән-көн тигәндәй юғала бара. Миңә ҡалһа, һеҙ әйткән мөхәббәт романтикаһы ла үҙгәреш кисерҙе. Мин, ул заманда яҡшы ине, бөгөн насар, тип әйтмәйем, икенсе төрләрәк ине, романтикаһы күберәк ине, тип әйтергә теләйем. Ауылда бигүк юҡ, ә бына ҡалала күпә-көндөҙ урам уртаһында, тыҡталыштарҙа йәштәр үбешеп тора. Ҡосаҡлашып, ҡулға-ҡул тотоношоп барырға мөмкиндер әле, ә эргәндән йөҙәрләгән, хатта меңәрләгән кеше уҙғанда осаларҙан тотошоп нисек үбешергә мөмкин? Ул бит ике кеше араһында, аулаҡта тип әйтәйемме, һәр хәлдә шаһитһыҙ башҡарыла торған эш. Был ҡылыҡты мин бер-берендә ихтирам итмәү, яратҡан кешеңдә һаҡламау, һанламау тип ҡарайым, унан санитар-гигиена ҡағиҙәләре лә бар бит әле. Йәштәрҙең күпәренеүе, быны мин ниндәй маладис, эргәмдәгеләр минең өсөн бар ни, юҡ ни, нимә теләйем, шуны эшләйем, тигән һымаҡ.

Бындай "мөхәббәт" тиҙ уңыусан, сөнки ул ялтырауыҡ, үҙең өсөн, йөрәгең өсөн эшләнмәй, ә сит күҙҙәр өсөн, публика өсөн эшләнә. Бөгөн йыш ҡына үҙәк телевидениенан әллә ғибрәт өсөн, әллә шулай уҡ публика өсөн артистар, олигархтар, сәйәсмәндәр һ.б. билдәле, аҡсалы кешеләрҙең тормошон, уларҙың балаларының тормошон күрһәтәләр. Заманында өйләнешкәндәр, кейәүгә сыҡҡандар, әле килеп айырылышалар, ғаилә тарҡалған, суд эштәре, мөлкәт, фатир, хатта балалар бүлешеү процесы бара, тәмһеҙләшәләр, бер-береһен ғәйепләйҙәр, ҡыҫҡырышалар, талап итәләр... Әлбиттә, яратышып өйләнешкәндәрҙең дә айырылышыуҙары ихтимал, ғаилә тормошоноң көтөлмәгән, уйламаған, "һыу аҫтындағы таштары" күп, әммә былар яратҡан кешегә түгел, аҡсаға, байлыҡҡа, мөлкәткә, билдәле фамилияға сыҡҡан йәки өйләнгән дә, бер-береһенә хис-тойғо булмағас, айырылышырға мәжбүрҙәр. Яратыу - көсло тойғо, ул йәштәр алдына баҫҡан көнкүреш ауырлыҡтарын, төрлө аңлашылмаусанлыҡтарҙы, хатта хыянатты ла еңә ала, ә тегеләр күбеһенсә юҡлыҡтан түгел, барлыҡтан, байлыҡтан, нәфсенән туйып һикерә...

Ғөмүмән, бөгөн кеше ваҡланды, һөҙөмтәлә мөхәббәт тойғоһо ла ваҡланды. Тормоштағы һәр нәмәгә еңел ҡараған һымаҡ, бөтөн мөхәббәткә лә еңел ҡарау килде. Алда әйткәнемсә, романтиктар динозаврҙар һымаҡ бөтә бара, прагматиктар, бар нәмәне тик аҡса, байлыҡ күҙлеге аша ҡараусылар арта бара. Бөгөнгө никахтарҙың һәр икенсеһе тарҡалыуы - шуға дәлил. Йәмғиәт өсөн ҡурҡыныс симптом был.

Ә мөхәббәт бар. Мөхәббәт тигәндә беҙ был төшөнсәне тик егет менән ҡыҙ, йәғни ике енес араһындағы мөнәсәбәткә генә ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Мөхәббәт менән яратыу - синонимдар. Шулай икән, быны киңерәк мәғәнәлә, ҡатынҡыҙға ғына түгел, балаларға, әсәгә, туғандарға, дуҫтарға, илгә, телгә, халыҡҡа булған мөнәсәбәт тә тип аңларға кәрәк. Тимәк, мөхәббәтһеҙ тормош юҡ, бар тереклектең көн итеүе шуға ҡоролған, ул - туплаусы, ойоштороусы, бар итеүсе, бер бөтөн итеүсе...

✓ *Беҙҙә режиссерҙарҙың һаны ла күп түгел. 4 млн халыҡ йәшәгән төбәк өсөн яҡынса 10 режиссер - ул бик аҙ. Уларҙың да йылына 1-2-һе генә кино төшөрә, ҡалғандар үҙенең сиратын көтөргә мәжбүр, сөнки матди хәлебеҙ шулайыраҡ.*



ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ

# КИНОЛАР ТӨШӨРӨЛҺӨН ҺӘМ...

## фестивалдәрҙә баһаланһын

**Икенсе аҙнала Өфөлә II "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале башлана. Фестивалдең үҙенсәлеге, үткәреү тәртибе, унда ҡатнашҡан фильмдар тураһында режиссер, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Айнур АСҠАРОВ һөйләй:**



### Яңы режиссерҙар, яңы фильмдар…

"Көмөш Аҡбуҙат" милли һәм этник фильмдар фестивале икенсе тапҡыр ғына үтә, шуға ла уны нимә менәндер сағыштырып та булмай. Былтыр уҡ ул шәп кинолар тәҡдим итеүе менән айырылып торғайны, хәҙергә ошо кимәлдә һаҡлау шарт беҙгә. Һәм, әлбиттә, ойоштороу йәһәтенән быйыл ул тағы ла сифатлыраҡ буласаҡ, сөнки уны әҙерләүсе белгестәрҙең тәжрибәһе байыны.

Конкурс программаһына килгәндә, һис шикһеҙ, тәүге йылда ул һәр яҡыт-та ла көслөрәк булалыр ул. Быйылғы фестивалдең фильмдары буйынса тамашасы үҙ фекерен еткерер, әлегә ниндәйҙер һығымталар яһауы ауыр. Күрсәк тә сағылалыр инде, ни тиһәң дә, кино сәнғәте ҙур сығымдар талап иткән өлкә, унан һуң, һәр кинонең уңышлы булып китмәүе лә бар. Шулай ҙа быйыл яңы режиссерҙар, яңы йүнәлештәге фильмдар ҡатнаша - сара бик мауыҡтырғыс булырға тейеш. Иң ҡыҙығы, алдан ниндәйҙер тема билдәләнмәһә лә, ни мөғжизә менәндер, бар фильмдар ҙа тиерлек һыу менән бәйле: геройҙар һыу аша үтһенме, һыу эҙләһенме, һыу байрамы күрһәтелһенме. Ниндәйҙер сәбәп менән конкурс программаһына инмәгән фильмдар айырым күрһәтеләсәк. Этник кинола теге йәки был милләттең донъяға ҡарашы, ниндәй уйҙар-хыялдар менән йәшәүе, көнүҙәк проблемалары, уларҙы хәл итеүҙәге ҡараштарҙың төрлө булыуы асыҡ сағылыусан. Әммә быйыл минә беҙ быға тиклем күтәреп өйрәнгән проблемалар бер ҙур донъяуи тема - тыныслыҡ темаһы эргәһендә ҡалаһып ҡалған кеүек. Кешелектең һуғыш хәүефе алдында торғанын барыһы ла аңлай, был ҡурҡыныс барыһын да борсой. Халыҡтарҙың бер-беренең тоя, аңлай һәм ихтирам итә белеүе, бер-берең менән дуҫлыкта, татыулыкта йәшәү - ул ерҙәге тыныслыҡтың нигеҙе.

### Йәштәргә ҙур мөмкинлек

Фестиваль сиктәрендә төрлө эшлекле осрашыуҙар, оҫталыҡ дәрестәре лә ҡаралған. Мәҫәлән, йәш кинематографистар ойошмаһы "Дебютанттар өсөн башҡорт питчингы" ойоштора. Бөтөн Рәсәйҙән килгән 51 проект араһынан иң көслө 12 эште һайлап алдыҡ. Фестивалгә төрлө режиссерҙар, продюсерҙар килә, әлеге мәлдә беҙ улар менән бәйләнештә, үҙ-ара аралашып тораbыҙ. Ошо 12 эш авторы улар алдында сығыш яһап, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үҙҙәрен проектын тәҡдим итергә тейеш була. Әгәр ҙә ҡыҙыҡһындыра алһалар, продюсерҙарҙың уларға хеҙмәттәшлек итергә тәҡдим итеүе лә бар. Өҫ еңеүсе "Башҡортостан" киностудияһының сертификаттары менән бүләкләнәсәк, уларға киностудия кино төшөрөүҙә техник яҡтан ярҙам итәсәк. 9-12 декабрҙә иртәнән кискә тиклем оҫталыҡ дәрестәре барасаҡ.

Бөтөн донъяла барған иҡтисади көрсөк кинола һиҙелерлек эҙ ҡалдыра, шулай ҙа йәштәрҙең кино сәнғәтенә ынтылышы көслө бөгөн. Бер оператор менән һөйләшкәндә һуңғы мәлдә үҙемде ҡыҙыҡһындырған идея таба алмауым, кешене аптыратырлыҡ берәй нәмә табырға кәрәклеге хаҡында уйланыуым тураһында ла әйттем. Сөнки фестивалгә йөрөгәндә хәҙер кинолар ысынлап та күп төшөрөлә, әммә уларҙың кимәле бер төрлө икәнен күрәһең. Ә ул оператор минә: "Тамашасыны аптыратыр өсөн түгел, ә күңелеңде нимә борсой, шул турала кино төшөрөргә кәрәк", - ти. Уның менән тулыһынса килешәм, күңелеңдә йөрөтөп һалынған идея ғына яҡшы киноға әүерелә ала. Бөгөн йәштәрҙең кино төшөрөргә ынтылышы ла шуның менән бәйлелер. Тимәк, уларҙың күңелендә кешелек менән уртаҡлашырлыҡ фекерҙәр өлгөрөп еткән. Эштәрҙе ҡарағанда аралаrында шундай яҡшылары бар, бөгөндән уларға тотонорға мөмкин. Әлбиттә, Голливуд киноларында тәрбиәләнгән быуында Голливуд киноларына пародия эшләргә тырышыу ҙа бар. Бәлки, тәүге киноларын голливудса төшөрөргә теләйҙәрҙер, әммә ижадта был мөһим түгел. Иң тәүҙә һәр темаға үҙ ҡарашың, уны асыуҙа үҙ ысулың булырға тейеш. Бигерәк тә милли кинематографияла был йәки теге проблемаға минең башҡорт булараҡ ҡарашым мөһим. Әлеге эштәрҙең тематик төрлөлөгөнә килгәндә, уларҙа фантастика, социаль жанр өҫтөнлөк итә. Социаль тема башлыса ғаиләләге үҙ-ара мөнәсәбәттәргә ҡороlһа, фантастикала шул уҡ ғаилә мөнәсәбәттәренә киләсәктән ҡараш ташлана.

### Көнүҙәк мәсьәләләр күп

"Милли" кино критерийын төрлөсә аңлатырға мөмкин. Мәҫәлән, Башҡортостанда төшөрөлгән һәр кино башҡорт киноһы булып иҫәпләнә. Фестивалдә лә Мәскәүҙән, ВГИК-тан кинолар күп, унда рус кешеһе башҡа берәй милләттең проблемаларын сағылдыра, шуға улар ҙа милли кино. Йәғни, милли кино тигән төшөнсәгә аныҡ ҡына яуап биреүе еңел түгел. РФ Мәҙәниәт министрлығы киноларға "Милли фильм таныҡлығы" бирә, унда төрлө фильмдар инә. Һәр хәлдә, башҡорт киноһы был төркөмгә еңел генә әлегер инә. Башҡорт киноһын башҡорт студияһында, Башҡортостан аҡсаһына башҡорт режиссеры төшөрә, ул башҡорт телендә һәм башҡорт тамашасыһына тәғәйенләнгән.

Киләһе йыл Рәсәй киноһы йылы тип аталасаҡ. Беҙ Рәсәй төбәге, тимәк, беҙ ҙә Рәсәй киноһын төшөрәбеҙ. "Рус түгелмен, ләкин россиянмын, Россияның һыуын эскәнмен", тигән бит әле бөйөк шағирыбыҙ. Рәсәй - беҙҙең Оло Ватан, тимәк, беҙ ҙә Рәсәйҙә үҫкән, Рәсәй һыуын эскән режиссер булып сығабыҙ. Кинематография өлкәһендәге финанс ҡытлығы тотош Рәсәйгә хас, бөтөн төбәктәрҙә лә бер үк проблема - аҡса етмәй. Бергә уҡыған режиссерҙар менән күп аралашам, улар минә бер аҙ көнләшеп тә ҡарай әле, ярай һинә республикаң аҡса бирә, һин кино төшөрәһең, тиҙәр. Һәр режиссерға ярҙам итеп тә булмайҙыр, шулай ҙа матди мөмкинлектәребеҙ артһын ине.

Башҡортостанда кино йорто, кинематографистар берлегенең үҙенең урыны юҡ. Кино йорто булһа, ул был өлкәлә эшләүселәрҙе юридик яҡтан яҡлаясаҡ, унда төрлө саралар үткәрергә буласаҡ. Әле нимә генә ойошторһаҡ та, "Родина" кинотеатрына мөрәжәғәт итеп, уларҙың эш планына ҡыҫылырға мәжбүрбеҙ. Бындай һораүҙар бик күп, бәлки, Республика Башлығының мәҙәниәт өлкәһендәге гранты күберәк фильмдар төшөрөүгә бүленер киләһе йылда.

### Фестиваль - үҙеңде күрһәтеү ысулы

"Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивалендә быйыл Башҡортостандан 5 режиссерҙың эше ҡатнаша. Сағыштырмаса ҙур күрһәткес был. Әлбиттә, фестиваль бөтөн башҡорт режиссерҙарын үҙенә туплай тип әйтеп булмай, беҙҙә режиссерҙарҙың һаны ла күп түгел. 4 млн халыҡ йәшәгән төбәк өсөн яҡынса 10 режиссер - ул бик аҙ. Уларҙың да йылына 1-2-һе генә кино төшөрә, ҡалғандар үҙенең сиратын көтөргә мәжбүр, сөнки матди хәлебеҙ шулайыраҡ. Һуңғы мәлдә һәр төбәктең үҙенең фестивале барлыҡҡа килде, уларҙың һәр береһе үҙенең режиссерҙарын күрһәтергә тырыша. Беренсенән, шул рәүешле улар төбәктәренең дә, режиссерҙарының да дәрәжәһен күтәрә, икенсенән, шунда йыйылған халыҡҡа үҙҙәрендә ниндәй кинолар төшөрөүен дә күрһәтә. Имидж булдырыу йәһәтенән был, бәлки, үҙен аҡлайҙыр ҙа, фестивалдә еңгән икән, әйҙәгеҙ, был режиссерға тағы ла төшөрөү өсөн мөмкинлек бирәйек, тип әйтеүҙәре ихтимал. Ни генә тиһәң дә, фестиваль - ул режиссерҙар өсөн пиар, реклама. Тик шулай ҙа мин үҙебеҙҙә үткән фестивалдә үҙебеҙҙең режиссерҙарға төп призды бирергә ыңғай ҡарамайым. Шунда уҡ ниндәйҙер һүҙ китә, ғәҙелһеҙлек кеүек тойола был минә. Быйыл тағы ла фестивалгә тулы метрлы фильм тәҡдим итә алмайбыҙ. Айсыуаҡ Йомағолов, Вилүрә Иҫәндәүләтова, Таңсулпан Бураҡаева, Руслан Юлтаев, минең фильмым да ҡыҫҡа метрлы, улар үҙ-ара конкурент булып сыға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли кинематография өлкәһендәге һәр аҙым мөһим бөгөн. Был фестивалдең дә милли киноны үҫтереүҙә өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Кинофестиваль байрам ғына түгел, ә республикабыҙға, милләтебеҙгә кино мәҙәниәтен алып килә - уның төп мәғәнәһе ошондалыр ҙа, бәлки. Конкурс программаһында ҡатнашыусылар араһында Рәсәй төбәктәре лә, Иран да, Тажикистан да, Һиндостан да, Эстония ла, Ҡырғыҙстан да, Бангладеш та, Үзбәкстан да, Әрмәнстан да бар. Был илдәрҙә йәшәүсе милләттәр башҡорт фестиваленә, тимәк, башҡорт киноһына ышаныусын белдергән. Ә башҡорт тамашасыһының башҡорт киноһына ышанысы фестивалдең тулы залдары менән билдәләнәсәк. Фильмдар "Родина" кинотеатрында һәм "Актерҙар йорто"нда иртәнге сәғәт 10-дан башлап күрһәтеләсәк. Фестиваль киноларына билет һатып алырға кәрәкмәй, улар түләүһеҙ күрһәтелә. Был матур саранан ситтә ҡалмайыҡ!**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

ИНТЕРНЕТТАН




# КӨСЛӨ ТАУЫШТАН...

## йөрәгеңде һаҡла

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндә һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдә 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә, беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi -ҙың тәьҫир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, бының өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр арала торорға кәңәш итә.

■ Туҡланыу продукттары хәүефһеҙлеге буйынса Европа идаралығы (EFSA) аспартам буйынса тикшеренеүҙәрҙе тамамлаған һәм уны хәүефһеҙ тип тапҡан. Шәкәрҙән 200 тапҡыр татлыраҡ булған аспартам диабет менән ауырыусылар һәм үҙ кәүҙәһе ауырлығын контролдә тоторға теләүселәр өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙа әҙерләүҙә ҡулланыла. Шәкәрҙе алыштырыусының канцероген сифаттары буйынса бәхәстәрҙә уның зыянлы булыуын билдәләй инеләр. Эксперттар әйтеүенсә, дозаһын арттырған осраҡта аспартам ысынлап та зыянлы, әммә уға ағылған башҡа ғәйептәр дәлилләнмәгән. Төрлө илдәрҙә уның максималь дозаһы төрлөсә билдәләнә, шулай ҙа ул яҡынса тәүлегенә 100-130 таблетка. Аспартам диетик газлы эсемлектәрҙең, һағыҙҙарҙың составына ла инә.

■ Билдәле булыуынса, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында һөйөү бик тиҙ тоҡана, тимәк, ғашиҡ булыуҙың төп сәбәптәренең береһе булып тышҡы ҡиәфәт тора. Ғашиҡ булыу өсөн ҡатын-ҡыҙ ир-егетте ниндәй итеп күрергә тейеш һуң? Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери үткәргән һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән, был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был тәжрибәлә ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

■ Каролина Эриксон етәкселегендәге тикшеренеүселәр төркөмө билдәләүенсә, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеген бозоу өсөн ҙур булмаған тауыш та етә. Тәжрибә барышында 110 кеше йөрәк ритмын теркәп барыусы портатив мониторҙар йөрөткән. Медицина хеҙмәткәрҙәре улар булған урындарҙа тауыштың кимәлен тикшергән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, тауыш 65 децибелға ғына күтәрелһә лә (ул ҡысҡырып һөйләшеүгә тин), йөрәк ритмы шунда уҡ көсәйә икән. Шуға ла тауыш көслө булған урындарҙа йөрәк өйәнәге ихтималлығы ла арта.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 12-се һабаҡ: "Мине мөхәббәт ҡотҡарҙы"

Аллаһы Тәғәлә бәндәләренең иң ауыр сағында уларҙы ҡотҡарыр өсөн ергә үҙенең фәрештәләрен ебәрә, тиҙәр. Яр ситендә, ни кире диңгеҙгә төшөргә, ни ярҙа ҡалырға белмәй аҙапланғанымда, күктән нур шәлкеме ҡойолдо ла, күҙҙәремде сағылтып, бар булмышымды балҡытты. Был мөғжизәнең ни икәнен дә аңғармай ҡалдым, бер ҡасан да ишетмәгән сихри моң булып яғылды минә ҡөҙрәтле көскә эйә булған яҡтылыҡ. Ҡан тамырҙарыма йәшәү һуты йүгерҙе, тын юлдарым иркенәйеп, йәнем асманға ашҡандай тойолдо, үҙемдә сикһеҙ көс барлығын да һиҙәм хәҙер. Йәшәгәндәйәшәгеләрем килгәндәй...

Яр ситендә дым там итеп, кибеп-сарсап ҡорғаҡһыған күңелгә шул ғына кәрәк инде. Үҙемде-үҙем белмәҫтән, һикереп аяғыма баҫтым да, нур ҡойолған күккә ҡарарға итәм. Тик бер нәмә лә күрмәйем, күҙгә ҡапыл килеп һуғылған сағыу яҡтылыҡтан тамам һуҡырайғанмын.

Күккә ҡарап айбанғанмын икән, ҡараштарымды ергә күсергәс, эргәмдә баҫып торған ҡатын-ҡыҙҙы күрҙем. Үҙе таныш та, таныш та түгел һымаҡ, әммә ҡараштары шул тиклем яҡын. Хатта уның күҙҙәрендә үҙ-үҙемде лә күргән, уға ҡараһам, үҙемә ҡараған кеүекмен. Таныным, үҫмер сағымда мине бер күреүҙә ғәжиз иткән, әммә үҙемә бер тапҡыр ҙа күтәрелеп ҡарамаған илаһи зат. Тормош уны ла бик үк иркәләп бармағаны булмышына сыҡҡан. Әммә тәбиғи мөләйемлеген, кешелекле-кеселекле сифаттарын йылдар һис тә юя алмаған. Уның Илаһиә затынан икәнлеген асылына сығып балҡыуында күрергә була. Ысын мәғәнәһендәге Хоҙай кешеһе, үҙенә шәрҡ нуры һеңгән, нағыш та, һағыш та бергә үрелгән.

Уның янына килдем, тик ни эшләргә лә белмәйем. Шулай ҙа һүҙ әйтергә баҙнатым етте, тертләтеп ҡуймайым тип, иплән кенә өндәштем үҙенә. Беҙҙең арала шундай һөйләшеү булды:

- Һаумы, һине бында ниндәй елдәр ташланы, әле генә минә нур шәлкеме килеп һуғылғандай булды ла, ҡараһам, һин...

- Һауғынамын, уйланымуйланым да, тукта, мин әйтәм, ғүмер үтеп бара, был нисек икән, тип хәлеңде белергә килдем...

- Рәхмәт килеүеңә, хәлемде үҙең күреп тораһың, яр ситендәмен, килеп өлгөрмәгән булһаң, диңгеҙгә төшкән булыр инем...

- Был сир менән яфаланғаныңды белә инем. Шуға күрә лә, аҡылһыҙлыҡ тигән шарап диңгеҙенә кире сумма һын, тип килдем дә инде мин. Әлегерәк тә килә ала инем, әммә ошо мәл өсөн үҙемде һаҡланым.

- Әлегерәк тә килә ала инем, тиһеңме, ә һин минең был хәлемде ҡайҙан белдең һуң?

- Кәрәк булғанның өсөн белдем, күңелемдә йәшәгәнең өсөн...

- Йәшлегебеҙ сәскә атҡан саҡта мин дә һинең янына килгәйнем, һин, исмаһам, бер тапҡыр күтәрелеп тә ҡарамаңың...

- Үҙең ғәйепле, тимәк, баҙнатһыҙ булғанһың!

- Тормошоң нисек?..

- Ауылда торам, балалар үҫтерәм. Донъяла һин бар тип йыуанып йәшәйем...

Беҙҙең арала тик ошондай, ҡыҫҡа ғына һөйләшеү булды, үҙен күреп тә туйманым. Ергә нисек килеп төшкән булһа, шулай кире күккә осоп та китте. Күҙ ҡараштарым менән үҙен оҙатырға ла өлгөрмәнем. Уның ҡарауы, шифалы нуры булмышыма һеңеп ҡалды.

Тап ошо мәлдән мин "Нисек итеп яңынан йәшәй башларға?" тигән һорауыма яуап таптым да инде. Күптәр уны йәшәү мәғәнәһе тип тә атай. Минә ҡалһа, ул эске инаныуҙыр, намыҫың, булмышың алдында бер ваҡытта ла хыянат итмәй торған үҙлегеңдер. Кеше хатта үҙ-үҙенә хыянат иткән хәлдә лә, намыҫ тигәнең үҙгәреүһеҙ ҡала, кирегенсә булған осраҡта ул намыҫһыҙлыҡ тип аталыр ине. Шул мәл яр ситендә эске тауышым телгә килде, ирендәрем дә уны ҡабатланы: "Касандыр күңел донъяңды гөл-сәскәгә әйләндергән, тик хыялыңда йәшәүсе изге йән һинә үҙе килгән. Ул һине ғүмере буйы яратып йөрөгән, һин уның күңелендә йәшәйһең. Бынан был ягына уның күңелен "йәшел йылан" менән ағыуларға тейеш түгелһең!"

Был һүҙҙәрҙе мин үҙем уйлап сығарманым, булмышымда үҙенән-үҙе яңғыраны, ирендәрем уларҙы бары ҡабатланы ғына. Ә ниңә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе йәшлегебеҙ сәскә атҡан саҡта уҡ ҡауыштырмаған, мин бит шундай кеше менән бергә йәшәгән булһам, бер ваҡытта ла шарап диңгеҙҙәренә батмаҫ инем, тип үрһәләнәм. Юҡ, тип кире уйлайым, Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына ҡаршы килеп булмайҙыр. Хәҙер инде һуң, тормошта шул кешене эҙләргә тырышыу һәм ошоно маҡсат итеп ҡуйыу Бөйөк көстө инҡар итеү ҙә булыр ине. Үҙенең бәндәһенә ынтылғанымды белһә, язаһын да бирәсәк бит ул. Барыһы ла ошо мәлдән яңынан башлана икән, алда тағы ла һынауҙар, ауырлыҡтар көтәсәк мине, шуныһы тормошта енеллектәр килмәй. Тимәк, юлымда кәртәләр осраған саҡта донъяла шундай кешемдең барлығын иҫкә төшөрөү минә көс-ҡеүәт бирәсәк. "Минең бит шундай кешем бар, уның күңелендә йәшәгән кешеһе булараҡ, мин лайыҡлы ғүмер итергә тейешмен, ғүмер арауығын мөмкин тиклем сағыу итеп үткәрергә бурыслымын. Ул үҙенең шундай кешеһе барлығына ғорурлыҡ тойғоһо кисерһен һәм шунан үҙенә лә йәшәү көсө алһын!" тигән эске инаныуым йәшәү маҡсатыма әүерелде тап ошо көндә.

Әгәр ҙә кире диңгеҙгә сума ҡалһам, донъялағы иң мөҡәддәс тип һаналған мөхәббәт тойғоһо ла ялған ғына хис булып сығасаҡ. Тимәк, мин икебеҙ өсөн дә ошо тойғоно һаҡлап ҡалырға уйлаһам, уға мөхәббәттең барлығын иҫбат итер өсөн эсмәҫкә тейешмен.

Хоҙай уның менән аңлашыуҙы тап ошо мәлгә, ғүмеремдең иң ауыр сағына тип билдәләгән икән, юҡҡа түгелдер. Был бит, ысын мәғәнәһендә, Мөхәббәттең үҙе - Аллаһы Тәғәләнең икебеҙҙе лә үҙ итеп яратыуы. Ул минә иң ҡыйын мәлемдә уны изге фәрештә итеп ебәрергә ҡарар иткән дә, йәш саҡта ҡараштарын ситкә күсерткән. Сөнки киләсәктә минең ғүмерҙе һаҡлап ҡалырға уйлаған.

Араҡы-шарап диңгеҙе - Иблис ризығы, Мөхәббәт - Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте. Алдағы көндәремдә Иблис төрлө сүрәткә инеп, үҙ етәктәрен эшләп маташасаҡ әле, әммә иң ауыр мәлемдә булмышыма килеп тулған мөхәббәт тойғоһо барыбер еңәсәк.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ҺЫУЫҠ ҺЫУҘЫҢ... ЗЫЯНЫ



**Һыуҙың төрлө үҙенсәлектәре булыуы тураһында бөтәһе лә белә. Әммә бик һирәктәр генә уның үҙенсәлектәрен үҙ файҙаһына ҡуллана. Алыҫ 1969 йылда совет рентгенологтары донъяға киң билдәле фастфуд һатыусы компанияларҙың һыуыҡ һыуҙың бер ҡыҙыҡлы үҙенсәлеге арҡаһында аҡса эшләүен асыҡлаған.**

Рентгенологтар барийлы бутҡаны билдәле бер ваҡыт буйына ашҡаҙанда тотоу буйынса тикшеренеүҙәр үткәрә. Әммә ғалимдар аппаратураны яйлап өлгөргәнсе, бутҡа ашҡаҙанда эшкәртелеп бөтә. Күп тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, ашағанда һыуыҡ эсемлектәр эсһәң (һыуыҡ һыу, боҙ ҡушылған газлы һыу), ашҡаҙанда 4-5 сәғәт эшкәртелергә тейеш аш 20 минут эсендә "төшөп китә". Аш туҡлыҡлы булмай, тиҙ генә асыҡтырғас, кеше тағы ла өҫтәп ашай, һөҙөмтәлә һимерә. Бынан тыш, ашҡаҙан яҡшы эшләмәү сәбәпле, сереү процесы башлана.

Киң билдәле "Макдоналдс" үҙ бизнесын тап ошоға таянып аҫҡан. Кеше ашты (сэндвич, гамбургер, чизбургер) һыуыҡ эсемлек ҡушып ашаһа, туймай, тағы килә. "Макдоналдс"та эҫе эсемлектәргә (сәйгә, ҡәһүәгә) хаҡтарҙы юғарыраҡ ҡуялар, бер ҡасан да комплекслы йыйылмалар эсенә индермәйҙәр, хатта рекламаларында ла һирәк күрһәтәләр. Ә бына боҙло "Кока-кола" күпкә осһоҙ тора, рекламала ла, комплекслы йыйылмаларҙа ла һәр саҡ күрһәтелә.

Ашағанда һыуыҡ һыу эскән саҡта аҙыҡ аҡһымдары эсәктәрҙә тороп ҡала һәм серей башлай. Һөҙөмтәлә эсәк ауырыуҙары һәм дисбактериоз менән сирләү ҡурҡынысы тыуа. Һыуһынды ҡандырыу өсөн һыуыҡ һыу эсергә кәрәк, тигән кәңәш тә дөрөҫ түгел. Белгестәр әйтеүенсә, быһың өсөн һыу кеше организмының температураһына тиклем йылынырға тейеш.

Шулай итеп, ашағандан һуң һыуыҡ эсемлектәр эсмәгеҙ. Бөтә эсемлектәр бүлмә температураһына тиклем булһа ла йылынған булырға тейеш. Аштан һуң туңдырма ашаған осраҡта ла ризыҡ ашҡаҙандан тиҙ төшә һәм унда булған аҡһымдар эсәктәрҙә эшкәртелмәй тороп ҡала.

✓ *"Апай, мин араҡы эсмәйем", - тинем. Уҡытыусым ер тишегенә инерҙәй булып уңайһыҙланды, ҡаушаны. Тик алға, тик юғарыға әйҙәгән кешем менән араҡы эсеп ултырыуҙы иң хәтәр төшөмдә лә күрә алмаҫ инем.*



*УЙЛЫҒА -УЙ*

# БЕҘ ЭСЕРГӘ АТАЙҘАРҘАН ӨЙРӘНДЕК,

## ә атайҙар ул ғәҙәтте һуғыштан алып ҡайтты



* * *

Тиҫтерҙәрем араһында араҡы менән ныҡлап мауығыу ун алты - ун ете йәштәр тирәһендә башланды. Ауылда байрамдарҙа аулаҡ өйгә йыйылыу йолаһы беҙҙең йәшлеккә инеү осоронда араҡыһыҙ үтмәй ине. Егеттәр эсемлек хәстәрләй, ә ҡыҙҙар - тәғәмлек (закуска була инде халыҡ телендә). Беҙҙең заман ҡыҙҙары, хәҙергеләрҙән айырмалы рәүештә, егеттәр алдында шарапҡа йоғонмай торғайны. Бик һирәктәрен, үтә саяларын (боҙоҡтарындыр, бәлки) иҫәпкә алмағанда. Мәктәпте тамамлауға егеттәрҙең байтағы эсеүҙең тәртиптәрен, үҙенә күрә йолаларын белә ине инде. Әйтәйек, һауыттарға шешәләге араҡыны, бер кемде лә айырмай, тигеҙ ҡойоу; рюмканы төп күтәреп, бөткәнсе эсеү; эсеп ебәргәс, рәтенә килтереп, тәғәмләнеү; рюмка тотоп тост әйтеү, йә булмаһа, тәғәйен ым-ишара яһау, мәҫәлән: "Йә, ярай, әйҙә, киттек!"; эске табыны артында урын-еренә еткереп әңгәмә ҡороу; иртәгәһенә баш төҙәтеү...

Иҫкә төшһә, күтәрелгән теманың абсурдлығы, эскерһеҙ бер ҡатлылығы менән әле лә йылмайыу уятҡан "эскелек әңгәмәһе темаһының" бер вариантын һәм унын аҙағы ни менән бөтөп ҡуйғанын килтереп китеү урынлы булыр. Эске табыны артынан тәмәке тартырға тышҡа сыҡҡан ике егет әңгәмәләшә:

- Мин аңламайым, комсомол менән партия араһында ниндәй айырма бар? Бер үк принциптарға таянып эшләйҙәр, бер үк маҡсатҡа әйҙәйҙәр.

- Эйе, шул. Партия менән комсомолды ҡушып ҡына ҡуйһалар ни булған инде. Мин дә аңламайым...

- Бына мин комсомол, ә ағайым уже коммунист. Беҙҙең арала ниндәй айырма? Ул юҡ. Взносты әҙерәк түләйем инде. Шул ғына. Брежневҡа хат яҙам әле был турала.

- Брежневҡа түгел, ВЛКСМ секретары Тяжельниковка яҙырға кәрәк. Ундай эште кеше аҫтан башлай.

- Тяжельников барыбер үҙе хәл итә алмай бит мәсьәләне. Бөтә эштәр менән партия командовать итә. Уставты уҡып ҡара, аңра.

- Кем аңра? - Әлбиттә, шунда уҡ береһе икенсеһенең яғаһынан алды һәм китте көрмәкләшеү. Саҡ айырып алдыҡ.

Был ике егет артабанғы тормошта, эскелеккә һабышып, береһе аҫылынып үлде, икенсеһе, асарбаҡ хәлендә, иллегә лә етмәй йөрәктән китеп барҙы.

* * *

Араҡы шауҡымы аҫтында шулай, күпме буш хәбәр һөйләнә, юҡтан бәхәстәр ҡуба, һуғышталашҡа барып етә.

Ҡулға өлгөргәнлек аттестаты алғас, кәйеф-сафаны дуҫтарым асыҡтан-асыҡ ҡорҙо, ололар тарафынан тыйыу ҙа ҡәтғилеген юғалтты. Саманы белеп эсеүселәргә өндәшеүсе лә булманы.

Армияға егеттәрҙе оло эске табыны ойоштороп, иҫһеҙ итеп эсереп оҙаттылар. Юл моҡсайҙарына берәр шешә тығып ебәреү ҙә мотлаҡ һаналды. Ата-әсәләрҙең үҙ ғәзиз балаһын шул рәүешле эскелек упҡынына тағы ла яҡынлата төшөүен иҫкәртеүсе лә, киҫәтеүсе лә булманы. Йола шулай ине. Йолаға ҡаршы барып булмай!

Егеттәр армияла ла эсеп ҡырҡышты. Башҡа сығырлыҡ эсмәйҙәр, тамаҡ ҡына сылаталар. Ни өсөн? Мин уларҙы аңламай инем.

Армиянан ҡайтып инеү ҙә, тура эске табынына юлығыу менән бәрәбәр булды.

Бала саҡта уҡ мин, ҙурайғас эсмәйем, тип үҙемә һүҙ биргәйнем. Армияға тиклем, армияла уға тоғро ҡалдым. Ике йыл да ике ай хеҙмәт итеп, ҡайтып килгәндә, район үҙәгендә ҡунып ҡалырға тура килде. Уңайы сыҡҡас, уҡытыусыма инеп сығырға булдым. Егерме йәшлек элекке уҡыусыһына араҡыны ул тәҡдим итте. "Апай, мин араҡы эсмәйем", - тинем. Уҡытыусым ер тишегенә инерҙәй булып уңайһыҙланды, ҡаушаны. Тик алға, тик юғарыға әйҙәгән кешем менән араҡы эсеп ултырыуҙы иң хәтәр төшөмдә лә күрә алмаҫ инем. Ә ул өнөмдә ғәмәлләшә яҙҙы...

Беҙ тәрбиәләнгән һәм көн иткән йәмғиәттә әхлаҡ төшөнсәһенең баштүбән ҡуйылыуына был асыҡ дәлил. Ҡайһы бер аҙымға теләһә ҡайһы хәлдә лә барырға ярамағанлығын хатта интеллигент исемен йөрөткән ағай-апайҙар ҙа белмәй ине шул. Хәҙер хәл тағы ла киҫкенерәк.

* * *

Армиянан ҡайтып килеүем тураһында телеграмма менән хәбәр иткәнлектән, мине табын әҙерләп, туған-тыумаса, күрше-күлән йыйылып, көтөп торғандар. Түргә ултырттылар. Араҡы ҡойҙолар. "Хәҙер һиңә ярай. Армияла йөрөп, ир булып ҡайттың. Тартынма, күтәр, әйҙә", - тип ихлас күңелдән өгөтләнеләр.

Миңә ҡалһа, "эсмәйем", тип әйтеүемә табын артындағыларҙың оло хуплауына лайыҡ булып: "Маладис, эсмә шул. Бер ваҡытта ла шайтан һыуын ауыҙыңа алма!", - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тейеш инем. Ишетмәнем. Киреһенсә, табындағы ирҙәр "тәрбиәүи" нотоҡ уҡынылар. Төп күтәрә эсеп ебәреү ир кешенең ирлеген күрһәткән һәм иҫбатлаған төп дәлилдәрҙең береһе, имеш, уларҙың һүҙенә ҡарағанда...

Ҡорҙаштарымдың байтағының йөҙөндә егерме биш - утыҙ йәшкә еткәндә алкоголиктарға хас һыҙаттар күренә башлағайны. Минең үҙемә лә башҡалар араһында ала ҡарға булып йәшәргә насип булмай сыҡты. Табындарҙа әҙләп рюмка күтәрҙем. Тик бер ваҡытта ла саманан сыҡманым, иҫергәнсе эсмәнем.

Уратып алған мөхиттән өҫтөн булып булмай! Тормошобоҙҙо үҙебеҙгә ҡаршы ҡорғанбыҙ, һәм берберебеҙҙе ыҙалатып, үҙебеҙ булдырған кәртәләрҙе емерә-емерә, ауырлыҡтарҙы артыла-артыла, кеше булып ҡалырға, балаларыбыҙҙы ла бәхетле итергә маташабыҙ. Асылда, Дон Кихот ише ел тирмәне менән көрәшәбеҙ. Араҡыға батҡан йәмғитебеҙҙе тыйыуҙар ҙа (Горбачевтың "ҡоро законы"), тәрбиә лә, ҡаты закондар ҙа дауалай алырлыҡ түгел. Уға бөгөн дин һәм йәштәрҙең башҡаса йәшәргә ынтылыуы ғына ҡаршы тора алыуы ихтимал...

Мин малайҙарым алдында рюмка тотоп ултырманым, был йәһәттән уларға үрнәк күрһәтмәнем. Ҡыуанғаным шул: улар эске шауҡымына бирелмәй, егет ҡорона инделәр. Барыбер шик-шөбһәгә төшкән мәлдәр аҙ булманы. Улдарым иптәштәре менән уйын-кисәләргә лә йөрөнөләр, таңға ғына ҡайтып ингән саҡтары ла йыш булды. Ишеккә барып, үҙем ҡаршы ала торғайным был осраҡта. Шөкөр, өмөтөм аҡланды, ахыры...

**Сәғиҙулла РӘСҮЛЕВ.**
**(Аҙағы. Башы 48-се һанда).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

### Икенсе сер

Әгәр юлыбыҙға ҡаршы төшһәләр, үҙебеҙҙе кире ҡағылған, ситкә тибелгән тип тоябыҙ. Бала саҡта бындай ҡылыҡты ғәфү итеп була, әммә өлкәнәйгәс был ауыр ҡабул ителә. Әлегәсә башҡаларҙы үҙегеҙ ҙә йырып сыға алған эште башҡарырға мәжбүр итергә теләйһегеҙ икән, һеҙҙе эмоциональ яҡтан өлгөргән кешеләр рәтенә индереп булмай.

Беҙҙең заманда балаларға күберәкте биреп, уларҙан алмашҡа аҙыраҡты көтөү ғәҙәте тамырланып бара. Быға ғәйепле ата-әсәләр балаларын үҙҙәренүҙҙәре тәьмин итә алырлыҡ нәмәләрҙән бәйле булырға мәжбүр итә. Ғүмеренең тәүге 18 йылын тулыһынса башҡаларҙан бәйле булып, балалар яҡшы тәртибе өсөн ниндәйҙер өҫтөнлөктәргә эйә булған тотҡондар роленә күнә. Шуныһы ҡыҙыҡ: бындай күренеш бары тик кешеләргә генә хас. Хайуандар балаларын тыуыу менән тышҡы донъяға сығара һәм улар унда тиҙерәк үҙаллылыҡҡа өйрәнә.

Ата-әсәләр балаларына бирә алған иң ҙур бүләк - уларға үҙ-үҙҙәренә ышаныс һәм үҙлек тәрбиәләү. Ниндәй генә йәштә булыуына ҡармаҫтан, балаға көсөнән килерҙәй яуаплылыҡ йөкмәтергә кәрәк. Бойондороҡһоҙлоҡ арҡаһында ғына балалар ҡыуаныс кисерә, үҙ аяҡтарында баҫып тора алыуынан ҡәнәғәтлек ала һәм кешелек абруйын тоя.

Балаларға бәйлелектән үҙаллылыҡҡа күсеүҙә ярҙам итеү - ата-әсәнең мөһим бурысы. Улар үҙ хаталары һөҙөмтәһендә һабаҡ алырға тейеш. Кире осраҡта хатта өлкәнәйгәс тә: "Мин уны эшләй алмайым", - тип һәр саҡ мыжыясаҡ. Ниндәйҙер аҙымға, ғәмәлгә һуңғы һөҙөмтәгә ышанған ваҡытта ғына барасаҡтар, сөнки ныҡ хәстәрлекле ата-әсәләре һәр саҡ улар өсөн юл ярып бара.

Һәр ваҡыт кеше өсөн нимәлер эшләһәгеҙ, һеҙ уға зыян ғына килтерәһегеҙ. Ни тиклем икенсе кеше тураһында хәстәрлек күрәһегеҙ, шул тиклем уны уйлау һәм үҙаллы эшләү мөмкинлегенән мәхрүм итмәҫ өсөн нығыраҡ күҙәтеп торорға кәрәк. Был балалар менән ата-әсәләргә генә түгел, никахҡа ла, башҡа мөнәсәбәттәргә лә ҡағыла. Беҙ башҡаларҙың яҙмышы менән йәшәй йәки уларҙы ни тиклем яратһаҡ та, улар өсөн тулы яуаплылыҡ ала алмайбыҙ.

Кендекте үҫмер ваҡытта уҡ ҡырҡырға, балаларға 18 йәштән айырым торлаҡ эҙләргә кәрәк, тип уйлайым. Күп ата-әсә миңә ҡаршы сығыр һәм үҙҙәренең логик дәлилдәрен килтерер. Әммә факт факт булып ҡала: йәштәрҙә ата-әсәһенән айырым йәшәү генә үҙаллылыҡ үҫешенә йоғонто яһай.

Ҡыҙыҡ, әммә ниндәйҙер өлкәлә - бизнеста, идара итеүҙә, сәнғәт һәм фәндә юғары уңыштарға өлгәшеүселәр үҙ теләктәре менән ата-әсәләре ҡанаты аҫтынан китеп, үҙаллы йәшәүселәр.

Ата-әсәләрҙән: "Беҙ уға уҡыуында ярҙам итергә теләйбеҙ", "Ата-әсә йортонда йәшәп, аҡса экономиялай аласаҡтар", "Аяҡҡа баҫҡансы ғына беҙҙең менән йәшәйҙәр", "Уҡыуына ла, фатирға ла түләп йәшәй алмай", - тигән аҡланыуҙар ишетергә мөмкин. Бында улар балалары хаҡында хәстәрлек күргән һымаҡ, әммә нигеҙҙә үҙ ихтыяжын ҡәнәғәтләндерәләр. Бындай мөнәсәбәттәрҙе алға һөргән ата-әсә балаларының үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫыу көнөн кисектерә йәки ҡатмарлаштыра. Һөйөүҙәрен яңылыш аңлатып, улар балаларын һәр саҡ бәләкәй итеп күрә, гелән үҙҙәренең ярҙамына мохтаж булыуын хуплай ғына.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 7 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". Мелодраматический сериал. 13-я и 14-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.10 Ночные новости.
01.20, 03.05 "Ограм на счастье". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Измена". Сериал (16+).
04.35 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Родительский день". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Рая знает". 1-3-я серии. Детективный сериал (12+).
23.55 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Россия без террора. Дагестан. Война и мир", "Прототипы. Горбатый. Банды 50-х" (16+).
02.25 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Автограф" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал**
**12.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 20.15 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**23.30 "Дознание" (16+).**
**24.00 "Май". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Красный паша" (12+).**

## 8 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". Сериал
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят!" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00. "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "Смертельная охота". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.30 "Измена". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Реликт". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Рая знает". 4-6-я серии. Сериал (12+).
23.55 "Вести.doc" (16+).
01.35 "Климатические войны. В шаге от бездны", "Смертельные опыты. Вакцины"
03.10 "Сын за отца". Драматический сериал (16+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы" (12+).**
**18.00 "Асыҡ дәрес" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.45 "Замандаш" (6+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Короли лета". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Заблудшая" (12+).**

## 9 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Тест на беременность". Сериал
14.30, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Все сначала". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25, 03.05 "Расчет". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.20 "Измена". Сериал (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Вести. Дежурная часть".
12.05 "Наш человек" (12+).
13.05, 03.45 "Диктор Иванович. Солдат телевидения".
14.00 Разговор с Дмитрием Медведевым.
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.30 "Вести".
16.25 "Земский доктор-2". Мелодраматический сериал (16+).
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Рая знает". 7-8-я серии. Детективный сериал (12+).
23.00 "Специальный корреспондент"
00.40 "Они были первыми. Валентин Зорин" (12+).
02.45 "Сын за отца". Сериал (16+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Мелодии души". Поет Радик Гареев (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Кузбасс" (Кемерово).**
**20.30 "Сәңгелдәк" (0+).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. СКА (Санкт-Петербург) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Три дня на убийство". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Любишь не любишь?" (12+).**

## 10 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Все сначала". Сериал (16+).
13.10 "Время покажет" (16+).
14.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Все сначала". 3-я и 4-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Грязная Мэри, безумный Ларри". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Измена". Сериал (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Вести. Дежурная часть".
11.55 "Тайны следствия". "Панацея". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Рая знает". 9-я и 10-я серии (12+).
23.00 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.40 "История нравов. Людовик XV", "История нравов. Великая французская революция" (16+).
02.40 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.40 "Березка". Капитализм из-под полы" (12+).
04.40 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Историческая среда" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Учебник любви". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "В ночь лунного затмения" (12+).**

## 11 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Все сначала". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.35 "Вечерний Ургант" (16+).
23.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
01.50 "Фарго". Детективный сериал. 9-я серия (16+).
02.50 "Полет Феникса". Худ.фильм (16+)
04.55 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Извозчик". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 Торжественная церемония вручения Первой российской национальной музыкальной премии.
00.05 "Стиляги". Мюзикл (12+).
02.55 "Хулио Иглесиас. Жизнь продолжается".
03.50 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости.**
**11.45 "Герой нашего времени". Сериал**
**12.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Истории в табличках" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (0+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Автограф" (12+).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Воспоминания о будущем". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Индийская насмешница" (12+).**

## 12 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Обмани, если любишь". Сериал (16+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Людмила Сенчина. Хоть поверьте, хоть проверьте" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
14.50 "Ералаш" (12+).
15.20 "Мачеха". Худ. фильм (12+).
17.10 "Следствие покажет".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?"
19.10 "Концерт Ирины Аллегровой в "Олимпийском" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Голос" (12+).
23.45 "Что? Где? Когда?"
01.00 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Рой Джонс (Россия) - Энцо Маккаринелли (Великобритания). Прямой эфир (12+).
02.00 "Синатра: Все или ничего" (16+).
04.20 "Модный приговор".
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.40 "Ищу тебя". Худ. фильм (16+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Тренды" (12+).
09.30 "Правила движения" (12+).
10.25 "Личное. Ирина Скобцева" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Две жены" (12+).
12.20 "Два Ивана". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Два Ивана". Сериал (12+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Муз. конкурс.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Слишком красивая жена". Сериал. 4 серии (12+).
00.50 "Храни ее, любовь". Мелодрама
02.55 "Судьба". Худ. фильм (12+).
04.55 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Тарзан" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2015" (6+).**
**17.00 Гала-концерт XX смотра-конкурса самодеятельного художественного творчества таможенных органов Российской Федерации.**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Знай наших!"**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Четвертый период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Шпион, выйди вон!" Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Шәүрәкәй" (12+).**

## 13 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Обмани, если любишь"
06.00 Новости.
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Барахолка" (12+).
13.10 "Гости по воскресеньям".
14.10 "Королева бензоколонки". Худ. фильм.
15.40 "Если любишь - прости". Худ. фильм (12+).
17.50 "Точь-в-точь". Шоу перевоплощений (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод". Криминальный сериал
24.00 "Синатра: Все или ничего". Док. фильм. Часть 2-я (16+).
02.25 "Модный приговор".
03.25 "Мужское/женское" (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.35 "За витриной универмага". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.55 "Память сердца". Детективный сериал. 4 серии (12+).
14.00 "Вести".
14.15 "Память сердца". Продолжение сериала (12+).
17.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым" (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Синяя птица".
01.00 "Ночная фиалка". Мелодрама
03.00 "Судьба". Худ. фильм (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Осрашыу" (12+).**
**09.00 "Четвертый период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Жить вечно" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 Гала-концерт XX смотра конкурса самодеятельного художественного творчества таможенных органов Российской Федерации (6+).**
**18.00 "(Не)жданный принц" (16+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Танцуют все!" (12+).**
**20.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**20.30 "Любимое дело" (0+).**
**21.00 "Это мы!" (0+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.30 "Байыҡ-2015" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Париж любой ценой". Худ. фильм (12+).**
**02.00 "Свидание с джазом" (12+).**

ЙӘМҒИӘТ, СӘНҒӘТ, МӘҘӘНИӘТ...

# ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘР БӘЙГЕ ТОТТО



**Өфөлә "Йәш ғаилә - 2015" Республика бәйгеһенең еңеүселәре билдәнде. Ике көн буйына барған марафонда Башҡортостандың иң яҡшы ете ғаиләһе ҡатнашты.**

БР Спорт һәм йәштәр сәйәсәте министрлығы ойошторған был сараға ҡатнашыусылар Бәләбәй, Ғафури райондарынан, Нефтекама, Салауат, Дүртөйлө, Өфө ҡалаларынан килде. Ойоштороусылар быйыл конкурстың традицион бәйгеләренән баш тартып, уны баш ҡаланың алты интерактив майҙанында квест форматында үткәрҙе. Ғаиләләр кулинар, интеллектуаль һәләттәрен күрһәтте, ГТО нормаһын үтәне. "Иң спортсы ғаилә" тип Салауаттан Фәхретдиновтар танылды. Әҙәби майҙансыҡта Дүртөйлөнән Хәмәтдиновтар еңеү яуланы. Хәрби-патриотик майҙансыҡта Нефтекаманан Нуртдиновтарҙы билдәләнеләр. Ғафури районынан Рафиҡовтар ғаиләһенең ризығы иң тәмлеһе булды. Мажаралар майҙансығында - баш ҡаланың Ленин районынан Зариповтар, халыҡ майҙансығында Бәләбәйҙән Федоровтар ғаиләһе, фотоквеста Өфөнөң Совет районынан Сәйфетдиновтар ғаиләһе еңеп сыҡты. Шулай ҙа төп еңеүселәр гала-концерттағы сығыштары буйынса билдәләнде. Өсөнсө урынға - Рафиҡовтар, икенсе урынға - Нуртдиновтар, беренсе урынға Хәмәтйәновтар лайыҡ булды. Гран-при Өфөнән Сәйфетдиновтарға тапшырылды.

# СӘМИҒУЛЛА ӘСИР ИТТЕ



**"Йәшлек-шоу - 2015" республика йәштәр фестивалендә Учалы районынан Сәмиғулла Лоҡманов Гран-при яуланы.**

Беренсе урынға - Мәскәүҙән Эдуард Ғәббәсов, икенсе урынға - Дәүләкән районынан Айгөл Муллагилдина, өсөнсө урынға Стәрлетамаҡтан Гөлназ Йосопова лайыҡ булды. Шулай уҡ 2015 йыл һөҙөмтәләре буйынса түбәндәге номинацияларҙа еңеүселәр билдәләнде. "Иң яҡшы текст авторы" - Гөлнур Ҡыуатова, "Йыл йырсыһы" - Илгиз Абдрахманов, "Йыл асышы" - Илнур Рамазанов, "Иң шәп аранжировкалаусы" - Айҙар Хәмзин, "Йыл проекты" - Силәбе ҡалаһында үткән Башҡорт Party, "Виртуаль йондоҙ" - Милена Зарипова, "Иң яҡшы клип" - E7E-media студияһының эше, "Йыл йыры" RNT-ның "Аяҡ аҫтында" йыры.

# МУЗЫКА ФЕСТИВАЛЕ

**8-11 декабрҙә Өфөлә Башҡортостан композиторҙар берлегенең 75 йыллығына арналған Музыка фестивале үтә. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында башҡорт профессиональ сәнғәтенең бөтөн жанрҙарын һәм башҡорт композитор мәктәбенең кимәлен күрһәткән концерттар үтәсәк.**

Фестиваль Башҡорт опера һәм балет театрында асыла. Симфоник музыка концертында БР Милли симфоник оркестры, БР Дәүләт академик хор капеллаһы ҡатнаша. Салауат Асҡаров, Иҙрис Ғәзиев, Раил Кучуков, Зөлфирә Фәрхетдинова, Әлим Ҡәйүмов симфоник әҫәрҙәр һәм операларҙан ариялар башҡарасаҡ. Концертта башҡорт музыка мәктәбенә нигеҙ һалған Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Заһир Исмәғилов, Хөсәйен Әхмәтов, Рәүеф Мортазин, Нариман Сабитов, Халиҡ Заимов, Шамил Ибраһимов, Таһир Кәримов, Камил Рәхимов, Рәиф Ғәбитовтың әҫәрҙәре башҡарыла.

9, 10, 11 декабрь Башҡорт дәүләт филармонияһында БР сәнғәт әһелдәре, халыҡ-ара конкурстар лауреаттары сығыштары, йәш композиторҙар әҫәрҙәре яңғыраясаҡ.

# ВӘХИТ ЙЫРЛАЙ...



**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хызыровтың юбилей кисәһе уҙғарылды.**

Вәхит Хызыровтың 20 йылдан ашыу ижади тормошо Башҡорт дәүләт филармонияһы менән бәйле. Йырсының репертуары жанр яғынан үтә бай. Унда төрлө телдәрҙә башҡарылыусы классика төп урынды алып торһа ла, йырсыға заманса эстрада йырҙары ла ят түгел. Ә уның башҡарыуындағы башҡорт халыҡ йырҙары иһә - юғарылыҡтың иң үрендә.

Вәхит Хызыров бик күп фестивалдәрҙә, мәҙәниәт көндәрендә ҡатнашҡан, Рәсәй төбәктәренә һәм сит илдәргә гастролгә сыҡҡан. Күп йылдар йыр бәйгеләрендә жюри ағзаһы, Өфө сәнғәт училищеһында белем бирә. "Ул үҙенсәлекле йырсы ғына түгел, ә үҙенсәлекле уҡытыусы ла һәм уның һәр уҡыусыһы - шулай уҡ үҙенсәлекле", - ти коллегалары. Быны тамашасы Вәхит Хызыровтың юбилей кисәһендә үҙе күреп инанды: унда башлыса уның уҡыусылары сығыш яһаны һәм һоҡландырҙы.

# "ТАМЫР"ҘЫҢ СИРАТТАҒЫ ЕҢЕҮЕ

**"Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Тамыр" балалар телеканалы "Мәғариф һәм күңел асыу тапшырыуҙары" йүнәлеше буйынса "ТЭФИ-Төбәк"-2015 Бөтә Рәсәй телевизион конкурсының төп призына лайыҡ булды. Бүләкләү тантанаһы Түбәнге Новгородта үтте.**

"Физра. Махсус хәбәрсенең спорт блогы" проекты "Балалар өсөн тапшырыу" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. "Тамыр" телеканалының баш режиссеры Рөстәм Аҙнабаев "Ҙур сумаҙан" проекты менән "Телевидение тапшырыуы режиссеры" номинацияһында бронза Орфейға эйә булды. "Физра" программаһына өсөнсө йыл ғына булыуға ҡарамаҫтан, уңыштары байтаҡ, - ти "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Уның иҫәбендә - "Включайся" халыҡ-ара балалар телевидениеһы фестивалендә ике еңеү, "Карусель" федераль каналында эфир, Рәсәй телевидение академияһының махсус призы. Хәҙер иһә проект "ТЭФИ-Төбәк" премияһына номинант булды!".

Башҡортостан юлдаш телеканалының "Спорт легендалары" программаһы махсус номинацияла еңеп сыҡты. Тапшырыуҙа спорт геройҙары ғәҙәти кешеләр булараҡ һүрәтләнә. "Ярыштар араһында геройҙарыбыҙ балалар тәрбиәләй, өй эштәре менән булыша. Хатта Олимпия чемпиондары ла депрессияға бирелә, әммә спортсыларҙың ҡайғырып ултырырға ваҡыты юҡ, улар йәнә күнекмәләргә йөрөй һәм маҡсаттарына табан бара", - тип һөйләй Башҡортостан юлдаш телеканалының спорт редакцияһы етәксеһе Роза Хәбибуллина.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Декабрь (Сәфәр - Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (25) дүшәмбе | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 8 (26) шишәмбе | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 9 (27) шаршамбы | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (28) кесе йома | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (29) йома | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 12 (1) шәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:46 |
| 13 (2) йәкшәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:46 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

# КҮҘ ТЕЙМӘҺЕН!

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы бер нисә еңелеүҙән һуң, ниһайәт, үҙенең еңеүгә булған ынтылышын уңышлы матчтар менән иҫбатлай башланы.**

Юлаевсыларҙың көсөн тәүгеләрҙән булып Тольяттиның "Лада"һы тойҙо. Өфөләге матч, хужалар файҙаһына, 5:1 иҫәбе менән тамамланды.

Өфө хоккейсылары "Аҡ Барс" командаһын да 4:2 иҫәбе менән еңеп, турнир таблицаһында юғарыраҡ урынға күтәрелде.

Ситтәге уйындарҙа ла юлаевсылар һынатманы. Новокузнецкиҙың "Металлург"ын 4:2, "Барыс"ты 4:1, "Трактор"ҙы 3:1 иҫәбе менән еңеп ҡайтып, Өфө боҙонда Магнитогорскиҙың "Металлург"ын 6:2 иҫәбе менән ҡыйратып, Чернышев дивизионында икенсе баҫҡысҡа күтәрелде. Ә КХЛ-дың дөйөм таблицаһында юлаевсылар "ЦСКА", "Локоматив", "Себер" һәм "Йокерит" командаларынан ҡала килә 5-се урынды биләй.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**6 декабрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

**8 декабрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма

**9 декабрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**10 декабрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия

**11 декабрь "Әйтер һүҙем бар..."** шиғриәт балы

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 декабрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 14.00

**9 декабрь "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт

**10 декабрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**11 декабрь "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

**КЕМ АЛЫҠ?**

"Аҡса булһа бер муҡса" спектакле премьераһына саҡырыу ҡағыҙын әүҙем башҡорт егете Заһир Ишкин отҡайны. Ошо матур йоланы дауам итеп, тағы ла ике спектаклгә саҡырыу ҡағыҙын уйнатабыҙ.

1. Театр директоры Азат Йыһаншин Йәштәр театрында эшләгән дәүерҙә ниндәй роле өсөн Ш. Бабич премияһы алды?
2. Яратҡан актерыбыҙ һәм йырсыбыҙ Венер Камаловтың тыуған районы ниндәй?

*272-12-18, театрҙың әҙәби бүлеге.*

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 декабрь** РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостандың, Татарстандың халыҡ артисы Фәриҙә Ҡудашеваның 95 йыллығына арналған концертҡа саҡыра. Фәриҙә Ҡудашева 1920 йылдың 15 декабрендә Шишмә районы Келәш ауылында тыуған. Мәктәп йылдарында уҡ башҡорт халыҡ йыры "Һыуыҡ шишмә"-не йырлап, барыһын да үҙенең талантына ғашиҡ итә. Дүртөйлө районында ете класс белем алғас, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Башҡортостан радиоһында эшләгән осорҙа халыҡ араһында киң билдәлелек яулай. 1956 йылда йырсы Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә күсә. Ул өс меңгә яҡын йыр башҡара. "Ашҡаҙар", "Азамат", "Ҡаһым түрә", "Сәлимәкәй" кеүек халыҡ йырҙарын үҙенә генә хас оҫталыҡ менән башҡара. Концерт "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була.

**КЕМ АЛЫҠ?**

1. Йырсының тормош иптәшенең исемен атағыҙ.
2. Фәриҙә Ҡудашева Башҡорт дәүләт филармонияһында нисәнсе йылдарҙа эшләй?
3. Мәшһүр йырсының исемен мәңгеләштереү буйынса ниндәй эштәр башҡарылған?

*276-24-41, филармонияның әҙәби бүлеге*

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 декабрь "Аҫылйәр"** (М. Фәйзи), музыкаль комедия

**6 декабрь "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. Башлана 12.00

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**11, 15 декабрь "Ҡырмыҫҡа иләүе"** (Д. Йосопов), лирик комедия.

ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ

# ШАРШАУ

**Халҡыбыҙҙың көнкүреш әйберҙәренең береһе шаршау милли биҙәк сәнғәтенең ҡабатланмаҫ бер өлгөһө ул.**

Был аҫыл туҡыма үҙенең боронғолоғо, матурлығы менән хайран итә. Шаршау - ул ниҙелер ышыҡлап, һуҙып элә торған ҡорма. Башҡорттарҙың оло шаршауынан башҡа бишек шаршауы, әрлөк шаршауы ла булған. Шаршау мотлаҡ һуғылған туҡыманан эшләнгән. Ерлеге күбеһенсә ҡыҙыл йәки ҡуйы һары төҫтә булған. Шаршауҙың тотош биҙәкләп һуғылғаны һәм төрлө ептән сигеп, нағышлап эшләнгәне бар. Ул борон ҙур, түңәрәк тирмәне ике өлөшкә - хужалыҡ һәм ҡунаҡ, ҡатын-ҡыҙ һәм ираттар, йәки балалар яғына бүлеп торған.

Беҙҙең яғына килгәндә инде шаршауҙы рәссамдың үҙ ғүмерендәге иң ҡәҙерле һәм мәртәбәле эшенә тиңләргә мөмкин. Шаршауҙың иңе була. Башҡорттар күбеһенсә дүрткә биш иңле шаршау теккән. Оҙонлоғо-киңлеге бишәр метрлығы ла була. Шаршау мул биҙәлгән урта өлөштән һәм шулай уҡ ситләгән өлөштән тора. Урта өлөштәге төҫтәрҙең төрлөлөгө, биҙәктәрҙең күплеге хайран итә. Ҡусҡар биҙәк, ҡатлы-ҡытлы өймәле биҙәк, төрлө геометрик фигуралар, күп мөйөшлө йондоҙсоҡтар...

Башҡорттар һәр ваҡыт тәбиғи буяуҙар ҡулланған. Шаршауҙағы төҫтәрҙең төрлөлөгөн һанап бөтөрлөк түгел. Мәҫәлән, ҡыҙыл, һары төҫтәр - ҡояшты, ә ҡара төҫ ерҙе аңлатҡан. Әллә күпме йылдар элек һуғылған, сигелгән шаршауҙағы төҫтәрҙең сағыулығы, беҙҙең көндәргәсә уңмай һаҡланыуы ла ғәжәп. Әллә күпме мөғәнә һалып сигелгән, һуғылған шаршауҙарҙы хәҙер һирәк осраҡта инәйҙәребеҙҙә һәм музейҙарҙа ғына күрергә мөмкин.

**Миңзәлә ФӘСИМОВА.**



ЯҢЫ КИТАП

# УҠЫРҒА ОНОТМАЙЫҠ!

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте үҙ уҡыусыларын йәнә лә яңы баҫмалары менән ҡыуандырҙы.**




Флүр Гәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" исемле китабы нәшер ителде. Был күләмле әҫәр "Тән ғазабы","Йән ғазабы" һәм "Йән дауаһы" тип аталған өс китаптан тора. Был автор киң билдәле "Яңы башҡорт" романы менән әҙәбиәтебеҙгә яңы тема һәм яңы герой алып килгәйне. Ижадта новаторлыҡҡа ынтылған яҙыусының "Аҙғын тәүбәһе" трилогияһы ла башҡорт әҙәбиәтен тағы бер яңы тема һәм яңы герой менән байыта: Салауат Юлаев тоҡомо, Афған һуғышы ветераны, талантлы рәссам, эшҡыуар Салауат Байғазин образын һүрәтләй, мөңгелек проблемаларҙы бөтөнләй көтөлмәгән яҡтарҙан яҡтырта, йәшәү мәғәнәһен аса. "Аҙғын тәүбәһе" - башҡорт әҙәбиәтендә магик реализм ысулы ҡулланып ижад ителгән тәүге әҫәр, унда магия, эзотерика, күрәҙәселек, сихырсылыҡ төшөнсәләре реаль күренеш сифатында һүрәтләнә. Әҫәрҙә төп герой Салауат Байғазин үҙенә ғәзиз булған бөтөнөһөн бер юлы юғалта... Совет иле менән бергә идеалдары, инаныс-өмөттәре, барлыҡ донъяһы емерелә. Герценның "Кем ғәйепле?", Чернышевскийҙың "Нимә эшләргә?" тигән бөйөк һорауҙарына "Ни хәл имен ҡалырға?", "Артабан нисек йәшәргә?" тигәндәрен өҫтәй Салауат Байғазин һәм йәшәү мәғәнәһен табыуы менән яуап бирә...

Академик, төркиәт белгесе Зиннур Ураҡсиндың "Тәҙрә уйыусы" китабына күренекле йәмәғәт эшмәкәре Мөхәмәтхан Ҡулаев тураһындағы "Тәҙрә уйыусы" тарихи повесы, халҡыбыҙҙың бөйөк рәссамы Әхмәт Лотфуллин тураһында яҙған "Рәссам", шулай уҡ "Мәрмәр баҫҡыстар" тип аталған повестары һәм "Енеү көнөндә тыуған малай" һәм "Ҡаҙан" хикәйәләре индерелгән. Ул үҙенең уҡыусыһына уймаҡ хикәйәләре аша яҡшы таныш. Автор әҫәрҙәрендә халҡыбыҙҙың һөйләшен һәм уй-фекерҙәрен, йәшәү рәүешен сағылдырған мәҡәлдәр, әйтемдәр йыш ҡуллана.

"Тәҙрә уйыусы" - белеме буйынса табип, телсе-ғалим, тәүге башҡорт алфавитын, башҡорт-рус, рус-башҡорт һүҙлектәрен төҙөүсе, Башҡортостан хөкүмәте рәйесе вазифаһында беренсе автономиябыҙҙы төҙөүгә килешеүгә ҡул ҡуйыусы күренекле сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтхан Ҡулаев хаҡында. Башҡорттоң бөйөк улдарының береһе хаҡында беҙ сағыштырмаса аҙ беләбеҙ, шуға ла ғалим-филолог Зиннур Ураҡсиндың уның хаҡында художестволы әҫәр ижад итеүе, тарихтағы "аҡ тап"ты бөтөрөүгә һис шикһеҙ хуплауға лайыҡ", - тип билдәләне китаптың баш һүҙендә яҙыусы Әмир Әминев.

"Аҙашҡандар юлды табырмы..." йыйынтығы Рәсүл Байгилдиндың (Байгилде Моталлап) - тәүге китабы. Автор уҡыусыларға ваҡытлы матбуғат баҫмалары аша билдәле. 2005 йылда - "Шоңҡар" журналының, 2013 йылда "Киске Өфө" гәзитенең лауреаты булды. Уның әҫәрҙәрендә йәшәйеш, тормош фәлсәфәһе ярылып ята, тыуған ер, милләт яҙмышы проблемалары күтәрелә. "Күгәүен" повесында башҡорт әҙәбиәтендә сағылыш тапҡан заман эшҡыуары һәм сәйәсмәненең сетерекле яҙмышы һүрәтләнә.

Оҙаҡламай һатыу кәштәләренә "Йырлайыҡ, дуҫтар!" тигән популяр йырҙарҙан торған йыйынтыҡ сыға. Был баҫмаға "Төрлө йылдарҙан моңло йырҙар" исеме менән тыуған яҡ, атай-әсәй, мөхәббәт тураһында йырҙар тупланды. Төҙөүсеһе Гөлназ Фазлиәхмәтова.

Баҫмаларҙы "Китап" нәшриәте магазиндарында һатып алырға мөмкин.

**Нәркәс КҮРПӘСОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОМҒА ҺИПКӘН БЕЛЕНМӘҪ,

## ҡыҙға биргән күренмәҫ

Ҡомо юҡ һыу булмаҫ, яғаһы юҡ тун булмаҫ, законы юҡ йорт булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нәмә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Халҡы ярлы ғына йәшәгән бер дәүләткә яңы хаким килә. Халыҡтың йәшәйеш кимәлен күрһә лә, уларҙы ярлылыҡтан сығарыу тураһында түгел, тәүге көндән үҙенең матди хәлен яҡшыртыу тураһында уйлай ул һәм: "Быға тиклем дә фәҡирлектә көн күргән халыҡ был хәленә күнеп бөткәндер, бынан һуң да шулай йәшәүҙе дауам итә алыр. Мин үҙемдең ғаиләмде, балаларымды, ейән-ейәнсәрҙәремде тәьмин итергә тейешмен..." - тип ҡарар итә.**

**Шулай итеп, ул үҙенең был ниәтен тормошҡа ашырырға тотона. Ғаиләһен батшалар көнләшерлек һәр төрлө байлыҡҡа күмә. Хәҙер инде балаларының ғаиләләренә сират етә: был юлы инде уға тағы ла күберәк көс һалырға тура килә, ләкин ул барыбер үҙ ниәтенә өлгәшә, балаларының ғаиләләрен һәр батша көнләшерлек итеп байлыҡ менән тәьмин итә. Сират ейән-ейәнсәрҙәргә етә...**

**Шул саҡта был хакимдың ҡылыҡтарына Хоҙай үҙе иғтибар итә һәм уның ғәҙелһеҙ эштәренә сик ҡуйып, ғәҙеллек урынлаштырырға була. Байлығы кирегә аға башлағас, хаким сығынсылай һәм байлыҡ туплау эшен тағы ла нығыраҡ әүҙемләштерә. Ләкин был эшкә көсөн нығыраҡ түккән һайын, көсһөҙләнә бара. Үҙе лә хәлдән тая, балалары ла бөлә, ә ейән-ейәнсәрҙәр тыумай ҡала... Хакимдың бар тоҡомо ҡорой, ә ҡалған байлығын бурҙар ташып бөтә...**

**Шуның өсөн, елгә оса торған байлыҡ туплауҙан һаҡланырға кәрәк. Елдән килгән елгә килә. Был Йыһан ҡануны..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5497